✓ **Иғтибар! Икенсе ярты йыллыҡҡа “Киске Өфө”гә ташламалы хаҡ менән яҙылыу бара: 237 һум 54 тин. 1 апрелдән һуң хаҡтар күтәрелеүе мөмкин. Ашығығыҙ! Квитанцияларығыҙҙы редакцияға ебәрергә онотмағыҙ. Индексыбыҙ – 50665.**


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

10-16 МАРТ (БУРАНАЙ) 2007 ЙЫЛ

№10 (220)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Кем ҡайғыртыр икән...** ауыл яҙмышын?



5

Уйланыуҙарым



10

**Шәкәр сире...** шәхси бәләләрҙән



12

**Асылыбыҙҙы асыр...** зыялылар һүҙе ҡайҙа?



13

**ТВ ПРОГРАММАҺЫ**

14-15


*”...хужа ҡунаҡсыллыҡ ҡағиҙәләрен теүәл үтәр өсөн ятыр урынды үҙе әҙерләне. Үҙебеҙҙең түшәнер-яҫтаныр ҡаралтыларыбыҙ булһа ла, һәйбәт, йомшаҡ юрғандар бирҙе лә беҙҙең ятырҙы көтөп торҙо. Мин башта уның шулай тороуына аптырабыраҡ ҡалғайным, аҙаҡ аңланым: беҙ ятҡас, ул юрғандарҙы йәтешләп, ябындырып сығып китте. Башҡорттарҙа ҡунаҡсыллыҡ ҡағиҙәһе шулай башҡарыла икән. Был - үҙенсәлекле хөрмәт күрһәтеү”.*

**С. Рыбаков (1867-1921).**



ИЖАДХАНА

# МАҢЛАЙ КҮҘЕ МЕНӘН ТҮГЕЛ,

## йөрәк менән тоям матурлыҡты

**Рәссам Әхәт Ғизелхаҡ улы Хисаметдинов Мәләүез ҡалаһында йәшәй. 1970 йылда Өфө сәнғәт училищеһын тамамлаған. Шунан ул Мәләүездә балалар сәнғәт мәктәбендә эш башлай. Картиналарҙы ныҡлап 1990 йылдан ижад итә, күргәҙмәләре Башҡортостан ҡалаларында, Ырымбурҙа, Екатеринбургта ойошторола. Уның картиналары Австрия, АҠШ, Германияла шәхси коллекцияла ла һаҡлана. Бөгөнгө "Ижадхана" ҡунағы - Әхәт ХИСАМЕТДИНОВ. Уның ижад, матурлыҡ, йәшәйеш тураһындағы уй-фекерҙәре беҙҙең уҡыусылар күңеленә лә хуш килер тип ышанабыҙ.**

### МИНДӘ РӘССАМДЫ АСТЫЛАР...

Был донъяға тыуған һәр кешегә лә Хоҙай тарафынан бирелгән Бирелә. Һәр әҙәмдең бурысы уларҙы ғүмер итеү дәүерендә тормошҡа ашырыу. Йөрәк төпкөлөнә йәшеренгән алтын-хазинаны бүтәндәргә тапшырыуы еңелдән түгел, быны өсөн ҡайһы саҡ тулайым кеше ғүмере лә бик аҙ булыуы мөмкин. Мин үҙ асылымды дүртенсе синыфта уҡығанда астым.

Дөрөҫөрәге, миңә үҙемде үҙемә астылар. Уҡытыусыбыҙ әкиәт буйынса һүрәт төшөрөргә ҡушҡас, мин "Йомро икмәк" әкиәтенә иллюстрация эшләнем. Әле лә онотмайым, уҡытыусым һүрәтте шул тиклем маҡтаны һәм минең оҫта рәссам булыуыма ышандырҙы. Шул көндән, шул минуттан серле һынлы сәнғәт донъяһына илтеүсе ҡапҡа асылды. Бына нисә йыл дауамында үҙ фекеремде, хис-тойғоларымды, хыялымды мин кешеләргә төҫтәр аша, бумала ярҙамында сағылдырам.

(Аҙағы 11-се биттә).

✓ **Башҡорт ҡыҙҙарына ҡапыл ғына яҡын барырлыҡ түгел. Улар һәр мөнәсәбәтте ысынға ала, тураһын әйтә, маҡсатың изге булһа ла, теләгеңде бер яҡлы ғына ҡабул итә,- "бәйләнергә маташа" тип баһалай.**



ШАҢДАУ

# АТА ДЕГӘНӘК, ҠАҘЫЯҠ...

## ҡыҙ-ҡатындарыбыҙ ҡырыҫлығы кеүек

● **Әмир Ғүмәровтың гәзиттең 9-сы һанында "Бер кәлимә фекер" рубрикаһында баҫылған "Ҡыҙ-ҡатындарыбыҙ ҡырыҫлығы - милләтебеҙ иммунитеты" тигән сығышына битараф ҡала алманым. Мәҡәләлә әйтелгән фекер күңелемдә ҡапма-ҡаршылыҡлы төрлө-төрлө уйҙар уятты. Һәр хәлдә, шундайын мәсьәлә ҡүтәрелгән икән, минеңсә, ундағы төп фекер төрлө яҡлап ҡаралырға, үҫтерелергә тейештер. Ҡырыҫлыҡтың тәбиғәт өсөн дә иммунитет булғанлығын беләбеҙ.**

Беҙ күп нәмәне тәбиғәт күренештәре менән сағыштырып, ундағы окшаш яҡтар менән бер ҡатар ҡуйып, мәсьәләгә образдар күҙлегенән ҡарарға яратабыҙ. Ғөмүмән, һәр бер фекер образлы, ҡанатлы булыуы менән отошло һәм күңелгә һеңеп ҡалыусан.

Ҡыҙ-ҡатындарыбыҙ ҡырыҫлығы хаҡында уйланғанда ла, һис шикһеҙ, йәй буйына көтөү йөрөгән болон-ҡыр йә урман эсе күҙ алдына килеп баҫа. Йәй буйына көтөү йөрөүгә һәм урыны саңдауға әүерелеүгә ҡарамаҫтан, унда ата дегәнәктәр һәм ҡаҙыяҡ үләндәре, тоғро һалдаттар кеүек, һерәйеп баҫып тороп ҡала. Һалҡын ҡыштарға ла, ыжғыр бурандарға ла бирешмәй улар. Ҡыш үтеп, яңылары тамырҙарынан баш төртөп, үҫеп сыҡҡас ҡына, ергә ауа ундай үләндәр. Уларҙы мал ашамай, теләһә лә, ашай алмай, хатта "катыморон"дар ҙа ата дегәнәк менән ҡаҙыяҡты мөрхәтһенмәй. Әммә улар кәрәк тәбиғәткә, башҡа тере йәндәргә, нәфис үләнсәскәләргә йәйен-ҡышын дым һаҡлау өсөн да кәрәк.

Әгәр ҙә "Ҡыҙ-ҡатындарыбыҙ ҡырыҫлығы милләт өсөн нимәгә кәрәк?" тигән һорау ҡуйылһа, мин "Тәбиғәткә ата дегәнәк менән ҡаҙыяҡ ниңә кәрәк булһа, ҡыҙ-ҡатын ҡырыҫлығы шуның кеүек кәрәк", тип яуап бирер инем. Ысынлап та, дегәнәк менән ҡаҙыяҡ үҫкән ергә мал да, кеше лә килмәй, ул ер тапалмай. Дегәнәге кешенең кейеменә йәбешеп бара, үлән ашайым тип, ҡаҙыяктан ауыҙын канаткан мал бүтәнсә был урынға аяҡ та баҫмай.

**Хәниф МӘЖИТОВ.**

# ҠЫРЫҪЛЫҠТЫҢ...

## ҡырын яғы

● "Ҡыҙ-ҡатын холкондағы ҡырыҫлыҡ ир-аттың уға ҡарата етди булыуын талап итә, уға шаярып, йә юрый ғына яҡынлап булмай", ти автор үҙенең бер кәлимә фекерендә. Быныһ менән килешәм, әммә был күренештең кире һөҙөмтәләрен дә үҙемдә күп татыным. Беҙҙең башҡорт ҡыҙҙарына ҡапыл ғына яҡын барырлыҡ түгел. Улар һинең һәр төрлө мөнәсәбәтеңдә ысын итеп ҡабул итеп бара, йөҙеңә бәреп, тураһын әйтә, маҡсатың нисек кенә изге булмаһын, уның менән бәйләнешкә инергә теләүеңдә тик бер яҡлы ғына - "бәйләнергә маташа" тип кенә баһалай. Йәки булмаһа, һин яныңа барған һылыу, әгәр ҙә кейәүгә сыкмаған ҡыҙ икән, ул һиндә үҙенең буласаҡ потенциаль ирен күрергә теләй һәм тәүге мәлдән алып ҡәтғи һәм анык талаптар ҡуя. Дөрөҫөрәге, ир-атты быныһ менән уңайһыҙ хәлгә ҡуя.

Хөрмәтле нәфис заттар шуны белһен, бындай осракта теләһә ниндәй ир-ат ситкә тайпылыусан. Ҡыҙ-ҡатындарыбыҙҙың ҡырыҫлығы ҡайһы саҡ ана шулай кире һөҙөмтәгә алып килә: беҙҙең ир-аттар бер ситкә тибәрелгәс, башҡа милләт ҡыҙҙарының "тоҙағына эләгә", ә ҡыҙҙарыбыҙ башҡа милләт вәкиле ир-атына кейәүгә барырға мәжбүр.

**Әнүәр ХӘЛИСОВ.**

**Шулай итеп...**

**Ҡыҙ-ҡатындарыбыҙ ҡырыҫлығы хаҡындағы фекерҙе артабан дауам итеүселәр, йә булмаһа, инҡар итергә теләүселәр булһа, редакцияға хат яҙып ебәрергә онотмағыҙ. Нәфис затыбыҙ ниңә ҡырыҫ һуң?**

ИШАРА

# АШАҒАН БЕЛМӘЙ,

## белеп тураған белә

**Бер хәтирә иҫкә төшөп, рәхәтләнеп көлөп ултырҙым да, һеҙҙең менән уртаҡлашырға булдым. Балалар йортонан һуң Мәскәүгә барып, М. Калинин исемендәге МХПУ тигән юғары уҡыу йортона уҡырға индем. Стипендия бирәләр, тигәс, курсташым Лида менән кассаның кескәй генә тәҙрәһе аша студент билеттарын күрһәтеп, 16-шар һум аҡса алдыҡ. Ғүмеремдә тәүге тапҡыр ҡулға аҡса алыуым ине. Шуға аптырап, Лиданан: "Был аҡса бер айға биреләме, әллә бер йылғамы?" - тип һораным. Курсташым миңә аптырап ҡарап торҙо ла, ҡайҙалыр ашығып китеп тә барҙы. Ә минең белгем килә. Һаҡ ҡына касса тәҙрәһен ҡаҡтым: "Ғәфү итегеҙ, был аҡса бер айғамы, әллә бер йылғамы?" - тип йылмайҙым. Апай ниңәлер асыуланып, тәҙрә ҡапҡасын япты ла ҡуйҙы. Ә бит минең белгем килә, сөнки балалар йортонда ҡулаҡса тотҡаныбыҙ булманы - бөтәһе лә бушлай ине.**

Лиданы эҙләп таптым да, дөйөм ятаҡҡа ҡайтып киттек. Юл ыңғайы аҙыҡ-түлек магазинына индек. Минең шатлығымдың сиге юҡ ине, сөнки бөтөн нәмә шундай арзан: май - 32 тин, шәкәр - 54 тин. Ә минең 16(!) һум аҡсам бар.

Шулай күңелле генә йәшәп, бер аҙна үткәйне, аҡсам бөттө лә ҡуйҙы. Һис тә ышанғым килмәй, аҡсамды юғалтканмындыр, тип уйлайым. Бөтөн кеҫәләремде тикшереп, китап биттәре араһын ҡарап бөттөм.



Юҡ, бер тин дә юҡ. Иртәнсәк ҡоро сәй генә эсеп, уҡырға барҙым. Төш мәлендә бөтәһе лә ашханаға йүгерҙе, ә мин урынымда ултырып ҡалдым. Курс етәксеһе: "Иптәш Яхина, ә һин ниңә ашханаға бармайһың, гел йылмайып-көлөп кенә йөрөй инең, бөгөн башыңды түбән эйгәнһең?" - тип һораны. Шым ғына: "Аҡсамды юғалттым", - тинем. Стипендияны күпме алыуым, атай-әсәйем, туғандарым тураһында һорашып, ул миңә 1 һум аҡса тоттороҙо ла: "Бар, ашханаға барып, ашап кил, төштән һуң һөйләшербеҙ", - тине. Төштән һуң уҡытыусы шатлыҡлы хәбәр еткерҙе. Балалар йортонда тәрбиәләнгәндәргә стипендияға өҫтәп, тағы ла 16 һум бирелә икән. "32 һум күп аҡса түгел, һанап ҡына тотон. Ҡыш еткәс, кейем яңыртыу өсөн 60 һум алырһың", - тине. Шул саҡ курс етәксебеҙ Третьякова Надежда Петровнаны ҡосаҡлап үпкем килде, тик ҡыйманым. Башымды түбән эйеп: "Рәхмәт, апай!" - тигәндә күҙҙәремә йәш эркелде. Күҙ йәштәремде күрһәтмәҫ өсөн тиҙерәк ишек яғына йүнәлдем. Әллә ниндәй холҡом бар: берәйһе яуызлыҡ ҡылһа, була торған хәл, тип тыныс ҡабул итәм, ә яҡшылыҡ ҡылһалар, илағым килә, оялышымдан йәшеренеп илайым.

Надежда Петровнаны бер йылдан Пушкин музейына сәнғәт белгесе итеп эшкә күсерҙеләр. Ярты быуатка яҡын ваҡыт үтһә лә, мин уны рәхмәттәр укып иҫкә алам.

**Был ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та хәтирәләремде яҙыуымдың сәбәбе бар. Үҙәк телевидение аша ҡайһы бер чиновниктарҙың сығышын тыңлаһам, ниңәлер, балалар йорто иҫкә төшә. Ул чиновниктар ҙа, тап детдом балалары кеүек, хөкүмәт иҫәбенә йәшәйҙер. Иҫәп белмәгәс, пенсионерҙарға бирелгән 2 мең ярым һум аҡсаның аҙмы ул, күпме, йәшәү өсөн етәме, юкмы икәнен белмәйҙәрҙер. Шулай булмаһа, һәр сығыштарында, тормош һәйбәтләнде, тип әйтмәҫтәр ине...**

**Фәүзиә ЯХИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Кремлдә Башкортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов менән Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Путиндың эшлекле осрашыуы булып үтте. Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәсәй Президентына республиканың социаль һәм иҡтисади ҡаҙаныштары, милли проекттарҙың тормошҡа ашырылыу барышы һәм Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәй составына инеүенә 450 йыл тулыу байрамына әҙерләнеү саралары, сафҡа индереләсәк мөһим объекттар тураһында мәғлүмәт еткерҙе.

✓ БР Хөкүмәте Премьер-министры Рафаэль Байдәүләтов етәкселегендәге Башкортостан делегацияһы эш сәфәре менән Саксонияла булып ҡайтты. Хәбәр ителеүенсә, Башкортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры менән Саксония Ирекле Дәүләте Премьер-министры Георг Мильбрадт араһында һөйләшеүҙәр һөҙөмтәһе буйынса Протоколға ҡул ҡуйылды. Был документ Башкортостан менән Саксония араһында артабан да ышаныслы һәм емешле хеҙмәттәшлек итеүгә нигеҙ һала, тип билдәләнде.

✓ БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Илишев рәйеслегендә Башкортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуының 450 йыллығы байрамын үткәреү буйынса ойоштороу комитетының ултырышы булды. Мәскәүҙәге Башкортостан көндәре Яңы Манеждағы күргәҙмә сараларынан башланасаҡ. Республика сәнғәт оҫталарының гала-концерты "Яңы опера" театрында үтәсәк. Өсөнсө ҙур сара - һабантуйҙы "Битца" ат-спорт комплексында үткәреү мәсьәләһе хәл ителә.

✓ 2010 йылға төҙөләсәк торлаҡ һәр кешегә 0,5 квадрат метр тәшкил итәсәк. Республика төҙөлөш комплексы үҙ алдына ошондай бурыс ҡуя.

✓ 11 мартта Башкортостанда ауыл биләмәләренең вәкәләтле органдарына депутаттар һайлау үтә. БР Үҙәк һайлау комиссияһынан хәбәр итеүҙәренсә, депутатлыҡ мандаты өсөн 17 меңдән ашыу кандидат алышасаҡ. Кандидаттарҙың күбеһе үҙҙәрен күрһәтеүселәр. Партия линияһы буйынса 6 меңдән ашыу кандидат теркәлгән.

*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# Күктән йондоҙ бүләк итермен,

## йәки 8 Март арифметикаһы

**Йәмәғәт, хәлдәр нисек? Үҙегеҙҙе нисек тояһығыҙ, тим? Баш нисек? Ә кеҫә яғы? Шулай шул. Мин дә шул уҡ хәлдә - баш та буш, кеҫә лә. Кешелектең яртыһын тәшкил иткән ир-аттарҙың бөгөн күбеһенең хәле бер сама. Аллаға шөкөр, 8 Март та үтеп китте, тип еңел һулап ҡуйғанһығыҙҙыр әле бушап ҡалған аҡса янсығының төбөн ҡыра-ҡыра.**

Ир-егеттәрҙең һөйөклө (икенсе төрлөрәк итеп әйткәндә, байрам уңайы менән ҡотларлыҡ) ҡатын-ҡыҙҙары күп шул. Өйләнгәндәрҙең, әлбиттә, хәләл ефеттәре, ә буйҙаҡтарҙың осрашып йөрөгән ҡыҙҙары. Бынан тыш, күп кенә ир-аттарҙың ситтәге ("һулаҡай"ға йөрөй торған) гүзәл заттары ла була бит әле. Эш урынындағы ҡатын-ҡыҙҙарҙы ла оноторға ярамай - улар менән тормошобоҙҙоң күп ваҡытын бергә үткәрәбеҙ түгелме? Әсәйҙәр-өләсәйҙәр, һеңлеләр һәм апайҙар, күрше ҡыҙҙар - уларҙың һәр береһенә бәләкәс кенә булһа ла бүләк алып бирергә, һәр берәһен, һис юғында телефон аша булһа ла, ҡотларға кәрәк. Юғиһә, йәмәғәт... Хәйер, уныһын һеҙ минән дә яҡшы беләһегеҙҙер. Ғөмүмән, ир-ат үҙенең исем-шәрифен онотҡан хәлдә лә, ике датаны яҡшы хәтерләргә тейеш, тиген фекер йөрөй. Беренсеһе - законлы никахҡа инеү көнө булһа, икенсеһе - 8 март.

8 мартты ҡатын-ҡыҙҙар байрамы тип дөрөҫ атамағандар, шикелле. Минеңсә, ул иң тәүҙә һатыусылар байрамы. 8 Март алдынан магазиндар, кибеттәр, баҙарҙар бер ҡулына йөрөгән, икенсеһенә көшөлөгән услаған ир-заттар менән тула. Парфюмерия һәм косметика, ҡатын-ҡыҙҙарҙың эске кейеме һәм һауыт-һаба, көнкүреш техникаһы һәм открыткалар, сувенирҙар һәм йомшаҡ уйынсыҡтар, түшәк кәрәк-яраҡтары һәм китаптар... Уларҙың барыһын да байрам алдынан ир-егеттәр һыпырып алып бөтә. Сөнки бүләкһеҙ булмай. Ярамай. Ошо ваҡытҡа тап килтереп, ваҡытлы матбуғат саралары ҡатын-ҡыҙҙар яратҡан бүләктәр хаҡында кәңәштәр баҫтыра. Баҡтиһәң, ҡатын-ҡыҙҙарҙың күбеһенә ир-егеттәр оҙаҡ итеп һайлап алған бүләктәрҙең 80 проценты оҡшамай икән. Мәҫәлән, һауыт-һабаны, йәғни кәстрүл-таба, сынаяк-сәйнүктәрҙе гүзәл заттарҙың 5 процент самаһы ғына ҡыуанып ҡабул итә. Ҡалғандары өсөн иһә ындай бүләктәр "ҡатын-ҡыҙҙың урыны аш бүлмәһендә, плитә янында" тип әйтеү менән бер, имеш. Ҡатын-ҡыҙҙар ҡиммәтле бүләккә бик шат. Уларҙың күбеһенең фекеренсә, ир-ат байрам уңайы менән машина йәки ҡыйбатлы тун бүләк итергә бурыслы. Гүзәл заттарыбыҙ ноутбук, фотоаппарат йәки кеҫә телефоны кеүек бүләктәрҙән дә баш тартырға уйламай. Хушбыйҙы ла бүләк итергә мөмкин был байрамда. Тик теләһә ниндәй билдәһеҙ фирмаларҙыҡын түгел, ә кәмендә Францияла етештерелгәнен һәм "Шанель" кеүек бөтә донъяға билдәле булған фирманыҡын. Шулай уҡ төрлө ҡиммәтле ташы булған биҙәүестәр ҙә ҡатын-ҡыҙҙарҙың күңеленә хуш килә. Автомобиль кеүек үтә ҡыйбатлы бүләктәрҙе иҫәпкә алмаһаҡ, 8 Март ир-егеттәрҙең кеҫәһен кәмендә 3-5 мең һумға еңеләйтергә тейеш. Күпселек (99 процент) ҡатын-ҡыҙҙарҙың иң яратҡан бүләге, ул, әлбиттә, сәскәләр. Сәскә эргәһендә берәй ҡиммәтле металдан эшләнгән һырғамы, балдаҡмы булһа - бигерәк тә һәйбәт.

Шулай итеп, 8 Март алдынан иң үтемле тауар - ул, әлбиттә, сәскә. Ҡыйбатлы, 3-5, хатта айырым даналары ун-ун биш мең һум торған орхидеяларҙан алып, иң арзанлы мимозаларға тиклем, уларҙың барыһы ла һатыусыларға был байрамда 200-300 процент килем килтерә. Ҡайһы бер мәғлүмәттәргә ҡарағанда, 7-8 март көндәре сәскә менән сауҙа итеүселәр бер йыллыҡ табыш ала икән. Был осорҙа һатылмай ҡалған сәскә булмай тиерлек. Һәр береһе эшкә китә - һулып барғанын һатыусылар "яңырта", һынғандарын бәйләп ҡуя, махсус лак йәки буяу һөртә. Хаҡтарға килгәндә иһә, улар әсе ҡамыр кеүек күбә. Мәҫәлән, ҡала урамдарында 50-100 һумға һатылған мимозаларҙың бер ботағы (улар беҙгә Кавказдан килтерелә) Абхазия - Рәсәй сигендә 3(!) һум тора. Был ваҡытта урамдарҙа умырзаяларҙы ла осратырға мөмкин. Тик ул сәскәләр, ғәҙәттә, Ҡыҙыл китапҡа индерелгән, уларҙы өҙөү, һатыу енәйәт менән бер һәм һатыусы менән һатып алыусылар өсөн күңелһеҙ әҙемтәләргә килтерергә мөмкин. Шулай итеп, 8 Март көнө ҡатын-ҡыҙҙы бер шәлкем сәскә менән генә ҡыуандырыр өсөн кеҫәгеҙҙән 500 һумдан 3-4 мең тәңкәгә тиклем сығарып һалырға әҙер булырға кәрәк.

Бүләктәрҙән тыш, ир-ат был көндә өҫтәлде лә хәстәрләргә тейеш бит әле. Йәғни, кәмендә бер шешә шампан, торт һәм шоколад һатып алырға бурыслы. Был тағы ла 500-1000 һум тигән һүҙ. Ә инде һөйөклөһен ҡыуандырам тиһә, ҡыйбатлы рестарандарҙың береһенә алып барыу мотлаҡ. Ундағы хаҡтар иһә 2-3 мең һумдан ашып китә.

Арифметиканан ситләшәйек тә, 8 Март байрамының тарихына күҙ һалайыҡ. Тәүҙә бит ҡатын-ҡыҙҙарға бүләктәр мәсьәләһе бөтөнләй ҡуйылмаған. Улар 8 Март көнөндә үҙ хоҡуҡтарын яҡлау, ир-егеттәр менән бер баҫҡысҡа күтәрелеү кеүек мәсьәләләр ҡуйған, сәйәсәттә, иҡтисадта ир-аттар менән бер рәттән эшләү мөмкинлеген талап иткән. Өйҙәге мәшәҡәттәрҙән, балаларҙан арынып, йәмәғәт тормошонда ҡатнашып, аҡса эшләп, илдең, донъяның тормошона йоғонто яһап йәшәргә ынтыла ине улар. Ул ваҡытта Германияла, мәҫәлән, ҡатын-ҡыҙҙарҙың тормошо өс "К"нан - киндер (балалар), кюхе (кухня), кирхе - (сиркәү) ғына торған булған.

Хәҙер иһә ҡатын-ҡыҙҙар сәйәсәттә лә (мәҫәлән, АҠШ дәүләт сәркәтибе Кондолиза Райс, Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаттары Любовь Слиска һәм Татьяна Воронова, Санкт-Петербург губернаторы Валентина Матвиенко һ. б.), иҡтисадта ла (Мәскәү мэры Юрий Лужковтың хәләл ефете Елена Батурина), йәмәғәт тормошонда ла әүҙем ҡатнаша. Ҡатын-ҡыҙҙар эшләмәгән урын юҡ, шикелле. Әммә 100 йыл элек күтәрелгән мәсьәләләр әле һаман булһа ла ҡырҡыу тора. Йәғни, әле һаман йәш ҡатын-ҡыҙҙарҙы эшкә ала һалып бармайҙар (йәнәһе, улар кейәүгә сыға, бала таба, ә улар урынына кем эшләргә тейеш?), ҡатын-ҡыҙҙар күпләп хеҙмәт иткән өлкәләрҙә эш хаҡы башҡаларҙыҡына ҡарағанда байтаҡҡа түбәнерәк (белем биреү, һаулыҡ һаҡлау учреждениелары). Бала табыу уңайы менән әсәләргә түләнгән пособиеларҙы беҙҙә уртаса эш хаҡы менән бер ҙә сағыштырып булмай. Ғаиләлә ҡатын-ҡыҙҙар ирҙәре тарафынан туҡмалған, йәберләнгән осраҡтар бер ҙә кәмемәй. Ҡатын-ҡыҙҙарҙы урлап йәки алдау юлы менән сит илдәргә сексуаль ҡоллоҡҡа һатыу осраҡтары арта.

Йәғни, 8 Март байрамының мөһимлеге бер ҙә кәмемәй. Әлбиттә, йылына бер тапҡыр сәскәләр, ҡыйбатлы бүләк һатып алып, тәмле-тәмлы ризыҡтар бешереп "8 Март ҡатын-ҡыҙҙар байрамы, ә быйна 9, 10 март һәм йылдың башҡа көндәре ирҙәрҙеке" тип кенә әйтергә мөмкин булыр ине лә бит. Әммә ҡатын-ҡыҙҙар ни тиклем әүҙем булмаһын (ә ҡайһы берҙәре хатта бөгөн яҡлауға һәм һаҡлауға ир-егеттәр мохтажыраҡ тип белдерә) улар барыбер беҙҙең иғтибарыбыҙҙы, мөхәббәтебеҙҙе, ныҡ яурыныбыҙҙы, ваҡытында ғына белеп кенә әйтелгән йылы һүҙебеҙҙе көтөп кенә тора. Шуға ла, йәмәғәт, йәлләмәйек гүзәл заттарыбыҙға һөйөүебеҙҙе. Шул ваҡытта улар сабып барған атты ла туктатыр, янған өйгә лә инеп сығыр, ә 8 Март көнө әрмәгән ергә ултыртмаҫ, көмөш ҡалаҡтан ғына ашатыр. Хатта кеҫәбеҙ буш булһа ла.

**Таһир ИШКИНИН.**



## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓РФ Дәүләт Думаһының Экология буйынса комитетына Башҡорт дәүләт университеты нигеҙендә экология факультеты ойоштороу тураһында һорау индерелгәйне. Унда БДУ ректоры Мөхәмәт Харрасов ҡатнашты. Тәҡдим хупланған. Яңы факультетта уҡыусылар экологик мәҙәниәт белемен үҙләштерәсәк, быуаттың мөһим проблемаларын хәл итеүҙә ҡатнашасаҡ.

✓"Башҡорттар Рәсәй Федерацияһы составында" дәүләт программаһын әҙерләү бурысы БР Фәндәр академияһына йөкмәтелгән. Был программа "Рәсәй Федерацияһы халыҡтары" федераль программаһының бер бүлеген тәшкил итәсәк.

✓Йылайыр районы Юлдыбай ауылында яугир-интернационалист Рафаэль Ҡолһарин иҫтәлегенә милли көрәш буйынса район-ара ярыштар үтте. Турнирҙа республиканың туғыҙ районынан 120 команда ҡатнашты. Унда Баймаҡ районы командаһы - беренсе, Йылайыр ауылы батырҙары - икенсе, Сибай көрәшселәре өсөнсө урын яуланы.

✓БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы эргәһендәге Халыҡты эш менән тәьмин итеү хеҙмәте федераль идаралығы хәбәр итеүенсә, 1 февралгә республика ойошмалары һәм предприятиеларында 17,2 мең эш урыны теркәлгән булған. Ғинуарҙа республикала буш эш һәм уҡыу урындарына 12 йәрминкә ойошторолған, уларҙа 99 предприятие һәм ойошма ҡатнашҡан.

✓Былтыр "Башавтотранс" предприятиеһы 35 яңы, шул иҫәптән 23 ҡала-ара маршруттар хәрәкәте ойоштороғайны. Алыҫ араға маршруттар асыу дауам итә. "Стәрлетамаҡ - Чебоксары", "Сибай - Сургут", "Мәләүез - Ҡазан" йүнәлештәре буйынса ла автобустар йөрөтөлә башланы. Былтыр предприятие транспорты ярҙамында 6,7 миллион тонна йөк, 291 миллион пассажир ташылған. Йөк ташыуҙан 13 миллион һумлыҡ табыш алынған. Ә быйна пассажирҙар ташыу килемһеҙ булып ҡала.

✓Республикала балалар "Тамыр" телерадиокомпанияһы ойошторолоуға 15 йыл тулды. Ул бөгөн эфирға ете телевизион һәм туғыҙ радиопрограмма сығара.

✓"Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһы "Кинйә" тарихи-нәфис фильмын экранға сығарырға әҙерләй. Башҡорт халҡының данлыҡлы улы Кинйә Арыҫланов хаҡындағы фильмдың режиссеры - Әнүәр Нурмөхәмәтов.

*БЕЛЕҮ КӘРӘК*

# Ауырыған өсөн,

## бала баҡҡан өсөн түләүҙәр

**Быйыл ғинуарҙа үҙ көсөнә ингән "Мотлаҡ социаль яклауға мохтаждарҙы ваҡытлыса хеҙмәткә яраҡһыҙ, йөклөлөк һәм бала тыуҙырыу буйынса пособиелар менән тәьмин итеү тураһында"ғы закон үҙ эсенә страховка осрағын да индерҙе һәм уға ла пособие түләнәсәк.**

Яңы пособие түбәндәге осраҡтарҙа түләнмәй:

- әгәр һеҙ ауырыу сәбәпле йәки йәрәхәтләнеп эшкә сыға алмағанда;
- мотлаҡ ауырыу кешене ҡарарға тейеш булғанда;
- бала көткәндә;

Быларҙан тыш, әгәр аборт яһатырға тура килһә йәки, киреһенсә, экстракорпораль аталандырыу процедураһын үткән хәлдә больничный бирелә.

Шуныһына иғтибар итеү мөһим: 2007 йылдың 1 ғинуарынан пособие күләме кешенең өҙлөкһеҙ стажына ҡарап түгел, ә дөйөм эш стажын иҫәпкә алып билдәләнәсәк. Йәрәхәтләнеп, ваҡытлыса хеҙмәткә яраҡһыҙ булғанда йәки ауырыу буйынса пособиелар, элеккесә, ике сығанактан: больничныйҙың тәүге ике көнө өсөн эш биреүсе иҫәбенән, ҡалған көндәр өсөн Рәсәй Федерацияһының Социаль страховка фондынан түләнә. Ғаиләләге ауырыу кешене ҡарау буйынса, карантинда булғанда, йөклөлөк һәм бала табыу буйынса ҡалған бөтөн төр пособиелар тулыһынса Рәсәй Федерацияһының Федераль социаль хеҙмәт бюджеты иҫәбенән түләнә. Ә бер ай өсөн уларҙың күләме 16 125 һумдан артмаҫҡа тейеш.

**Шулай итеп, кемдер ауырыһа йәки йәрәхәтләнһә, ғаиләлә ауырыу кешене ҡараһа (15 йәшкә тиклемге баланан тыш), карантинда булһа һ.б. һеҙҙең больничный түбәндәгесә түләнәсәк:**

**-страховкаһы булған һәм дөйөм хеҙмәт стажы һигеҙ йылдан күберәк кешегә уртаса эш хаҡының 100 проценты;**

**-биш йылдан һигеҙ йылғаса дөйөм хеҙмәт стажы булғандарға уртаса эш хаҡының 80 проценты;**

**- хеҙмәт стажы биш йылдан артмағандарға уртаса эш хаҡының 60 проценты;**

**инвалид булһа ла эшләгән, әммә ваҡытлыса хеҙмәткә яраҡһыҙ булып, 4-5 ай больничныйҙа булыусыға хеҙмәт стажына ҡарамай 100 процент эш хаҡы түләнә.**

**Галина БАХШИЕВА**

**(Дауамы бар).**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# Барыһы ла кеше хаҡына

### Балалар баҡсаһына түләү

**Рәсәй хөкүмәте дәүләт балалар баҡсалары өсөн түләүгә аксалата компенсация тураһында ҡарар ҡабул итте.**

Билдәле булыуынса, һуңғы ваҡытта, башҡа ҡалаларҙағы кеүек, Өфөлә лә мәктәпкәсә балалар учреждениелары өсөн түләү һаман арта ине. Хәҙер ата-әсәләргә балалар баҡсаһы өсөн дөйөм түләүҙең 20-нән 70 процентка тиклемгеһен кире ҡайтарасаҡтар. Тәрбиәселәрҙең эш хаҡы, уйынсыҡтар һәм балалар баксалары бинаһарына ремонт ҡала бюджеты иҫәбенән түләнәсәк. Балалар баксаларында тукланыу өсөн дә дәүләт өлөшләтә түләүҙе үҙ өҫтөнә алған, акса компенсацияһы һаҡлык кенәгәһенә йәки пластик карточкаға күсереләсәк. Аҡса ата-әсәләргә өс айға бер



тапкыр, йәғни квартал һайын ҡайтарыласаҡ. Бер һүҙ менән әйткәндә, ғаиләлә бакса йәшендә нисә бала бар, һаҡлык кенәгәһенә лә шул тиклем акса күберәк һалынасаҡ.

### Икенсе ҡатта йәшәүселәргә

**Ошоға тиклем күп ҡатлы бейек йорттарҙа йәшәүселәрҙең 1-се һәм 2-се ҡаттағылары лифт өсөн акса түләмәй ине, хәҙер хәлдәр үҙгәрҙе.**

Түләргә теләмәүселәр лифтте файҙаланыуҙан баш тартыуы тураһындағы ғаризаһын торлак-эксплуатация идаралығына илтергә тейеш. Тик быны бер ҡатта йәшәүселәрҙең барыһы ла эшләргә тейеш. Ғаризаға ярашлы, лифттең улар йәшәгән каттағы кнопкаһы һүндерелә. Билдәле булыуынса, Өфөлә Торлаҡ хужалығы идаралығының берҙәм диспетчер хеҙмәте булдырылды. Әлегә улар Киров һәм Октябрь районларында эшләй һәм уларға торлаҡ-эксплуатация участкаһына бармай, тура мөрәжәғәт итергә мөмкин. Фатирҙарҙа сантехник ремонтка ҡағылышлы бөтөн ғаризалар компьютерға инә һәм уларҙы тәҙәкләндереүҙе лә контролдә тота. Берҙәм диспетчер хеҙмәте быйыл баш ҡаланың бөтөн районларында ла булдырыласаҡ.

### Бәпес алып ҡайтыусыға

**Һаулыҡ һаҡлау идаралығы белдереүенсә, хәҙер сабыйҙы бала табыу йортонан алып ҡайтҡанда, участка педиатры шунда уҡ сабыйға беренсе патронаж үткәрә.**

Ҡала һаулыҡ һаҡлау идарасыһы Виталий Викторов әйтеүенсә, был ысул яңы тыуған сабыйҙар үлеме осрағын кәметеүгә булышлыҡ итер, тигән өмөт бирә. Ғөмүмән, баш ҡалала акушер-терапевт-педиатр комплексы эшмәкәрлеге максатка йүнәлешле камиллаштырыла бара. Былтыр декабрҙә һаулыҡ һаҡлау идаралығы бойороғо менән участка акушер-гинекологының һәм терапевтың һәр сабыйҙың имен-аман тыуыуына яуаплылығын көсәйтеү өсөн 4-се бала тыуҙырыу йорто проекттың "пилот" майҙаны итеп билдәләнде.

### Аэропортта яңы хеҙмәт

**"Өфө" халыҡ-ара аэропорты авиабилеттар һатып алыу өсөн граждандарға яңы хеҙмәт төрө тәҡдим итә.**

Теләгән кеше дуҫы, коллегаһы йәки туғаны өсөн авиабилет хаҡын аэропорт кассаһында түләй, ә билетты ул кеше теләһә ҡайһы ҡаланың авиакассаһында ала аласаҡ. Икенсе ҡалала командировкала булғанда йәки билет һатып алырға мөмкинселегең булмағанда, Рәсәйҙең һәм БДБ-ның теләһә ҡайһы ҡалаһында булыуына ҡарамаҫтан, танышының "Өфө" кассаһында түләгән билетын алып, юлға сыға аласаҡ.

### Автомобилде ҡайҙа ултыртырға?

**Ҡала экологияһына зыян итмәй генә, нисек яңы тәҙәлештәр алып барырға?**

Өфө өсөн актуаль булған был мәсьәлә тураһында Мәскәү белгестәре хәстәрлек күрергә булды.



Улар урындағы ҡала тәҙәлөшө белгестәре өсөн рекомендациялар эшләне. Атап әйткәндә, Өфөләге автомобилдәрҙе ҡайҙа урынлаштырып бөтөрөү мәсьәләһе тураһында ҡайһы бер тәкдимдәр эшләнде. Хәҙер ҡалала 250 меңләп автомобиль бар. Был һан арта бара. Ә уларҙы ҡуйыр урын кәмей бара, сөнки гараждар һәм автомобиль ҡуйыла торған башҡа урындарҙа торлаҡ йорттар төҙөлә. Мәскәүҙәр Өфөнө ҡарап сыҡҡандан һуң, ҡаланың проектына социаль паркингтар төҙөүҙе индерергә тәкдим итте.

### Хәстәрлененң... йылыһы бар

**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Владимир Федоровтың белдереүенсә, быйыл йылы биреү миҙгеле бер ниндәй аварияһыҙ-ниһеҙ көйлә бара.**

Көнкүрештә төрлө сәбәп буйынса йылылыҡ биреүҙе ваҡытлыса туктатып тороу осраҡтары ла былтырғыға ҡарағанда күпкә аҙыраҡ теркәлгән. Йылылыҡ биреү селтәрендә килеп сыҡкан етешһеҙлектәрҙе белгестәрҙең үҙ ваҡытында сифатлы итеп төҙәтеүе арҡаһында ҙур аварияларға юл ҡуйылмаған.

Быйылғы йылылыҡ биреү миҙгеле әле тамамланмаған, шулай булыуға ҡарамаҫтан, белгестәр 2007-2008 йылдарҙың кышкы шарттарына әҙерлек эштәрен башлаған да инде.

### Һыу ташасаҡ

**Яҙғы ташкындар башланыр ваҡыт та етеп килә. Метеорологтар күҙаллауынса, быйыл һыу ташыуы былтырғыға ҡарағанда көслөрәк булмаксы.**

Ни өсөн тигәндә, көҙ ямғырлы булыу сәбәпле, ер нык дымланды һәм туңды. Тупраҡ уны һурып бөтөрә алмаған, ҡапыл көн йылынһа, туң һыу иреп, йылғаларға ағып төшөп, көслө ташҡындар булыуы ихтимал.

Башгидромет хеҙмәткәрҙәре яңыраҡ йылғаларҙа ҡарҙың һәм һыуҙың кимәлен үлсәп, Ағиҙелдә уның урыны менән былтырғы норманан 50 процентка юғары булыуын асыкланы. Ғәҙәттән тыш хәлдәр була ҡалһа, уның менән көрәшер өсөн республикала махсус комиссия булдырылды. Комиссия составына метеорологтар, коткарыусылар, экологтар һәм башка белгестәр



инә. Һыу баҫыуҙан ҡаза күргән кешеләрҙе күсереү өсөн коткарыусылар бер нисә торлаҡ фонды ла әҙерләне.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

☑ Өфө ҡала округы Советы депутаттары үсмерҙәр клубтары эштәре буйынса түңәрәк ҡор үткәрҙе. Бында байтаҡ проблемалар булыуы асыкланды: ойоштороусы педагогтар бик аҙ эш хаҡы алып эшләй, күп биналар капиталь ремонтка мохтаж. Депутаттар үсмерҙәр клубтары проблемаларына предприятиеларҙың һәм эшкыуарҙарҙың иғтибарын йәлеп итергә тип һөйләште.

☑ Баш ҡаланың Нефтселәр мәҙәниәт һарайында 20-23 мартта "Хәүефһеҙлек - 2007" форумы үтәсәк. Форум ваҡытында фәнни-ғәмәли конференция, халыҡ хәүефһеҙлеген тәьмин итеү сараларынан торған күргәҙмәләр ойоштороласаҡ.

☑ Бөгөн баш ҡалалағы балалар йорттарында ысын ғаилә хәстәрлегенә мохтаж булған 800 бала йәшәй. Өфө ҡала округы хакимиәтенең опека һәм попечителлек идаралығы 10 мартта ошо балаларҙы үҙ ғаиләһенә алырға теләүселәр өсөн махсус рәүештә "Ата-әсәләр мәктәбе" ойоштора. Бындай укыуҙар дүртенсе тапкыр үткәрелә. Тәрбиәгә бала алырға теләүселәр йыш ҡына юрист, психолог, социолог һәм педагог ярҙамына мохтаж. Был укыуҙар улар өсөн тәғәйенләнгән дә инде.

Ошо мәктәп ярҙамында һуңғы дүрт ай эсендә балалар йорттарынан 46 баланы ғаиләләргә тәрбиәгә, 18 баланы уллыҡҡа алдылар.

☑ Өфөлә социаль ипотека менән байырға теләүсе алдаксылар барлыкка килгән. Улар арзан торлакты оформить итеүгә 200 мең һум акса һорай, имеш. Бындай алдаксылар ҡапканына эләгә күрмәгеҙ тип иҫкәртә хокуҡ һаҡлау органдары. Ә социаль торлак алыу шарттары һәр район хакимиәтендә бар, уларҙан алып танышырға мөмкин.

☑ Бөгөн Нефтселәр мәҙәниәт һарайында "Аҡ тирмә" башкорт милли-мәҙәни үҙәге "Наурыз" байрамына саҡыра. Кисә 15 сәғәттә башлана.

☑ Өфөлә шылтыратырға ғына түгел, шылтыратыуҙарҙы ҡабул итә лә торған таксофондар барлыкка килде. Уларҙың тәүгеһе Көньяк автовокзал эргәһенә ҡуйылды. Таксофондың үҙенең ҡала номеры бар һәм ул таксофонға яҙып ҡуйылған. Ҡалаға шылтыратыуҙың бер минуты 43 тин тора. Баш ҡалала тағы ла ошондай 27 таксофон урынлаштырыласаҡ.

✓ **Эше алға бармаған хужа халыҡты йыйып һөйләшергә ҡурҡа, сөнки халыҡ тураһын әйтеп өйрәнгән. Был күрсөктән сығыу өсөн иң тәүҙә урындарҙағы аҡһаҡалдар ҡорон тергеҙергә кәрәк.**



*ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ*

# Кем ҡайғыртыр икән…

## ауыл яҙмышын?

**Ауылда һәр кем иғтибар үҙәгендә. Ҡалала ғына ул, күрше хаҡы - тәңре хаҡы, тигән төшөнсә юҡ. Эйе, ауыл кешеһе туғандарына, күршеһенә, үҙенә таянып йәшәй, урындағы етәкселәргә, халыҡ депутаттарына мөрәжәғәт итә, дөйөм йыйылыштарҙа сығыш яһай. Әммә хоҡуғы була тороп та, дөйөм йыйылыштарҙа сығыш яһарға, етәксе кабинетына инергә батырсылыҡ итеүселәр һирәк. Дөйөм мәнфәғәтте ҡайғыртыу, күрәһең, еңел түгел, ул ҙур яуаплылыҡ талап итә. Ләкин дөйөм ауыл яҙмышын ҡайғыртып йәшәүсе кешене һәр ауыл һайын барыбер табып була. Ундайҙарҙы хөрмәт итәләр, һәр һүҙенә ҡолаҡ һалалар, ҡай саҡ үҙҙәре әйтергә батырсылыҡ итмәгәнде шундайҙар ауыҙы аша етәкселәргә еткерергә тырышалар. Хатта ул ауыл Советы депутаты булмаған хәлдә лә. Бар ундай кешеләр. Әбйәлил районының Хәлил ауылында йәшәүсе Зәйнулла Фазулла улы Мырҙабаев ана шундай дөйөм мәнфәғәтте ҡайғыртып йәшәүселәрҙең береһе. Әле хаҡлы ялда булыуына ҡарамаҫтан, тыныс ҡына йәшәп ятыу урынына, ауыл халҡының киләсәге өсөн борсола. Ваҡытында ул колхоздың алдынғы шоферы булды. Икенсе, өсөнсө дәрәжә Хеҙмәт Даны ордендары кавалеры. "Зәйнулла пенсияға сыҡмайынса, беренселекте алып булмаҫ", - ти торғайнылар ул ваҡытта. Әйткәндәй, ваҡытында ул БАССР-ҙың халыҡ депутаты булды. Зәйнулла Фазулла улының бер ауыл миҫалынан сығып фекер йөрөтөүе башҡа ауылдар өсөн дә хас һымаҡ.**



**Ир – атка, ауыл аҡһаҡалға таяна**

### ЕРҘЕ СИТКӘ АЛЫП КИТЕП БУЛМАЙ

Мине ауылдың бөгөнгө хәле хафаға һала. Был борсолоу үҙ мәнфәғәтемде ҡайғыртыуҙан килмәй. Беҙҙең быуын күререн-күргән, йәшәрен-йәшәгән - мине балаларҙың, ейәнейәнсәрҙәрҙең, киләсәк быуындың яҙмышы борсой. Үҙемә тынғы бирмәгән уйҙарымды башҡалар менән уртаҡлашам, төрлө йыйылыштарҙа әйтергә тырышам, башҡаларҙы ла уйлап, кәңәшләшеп йәшәргә саҡырам. Минеңсә, ысынбарлыҡҡа ҡурҡмай, тура ҡарарға кәрәк, уны төрлө төҫтәргә буяп һоҡланыуҙан, йәки төшөнкөлөккә бирелеүҙән фәтеүә юҡ. Мәҫәлән, ер мәсьәләһе тураһында һүҙ сыҡҡас, тәүге йыйылышта уҡ халыҡты берҙәм булырға өндәнем. "Ер, тип ҡаңғырмағыҙ. Ул папкаға йә кеҫәгә һалып, ситкә алып китә алғандай әйбер түгел. Әйҙәгеҙ, күмәкләп ғариза яҙайыҡ та, ер колхоздыҡы булып ҡалһын. Бының файҙаһын күрһәк-күрмәһәк тә, еребеҙ рәсми теркәүле булһын. Был тормошҡа беҙ оҙайлы килмәгәнбеҙ, бушҡа ҡаңғырмайыҡ", - тип сығыш яһаным. Шуныһы ҡыҙыҡ: берәү ҙә ҡаршы түгел һымаҡ. Һүҙгә ҡолаҡ һалалар, әммә һөҙөмтәлә бер нәмә лә эшләнмәй. Халыҡ фекере менән урындағы башҡарма власть органдары алып барған аңлайышһыҙ сәйәсәт арҡаһында ҙур айырма килеп сыға. Халыҡ менән осрашыуҙар, кәңәш ҡороуҙар, вәғәҙәләр биреү күҙ буяу өсөн генә үткәрелә, тигән шик тыуа. Күптән түгел район хакимиәте вәкилдәренең ветерандар менән осрашыуы булды. Ер мәсьәләһе тағы күтәрелде һәм ҡапма-ҡаршы фекер тыуҙы. "Уҡытыусыларға, табибтарға, пенсионерҙарға үҙ ерегеҙҙе бирмәгеҙ, ул колхозсылар ҡарамағында", тигән фекер әйтелде был осрашыуҙа. Кешене айырып ҡарау, яһалма рәүештә низағ ойоштороу шулай башлана. Бөгөнөн уйлаған етәксе иртәгәһен дә уйларға тейеш: ул да пенсия йәшенә етәсәк, йәки туған-тыумасаһы араһында уҡытыусы, табибтар бар. Беҙ ошонда тыуғанға бит уны тыуған еребеҙ тип йәшәйбеҙ. Ерҙе беҙ байыҡыу сығанағы тип түгел, тыуған ер тип яратабыҙ. Етәксе кеше лә иң тәүҙә халыҡ мәнфәғәтен, уның яҡты киләсәген күҙалларға тейеш түгелме ни?

### ҠАЙҘА ҺЕҘ, АУЫЛ АДВОКАТТАРЫ?

Ауыл Советына депутаттар һайлау ҙа бөгөн халыҡтан йәшереп эшләнгән кеүек. Кандидат итеп ҡулай кешеләрҙе генә теркәргә тырышалар, халыҡ менән кәңәшләшеү тигән нәмә юҡ хәҙер. Аңламайым, халыҡҡа ярҙамы теймәҫтәй депутат кемгә кәрәктер. Элек бит депутаттың абруйы ҙур булды, улар ауыл адвокаттары кеүек була торғайны. Берәй аңлашылмаусанлыҡ килеп сыҡһа йә ауыр хәл килеп тыуһа, кәңәш һорап, иң тәүҙә депутатҡа бара торғайнылар. Бөгөн беҙ кемдәрҙә депутат мандаты бар икәнен дә белмәй ҡалабыҙ. Ярай, үҙ проблемаларыбыҙҙы беҙ үҙебеҙ хәл итеп өйрәнгәнбеҙ, ә бит дөйөм мәнфәғәтте лә ҡайғырта белергә кәрәк. Шундай фекер тыуа: үҙ вазифаһын һаҡлап ҡалыу өсөн урындағы хакимиәт башлыҡтары халыҡҡа ҡаршы сәйәсәт алып бара һымаҡ. Эше алға бармаған хужа халыҡты йыйып һөйләшергә ҡурҡа, сөнки халыҡ тураһын әйтеп өйрәнгән. Был күрсөктән сығыу өсөн иң тәүҙә урындарҙағы аҡһаҡалдар ҡорон тергеҙергә кәрәк. Йәштәр улар йәштәрсә дәрт менән тиҙ генә уйлап эш итеп өйрәнгән. Үҙ мәнфәғәтен ҡайғыртмаған ололар дөйөм мәнфәғәт өсөн күп кәңәш биреүе бар. Уларҙың тормош тәжрибәһе, донъяуи аҡылы көслө.

### АУЫЛҒА ИМАН ҠАЙТА

Ауылда хәҙер берҙән-бер йыуаныс - иман ҡайта. Күпләп үк булмаһа ла, халыҡ мәсеткә йөрөй башланы. Йөрөмәгәндәре лә дингә ихтирам менән ҡарай хәҙер. Борон-борондан дин генә рухты ныҡлы тотҡан. Законнан ҡурҡмағандарҙы тик дин генә тәрбиәләй ала. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, әлегә динде бер яҡлы ғына аңлайбыҙ, уның төп мәғәнәһен, фәлсәфәһен тик ҡағиҙәләр үтәүгә генә ҡайтарып ҡалдырабыҙ. Ә бит төптән уйлаһаң, дин иң төплө тәрбиә биреү сығанағы. Әммә уны халыҡтың мәҙәни кимәлен күтәрергә тейешле клуб менән һис тә сағыштырып булмай. Мәсет тә, клуб та тәрбиә менән шөғөлләнә, әммә икеһе-ике төрлө ысул менән: береһе - көндөҙ, икенсеһе - төнөн. Әлбиттә, һөҙөмтә лә ике төрлө - ер менән күк араһы.

**Радик ӨМӨТҠУЖИН**

**яҙып алды.**

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Беҙ аграр республикала йәшәйбеҙ икән, иң тәүҙә ауыл яҙмышы беренсе урынға ҡуйылырға тейеш түгелме? Әллә ауыл халҡы ныҡ, улар бирешмәҫ, тигән күңел тыныслығы бармы? Һәр хәлдә, уйланаһы урын бар, буғай...**

*ҠЫҘЫҠ ТАҺА!*

## Һыуытҡыстар тарихынан

**Һыуытҡыс уйлап табыу тарихы бай һәм ҡыҙыҡлы. Галерала хеҙмәт итеүсе ҡолдар үҙ заманында һыуҙы һалҡын тотоу серен белгән. Улар һыуға селитра өҫтәгән- был ысул ҡолдарға ғүмерҙәрен һаҡларға ярҙам иткән.**

**Боронғолар йәнә бер сергә эйә булған: һыу тултырылған һауыттарҙы диңгеҙ төбөнә төшөрөү ысулы. Гректар иһә псикетрҙар- ҙур эсле кувшиндар- менән ҡулланған. Мысыр кешеләре был маҡсат өсөн керамик цистерналарҙы үҙ иткән. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, күп кенә боронғо асыштар вәхшиҙәр хакимлығы арҡаһында юҡҡа сыҡҡан һәм онотолған.**

Бары тик ун өсөнсө быуатта ғына Көньяҡ Европа кешеләре күп йылдар Ҡытайҙа йәшәп ҡайтҡан Марко Поло китабынан ҡар һәм боҙҙоң хужалыҡ өсөн ни тиклем файҙалы икәнлеген белгән. Венеция, Рим, Флоренция байҙары өҫтәлендә беренсе тапҡыр туңдырылған емеш-еләктәр барлыҡҡа килә.

Ун алтынсы быуат уртаһына итальяндар боҙға тоҙ, поташ һәм башҡа химикаттар ҡушыу һөҙөмтәһендә аҙыҡ- түлекте бик ныҡ туңдырыу ысулын уйлап таба. Ә хәйләкәр Франсиско Прокопио Парижда туңдырылған шәрбәт кафеһы асып ебәрә. Кафе иҫ киткес уңыш ҡаҙана.

Ун туғыҙынсы быуат башына инде хәлле йорттарҙа һыуытҡыстар йыш күренә башлай, фаянс һәм фарфорҙан яһалған лаҡандарҙа шарап һаҡлайҙар.

Борон замандарҙа урыҫтар ер ҡаҙып, шул урынға бура ултыртҡан, боҙ менән тултырған һәм өҫтөн ҡыртыш менән япҡандар, һыуытҡыс шулай яһалған.

Ун туғыҙынсы быуат аҙағына Америка, Европа, Австралияның меңәрләгән ғаиләләре һыуытҡыслы була. Ғәҙәттә, ул ҡыҙыл ағастан көҙгөлө шкаф рәүешендә эшләнә. Уны тулыһынса тиерлек боҙ менән тултыралар. Ләкин һыуытҡыс ҙур бер кәмселеккә эйә була, ундағы боҙҙоң иреү температураһы бары тик ноль градус тәшкил итә. Боронғо рецепт буйынса, боҙға тоҙ ҡушырға мәжбүр булалар.

Фернан Каре исемле француз аммиак абсорбцияһы ярҙамында яһалма боҙ эшләү ысулын тормошҡа ашыра. Ф. Кареның уңышын, ҡырҡ йыл үткәс, Павел Вортман ҡуллана. Ул үҙенең агрегатын " Эскимо" тип атай.

Бер әйләнеш эсендә "Эскимо" ун ике килограмм боҙ яһай ала.

Һыуытҡыстар тарихында Карл фон Линде исемле немец аристократы ҙур ғына урын биләй. Ул аммиакта эшләгән компрессорлы һыуытҡыс уйлап таба. Был һыуытҡыс боҙҙо ҙур күләмдә эшләп сығара. Ваҡыт үтеү менән Линде машинаһы киләсәктәге һыуытҡыстар өсөн үрнәк булып тора.

**Ләйсән МАРАҠАНОВА**

**әҙерләне.**

## Б Ә Л Ә К Ә Й  Ҡ А М У С

### БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ



**Австралия**

Ҡитғаны күрмәҫ борон уҡ Австралия тип атайҙар, сөнки боронғо географтар һәм картографтар планетаның көньяғында билдәһеҙ материк булырға тейеш, тип иҫәпләй һәм карталарында Тымыҡ океанда ерҙе "түңкәрелеүҙән һаҡлап торған"ын һүрәтләп, уға Терра Аустралиа Инкогнита (Көньяҡтағы Билдәһеҙ ер) тип яҙып ҡуя. Бөйөк географик асыштар дәүерендә был тылсымлы ҡитғаны португал һәм испан диңгеҙселәре махсус экспедициялар төҙөп тә эҙләй, ләкин береһе лә таба алмай.

Фәҡәт 1606 йылда ғына Виллем Янссон исемле голланд капитаны Европа кешеләренән беренсе булып Австралияға аяҡ баҫа. Унда бәләкәй генә кәүҙәле ҡырағай кешеләрҙе һәм бығаса күрелмәгән кейек-януарҙарҙы күрәләр. Яңы ерҙә ер аҫты ҡаҙылмаларын табып, байырға өйрәнгән Европа сәйәхәтселәре бында алтын да, ашар ризыҡ та тапмай. Меңәр йылдар тәбиғәт ҡосағында йәшәгән аборигендар ҡалалар төҙөүҙе күҙ алдына ла килтермәгән. Шулай итеп, ҡитға йәшәүгә яраҡһыҙ, юлға сыҡһаң әллә нисәмә айҙарҙа ла барып етеп булмаған, бер кемгә лә кәрәкмәгән төбәк булып сыға.





1770 йылда инглиз сәйәхәтсеһе Джеймс Кук ҡитғаны Англияның колонияһы, тип иғлан иткәндән һуң 17 йыл үткәс кенә, унан ниндәй ҙә булһа файҙа күрергә уйлап, унда йәмғиәт өсөн ҡурҡыныслы енәйәтселәрҙе мәңгелеккә оҙатырға ҡарар итәләр. Англиянан бында бөтөнөһө 160 000 енәйәтсе оҙатыла. Властағылар улар ҡырағай шарттарҙа йәшәй алмай, үлеп бөтәр, тип уйлай, әммә каторжандар бөтөн донъяға мөғжизә күрһәтә: улар берләшеп йәшәй башлай, яйлап көтөүлектәре, плантациялары барлыҡҡа килә. Төрлө фетнәселәр, бандиттар менән бур ҡатын-ҡыҙҙарҙан, фәхишәләрҙән тыуған балалар иһә Австралияны төрмә тип түгел, ә Ватаным тип үҫә...

Бөгөн иһә элекке енәйәтселәрҙең ейәндәре, бүлә-бүләсәрҙәре барлыҡҡа килтергән Мельбурн, Брисбен, Сидней һәм Австралияның башҡа бик күп һоҡланғыс ҡалалары бөтөн донъя туристарын үҙенә тартып тора...

**✓ Был донъяла күңел донъяһынан да ҡатмарлыраҡ төшөнсә юҡтыр. Кеше күңеле таштан ҡаты, сәскәнән наҙлы, тиҙәр. Күңел һаҡһыҙ әйтелгән осраҡлы ғына һүҙҙән дә, ҡырын ҡараштан да кителеүе ихтимал.**



*ХАЛЫҠ АҠЫЛЫ*

# Ятаған олатайың... кәңәш бирһен

**"Айыуҙы еңгән - ярты ир, Асыуҙы еңгән - бөтөн ир"**

Был донъяла күңел донъяһынан да ҡатмарлыраҡ төшөнсә юҡтыр. Кеше күңеле таштан ҡаты, сәскәнән наҙлы, тиҙәр. Әллә ниндәй ауыр ҡайғыларҙы күтәрә алған күңелдең һаҡһыҙ әйтелгән осраҡлы ғына һүҙҙән дә, ҡырын ҡараштан да кителеүе ихтимал. Мәҡәл шуға ишара.

Халыҡ "ир" йәки "ир-егетлек", "бисә" йәки "бисәсәсәлек" тигән төшөнсәгә ирҙәр менән ҡатын-ҡыҙҙар айырмаһын түгел, ә кешенең холҡондағы үҙенсәлекте һалған. Был хаҡта хатта риүәйәт тә бар. Имештер, Хоҙай үҙ янына өкөнө саҡырып алған да: "Һин барыбер йоҡламайһың, кеше-меше йоҡлап бөтөп, донъя һил ҡалған саҡта халыҡтың иҫәбен ал. Ирҙәр менән бисәләр нисбәтен белергә кәрәк миңә", - тигән бурыс йөкмәткән. Өкө байтаҡ ваҡыттан һуң, ике төрлө исемлек тотоп, Хоҙайға тапшырған. Хоҙай исемлеккә күҙ йүгертеп ҡараған да: "Ни эшләп икеһе ике төрлө? Иҫәп-хисабың дөрөҫ түгел бит", - тигән. "Мин береһендә уларҙың бүленешен енес яғынан яҙҙым, икенсеһен холоҡ яғынан. Холҡо буйынса бисәләр һаны күберәк икән. Шул нисбәтте лә тигеҙләргә кәрәк. Юғиһә, донъя нигеҙе ҡаҡшар бит", - тигән.

"Ир икәнһең", "Ир холоҡло икәнһең" йәки "Егет икәнһең" тип - ҡатын-ҡыҙҙарға, ә инде "бисәләрсә" йәки "бисә холоҡло" тип ирҙәргә әйтәләр. Шуның өсөн был мәҡәлдәге ярты ир, бөтөн ир, тигәнде ир-егеттәргә генә ҡағыла, тип уйларға ярамай.

Мәҡәлдең әрәсәһе шунда: кеше берәй мәсьәләне асыуы килгән саҡта хәл итһә, яңылышыуы бик тә ихтимал. Асыу алдан, аҡыл арттан, тиҙәр. Шуның өсөн теге йәки был аңлашылмаусанлыҡты, асыуҙы нисек тә еңеп, ҡайнап торған ярһыу ҡан баҫылғас ҡына хәл итеү һәр ваҡыт яҡшы һөҙөмтә бирә. Ҡыҙып киткән саҡта, алҡымыңа килеп тығылған төйөндө йотоп ебәреп, тынысланып, мәсьәләнең айышына зиһен яҡтылығы аша ҡарап хәл итеү - асыуҙы еңеү була. Физик яҡтан көслө булып була, әммә ысын ирлек күңел торошон яйға һалыуҙағы ирлек ул. Бик күп ҡатмарлыҡтар, аңлашылмаусанлыҡтар ҡыҙыу ҡан менән хәл итеүҙән башлана ла инде. Шуға ла халҡыбыҙҙа: "Ятаған олатайыңдан кәңәш ал", - тигән аҡыл бар. Ятаған олатай - ул ҡан яҡҡас, һүрелгәс, тигән һүҙ.

**Рубриканы Мәрйәм БУРАҠАЕВА алып бара.**

*МИН БЕЛГӘН УРЫҪ*

# Төймә русса нисек була?



**Башҡорт менән урыҫ дуҫлығы быуаттар һынауын үткән. Көнитмешебеҙ бер, уй-ниәттәребеҙ уртаҡ, хатта ҡыҙыҡмы был, ҡыҙғанысмы, телдәребеҙ ҙә буталып китә. Был хәл бигерәк тә ҡалала, ҡатнаш милләтле ауылдарҙа осрай. Ашағас, "әпәр" тип тороп киткән булабыҙ, аяҡ эләгеп, йығыла яҙһаҡ, "господи" тип ебәрәбеҙ. Ҡыуанғанда " боже мой", илағанда "эй хоҙайым" тип, Аллаға өндәшәбеҙ. Урыҫлашҡан башҡорттар ҙа байтаҡ, башҡортлашҡан урыҫтар ҙа осрай.**

Һүҙем Пелагея-Суфия менән Анна-Нурия исемле ауылдаштарым хаҡында. Бер саҡ Мәләүез районының Әбет ауылына көтөүсе Елистратов Иван исемле кеше ҡатыны, балалары менән күсенеп килә. Башҡорт ауылында телгә тиҙ өйрәнә рус ғаиләһе. Елистратовтар сит ерҙә шул тиклем өйрәнеп, ерегеп китә, хатта Ивандың ике ҡыҙы ла мәле еткәс, башҡорт егеттәренә тормошҡа сыға. Нюраһы ире менән Күмертау яҡтарына күсеп китә, Пелагея һәм уның тормош иптәше Әхмәҙи Биҡҡужин ауылда төпләнә. Ауылдаштары Поляны Суфия тип йөрөтә башлай.

Суфия үҙенең ире Әхмәҙи менән Мөхәмәҙи, Марс, Сәлхиә, Тамара, Әлфиә исемле балалар үҫтереп, буй еткерә. Суфияны ауылда бик яраталар, яҡын итәләр. Ул үҙе лә кеселеклелеге, ихтирамлылығы менән айырылып тора. Ерле халыҡтың йолаларын, ғәҙәт - ғөрөфтәрен ҡабул итә: аяттар уҡыта, ураҙаһын ҡалдырмай.

Ҡыҙыҡ хәлдәр ҙә булғылай. Бер мәл алты йәшлек Мөхәмәҙи өйгә йүгереп килеп инә лә:

-Әсәй, миңә ян менән уҡ яһап бир әле,- тип һорай.

-Нимә таптыра ул?- ҡунаҡҡа килгән Елена өләсәһе ҡыҙына төбәлә. Тамам үҙ телен онотҡан Суфия-Пелагея ни әйтергә белмәй, юғалып ҡала. Аптырағас, башҡортса белмәгән әсәһенә уҡтан атҡан кеүек хәрәкәттәр эшләп күрһәтә.

-Эх ты, дурочка, свой язык забыла. Башкирочкой стала!- тип моңһоу ғына йылмая әсәһе.

Хәҙер Суфия инәйгә һикһән йәш. Ике йыл элек ул Мәләүезгә, балалары янына күсеп китте. Улдары Мөхәмәҙи менән Марс ауылдың абруйлы кешеләре, алдынғы механизаторҙар.

Пелагея-Суфияны ауылда һаман һағынып иҫкә алалар. Әбеттәге Мөршиҙә инәйем бер ҡыҙыҡты әле лә теленән төшөрмәй һөйләй. Күмертауҙағы туғаны Нюра - Нурия Суфияға йыш ҡына ҡунаҡҡа килеп йөрөй. Бер саҡ шулай сәй артында һөйләшеп ултырғанда, Нюра:

-Апай, онотоп ебәргәнмен, "төймә" русса нисек була әле ул?- тип һорай икән...

**Резеда КҮЗБӘКОВА, БДУ студенты.**

# Рух берлеге

**Беҙ бәләкәй саҡта ауылдан 7 км алыҫлыҡта Үҙән йылғаһы буйында бер өй бар ине. Унда Ковалевский фамилиялы урыҫ ғаиләһе йәшәй торғайны. Ғаилә башлығы урман ҡарауылсыһы вазифаһын башҡарҙы. Виктор ағай менән Лиза апайҙар биш бала тәрбиәләнеләр- Вова, Ирина, Сергей, Женя, Миша. Бала-сағалары шаярып-нитеп китһә, "Ана, урыҫ килә!"- тиеп ҡурҡытыуҙары ныҡ иҫтә ҡалған.**

1950 йылда Ковалевскийҙар йәшәгән ерҙә леспромхоз асып ебәрҙеләр. Йорттар төҙөп, тирә яҡтан төрлө милләт кешеләрен йыйҙылар. Улар ҡарағай ағасынан сайыр ағыҙҙы, ағас ҡырҡты. Яңы ауыл Бәләкәй Ҡыпсаҡ исемен йөрөтә башланы. Был ауылда башланғыс мәктәп, фельдшер пункты, клуб, леспромхоз конторaһы һәм магазин булды.

Леспромхозда Виктор ағай ҙа эшләне. Балалары Әбделмәмбәт мәктәбенең интернатында белем алды.

Ятыр- торор урын етмәгәнлектән Мишалары өҫтәлгә ятып йоҡлап йөрөгән икән. Шуғалырмы, малай дәресте күпләп ҡалдыра, башында уҡыуға күңел һалмай. Бер саҡ Мишаны мәктәп директоры алға баҫтырып сығарып, "Ҡабат дәрес ҡалдыраһыңмы?",- тип һорай икән. "Юҡ"-,тип яуап бирә Миша. Директорға малайҙың яуабы оҡшап ҡала. "Ана, ул урыҫ булһа ла, "юҡ" ти. Һеҙ башҡорт булһағыҙ ҙа, "яҡ" тип һөйләшәһегеҙ",- тип уҡыусыларын орошоп ала.

Шул Миша үҫеп, егет ҡорона еткәс,тиҫтерҙәре менән ауылда киске уйынға йөрөй,оҫта итеп башҡортса бейергә лә өйрәнә. Армияға алынғас, өйөнә: "Башҡорттарҙан мин бында бер үҙеммен"-, тип хат яҙып ебәрә.

Ковалевскийҙар менән беҙҙең ғаилә бик дуҫ булды. Ҡан-ҡәрҙәшлек түгел, рух берлеге бар ине беҙҙең мөнәсәбәттәрҙә. Хатта балаларыбыҙ бер- береһен ағай, ҡусты тип йөрөтөр булды.

**Ғәлимә ШӘРИФУЛЛИНА,**

Бөрйән районы,
Килдеғол ауылы.

# Үҙеңдекен танымағас...

Башҡорттар, ғәҙәттә, таныш булмаған кешегә тота ла урыҫ телендә өндәшә. Ике башҡорттоң бер ни булмағандай урыҫса һөйләшеп киткәнлеген күргәнегеҙ барҙыр инде.

Беҙҙең ауылдан бер ағай ҡыҙыҡ хәлгә осраған. Нисектер "Амангилде" совхозынан Гусевка ауылына ваҡ - төйәк йомош артынан бара был. Көнө буйы ҡағыҙ эше менән арманһыҙ булған ағай эңер төшөп торһа ла, Хоҙай берәй яйын сығарыр әле, тип ҡайтырға сыға. Әмәлгә ҡалғандай, ауыл яғына барған машина осрай.

-До Аскарово возьмешь?- ул зәңгәр генә күҙле егеткә баға.

-Давай...

Йәһәт кенә шофер янына ҡунаҡлап ала ағай. Ул Гусевкалағы бөтә урыҫтарҙы йөҙгә белһә лә, быныһын тоҫмаллай алмай аҙаплана. Юл буйы донъя, ил хәлдәре, техникаға ҡағылған мәсьәләләр хаҡында гәпләшеп килә торғас, ярты сәғәтлек ара күҙ асып йомғансы үтә лә китә. Ағай Асҡарға етер саҡта урыҫҡа унлыҡ һона:

- Спасибо, останови здесь.

- Асҡарға инмәйһеңме ни?- урыҫым саф башҡортса һорау биреп ҡуймаһынмы!

- Нимә?

Шофер егет мут ҡына көлөп ҡуя.

- Әллә ҡоҙа һаңғырауланған инде...

- Кем һуң һин? - ағай аптырап китә. Бына һиңә кәрәк булһа!

- Фәлән - фәлән ҡоҙаң булам, русса сват тип атала.

- Ә ниңә урыҫса һөйләшәһең ул?

-Һуң, үҙең шул телдә һүҙ ҡушҡас...

"Урыҫтан башҡортто айыра алмағаныма байтаҡ ҡына көлөп йөрөнөм", тип һөйләне ул ағай.

Башҡорттар ҙа һыу кеүек эсә шул хәҙер урыҫ телен. Бер-беребеҙҙең телен яҡшы белеү үҙ - ара аңлашыуға хеҙмәт итһә, ҡайһылай яҡшы булыр ине. Ни тиһәң дә, тыуған - үҫкән тупрағыбыҙ бер, үткәнебеҙ, бөгөнгөбөҙ, киләсәгебеҙ уртаҡ беҙҙең. Тик бына башҡорттар ғына, бер - береһен күреп сәләмләшкәндә милләттәштәренә үҙ телендә һүҙ ҡушһа ине...

**Айһылыу ХӘСӘНОВА,**
Әбйәлил районы.

# Ҡатнаш никах...

## әммә ике яҡ та һанлана

**Шау-гөр килеп бер тиҫтер малайҙар уйнай. Урам яңғыратып бәхәсләшәләр, бер-береһен еңә алмай ҡысҡырышалар. Ана, араларындағы һап-һары сәсле кескәй малай көҙгө әтәс шикелле ҡалғандарының өҫтөнә менеп килә: "Хәҙер һәнәк алған, сәнскән, үлтергән!"**

Саша хәҙер был бала саҡ шуҡлыҡтарын көлөмһөрәп иҫкә төшөрә. Үҙенең башҡортса һөйләшергә ҡасан өйрәнеүен тәғәйен генә иҫләмәй инде: " Үҙемде белә-белгәндән алып",- ти ҙә ҡуя. Шулай булмай, бәләкәй генә саҡтан башҡорт малайҙары менән уйнап үҫте бит ул. Клавдия Ивановна менән Николай Васильевич Скурлатовтар ғаиләһендә тыуған урыҫ малайына мәктәптә лә, армияла ла, эштә лә башлыса тик башҡорттар менән аралашырға тура килә.

Александр үҫеп, буй еткергәс, башҡорт ҡыҙы Сәмиғаға өйләнеп, балалар үҫтерә, гөрләтеп донъяһын көтә. Оло йәштәге яңғыҙ әсәһен дә ситкә типмәй, үҙенә алып, ғаиләһе менән бергә-бергә татыу ғүмер итә. Тәүҙә ҡәйнә менән килен араһы әллә ни яҡын булмай.

Элек-электән ҡатнаш ғаиләләрҙә булырға тура килһә, "Былар байрам-фәләнде нисек үткәрә икән?"- тип аптырай торғайным. Ни тиһәң дә, һәр милләттең үҙ йолаһы, ғөрөф-ғәҙәттәре. Һәр кем үҙ яғына тарта башлаһа... Әле Скурлатовтарҙан шул турала һорамай булдыра алманым. Александр минең яйһыҙ һорауыма бер ни тиклем сәйерһенеү менән яуап бирҙе: "Әлләсе, ундай уйҙың башҡа ла килгәне юҡсы. Урыҫ байрамдарында Сәмиға беҙҙең йолаға ярашлы итеп әҙерләнә. Ҡатынымдың туғандары йыйылһа, мосолмандарса шартына килтерә. Бәхәстең булыуы ла мөмкин түгел - был бит бер-береңде хөрмәтләү мәсьәләһенә килеп төртөлә". Ошо урында Сәмиға апай һүҙгә ҡушылып китә:

- Яңы ғына өйләнешкән сағыбыҙ. Икәүләшеп тыуған ауылым Буранғолға ҡунаҡҡа ҡайтып төштөк. Ағай тейешле яҡын ғына туғандарыбыҙ ашҡа саҡырҙы. Мин, тәү тапҡыр килгәс, Сашаға уңайһыҙ булмаһын тип, иремә урыҫса һүҙ ҡушам. Уныһы сатнатып тороп башҡортса яуап биреп тик ултыра! Ҡунаҡтар көлә, ә мин ер тишегенә инерҙәй булып, урыныма һеңгәнмен. Аҙаҡтан, беҙ ҡайтып киткәс, ауылдаштарым: "Кейәү һәйбәт, башҡортса һөйләшеп ултырҙы. Сәмиғабыҙ эреләнеп киткән булған. Урыҫса һөйләшкән була",- тип һөйләп йөрөгән.

- Иҫләй китһәң, ҡыҙыҡ нәмәләр күп инде ул,- тип ипле генә көлә Сәмиғаның әсәһе Хәйерсафа инәй.- Бер көн ниңәлер ейәндәрем мыжый. Тымыҙып ҡына булһасы! Александр кейәү шаярып, балаларына: "Шымығыҙ, урыҫ алып китә!"- тип ҡурҡытҡан була. Көлөп хәлем бөттө.

Сәмиға апай һөнәре буйынса - сәс алыусы. Хәҙер бала бағып, өйҙә ултырһа ла, оҫтаға даими клиенттары килеп, сәс ҡырҡтырып китә. Александрға иһә техника ене ҡағылған - атаһына оҡшап, ҡулдары тимер-томор эшенә килешеп кенә тора. Бына шундай бөтмөр, татыу ғаилә йәшәй Асҡарҙа.

**Мәҙинә ЙӘҒӘФӘРОВА.**

Әбйәлил районы.

✓ ***Ауыҙ осоноп, эренләп сыҡһа, "ауыҙлыҡ" булған, тиҙәр. Уны имләү өсөн, ат ауыҙлығын ауыҙға алып: "Айғыр булдым! Айғыр булдым!"- тип кешнәргә кәрәк. Шулайтһаң, ауыҙлыҡ ауырыуы китә.***



ӘҮЛИӘ-ӘҮЛИӘЛЕК

# Шәмиғол хәлфә

## Бала саҡтан мине үҙ итеүе

Күгәрсен районының Ишбирҙе ауылында йәшәгән заманыбыҙ әүлиәһе Шәмиғол хәлфә менән миңә бала саҡта уҡ танышыу, аралашыу бәхете тейҙе.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ауырыу атайым Кананикольск урман хужалығында ағас әҙерләү менән шөғөлләнде. 1943 йылдың февраль айында уны фалиж һуғып, эшкә яраҡһыҙ булып ҡайтты. Дауаханала ятыу ҙа файҙа бирмәне. Беҙгә фәҡәт Шәмиғол хәлфә генә ярҙам итә алыуына ышанып, юлға сыҡтыҡ. Беҙҙең Төпсән ауылынан Ишбирҙегә тиклем 35 км самаһы. Йонсоу ғына ат менән Ишбирҙегә өс сәғәт ярым тирәһе ваҡыттан һуң ғына барып еттек. Хәлфә: "Юлға доға уҡымай сығып, бөтә шайтанды тейәп, атты йонсотоп киләһегеҙ", - тип шелтәләп ҡаршы алды. Атайымды ихлас тәрбиәләне ул. "Йәйлап шәбәйерһең, ни эшләп алданыраҡ килмәнең?" тип тоҙ өшкөрөп, бетеү яҙып бирҙе. Ә бына мине баштан аяғыма тиклем ике ҡулы менән һыпырҙы ла: "Һөйкөмлө, егәрле булып үҫә торған балаҡай һин. Бар, тыштан утын алып ин", - тип сығарып ебәрҙе. Мин эште еренә еткереп башҡарҙым. "Улым, икенсе тапҡыр атайыңды Ишбирҙегә алып килмә, мин үҙем Төпсәнгә барам, апайым Ғәйниямалды һағындым, шунда барғас, икегеҙҙе лә тәрбиәләрмен", - тине.

Ошонан һуң күп тә үтмәне, Шәмиғол хәҙрәт беҙҙең ауылға килде. Шул көндө үк мине саҡырып алды: "Улым, мине егет итеп йәшәрт, һаҡал, мыйыҡты, сәсемде ҡыр", - тине. Мин тиҙ генә өйгә ҡайтып, атайымдың "ҡырҡыныс" бәкеһен алып, хәлфә янына йүгерҙем. Ул уңайлы итеп ултырҙы ла: "Ҡабаланмай ғына ҡыр, бәкене тейҙермә, киҫмә, бер тамсы ла ҡан сыҡмаһын, бер тамсы ҡан да ирҙең ҡеүәтен кәметә, абайлап ҡылан", - тине. Мин һис тә ҡаушамай үҙ эшемде башҡарам. Олатай ҙа ҡәнәғәт ултыра. Ҡырып бөткәс, "Олатай, күҙгә бирәйемме?" тип һораным. Ул: "Юҡ, улым, мин былай ҙа күреп, тойоп торам, күҙгә кәрәкмәй", - тине лә миңә 25 һум аҡса бирҙе. Мин: "Алмайым, кәрәкмәй, оят була", - тигәс, "Мә, ал, кескәһен урамға сыҡһаң, иптәштәреңә тәмәке алып тарттырырһың", - тип йылмайып ҡуйҙы. "Тәмәке тартһаң, гонаһ була, ярамай", тим. "Улар бер тапҡыр ғына һурып ҡарар ҙа ул тәмәкене, төкөрөр, башҡа тартмаҫтар. Һин ошо эште башҡар, йәме", тине хәлфә. Мин ул ҡушҡанса эшләнем. Ысынлап та, мин тәмәке тарттырған ул тиҫтерҙәрем аҙаҡ был ғәҙәт менән бөтөнләй мауыҡманы. Күрәһең, Шәмиғол олатайҙың бер ғиләһе булғандыр бында.

Артабан да олатай беҙҙең ауылға килһә, мине саҡыртып ала. Ә мин уны йәшәртәм, һаҡал-мыйыҡтарын ҡырам. Ул һәр саҡ ҡәнәғәт. Мораҡ педагогия училищеһында уҡыған саҡта олатай эргәһенә йыш йөрөргә тура килә ине. Һәр барғанда ла ул миңә эш ҡуша. Мин етеҙ генә башҡарып ҡуям. Ул кеткелдәп көлгән була. Ҡайтыр юлға сығыр алдынан: "Килгән юлыңдан ҡайтма, ендәрең аҙашып ҡалһын, ауырыма", - тип оҙата ине.

Бер тапҡыр хәлфә янына һыбай барырға тура килде. Бығаса егелмәгән, әкиәттәгеләй матур тай ине. Ҡойроғо ергә тейеп, ялдары күҙҙең яуын алып тора. Ауылдан сыҡҡас та Оло Эйек йылғаһы аша сы-

***"Олатай, күҙгә бирәйемме?" тип һораным. Ул: "Юҡ, улым, мин былай ҙа күреп, тойоп торам, күҙгә кәрәкмәй", - тине лә миңә 25 һум аҡса бирҙе. Мин: "Алмайым, кәрәкмәй, оят була", - тигәс, "Мә, ал, кискеһен урамға сыҡһаң, иптәштәреңә тәмәке алып тарттырырһың", - тип йылмайып ҡуйҙы. "Тәмәке тартһаң, гонаһ була, ярамай", тим. "Улар бер тапҡыр ғына һурып ҡарар ҙа ул тәмәкене, төкөрөр, башҡа тартмаҫтар. Һин ошо эште башҡар, йәме", тине хәлфә. Мин ул ҡушҡанса эшләнем. Ысынлап та, мин тәмәке тарттырған ул тиҫтерҙәрем аҙаҡ был ғәҙәт менән бөтөнләй мауыҡманы. Күрәһең, Шәмиғол олатайҙың бер тылсымы булғандыр бында.***

ғырға кәрәк. Тайым һыуҙы сәсрәтә баҫып сығып китте. Ә бына Ишбирҙегә етер алдынан бәләкәй генә йылға бар. Тайым һикерһә, икенсе ярҙа була ала. Әммә ул ярға барып етте лә, йылғаға төшмәй, кире сигенә. Аптырағас, төшөп, атты етәкләп, йылғаны йәйәүләп кисеп сыҡтым. Һис кирелэнмәй, артымдан атым да эйәрҙе. Олатай янына барғас, ул көлә: "Улым, икенсе тапҡыр олатайың янына килергә сыҡҡанда таҙарынып, йыуынып кил, йәғни аяҡ-ҡулыңды, битеңде, ауыҙыңды өс мәртәбә доға уҡып сайҡа, бер һүҙ менән әйткәндә, тәһәрәтләнеп ал", - тип әйтте. "Атҡа мин ишара иттем, ендәрен ана шул йылғасыҡ эргәһендә ҡалдырһын, туҡта, һыу аша сыҡмай тор, тәүҙә үҙе кисһен, тинем, ат тыңланы, һин дә ошонан һуң тыңларһың, тип уйлайым", - тине.

- Олатай, аңланым, һин әйткәндәрҙе һис һүҙһеҙ үтәйәсәкмен, тик тәһәрәтләнеү доғаһын ғына белмәйем, - тинем.

Олатай доғаһын өйрәтте лә былай тине:"Был доға бөтә бәләләрҙән, афәттән, сихырҙан һаҡлай. Йылғанан һыу эскәндә лә, сит кешелә аш ашағанда ла уны эстән генә уҡы ла, шикләнмәй генә кинәнеп аша". Олатай менән оҙаҡ серләшеп ултырҙыҡ. Ул мине ҡат-ҡат өшкөрҙө лә: "Улым, һине бер кем дә йәберләй алмаясаҡ, һәр саҡ һүҙең өҫтөн булыр, һин миһырбанлы бала буласаҡһың, олатайың һиңә ризалыҡ бирә, аңланыңмы? - тип башымдан һыйпап ҡуйҙы. - Ҡайтҡанда артыңа әйләнеп ҡарама, ат үҙе юл табып, үҙе ҡайтһын. Юлға ошо доғаны уҡып сыҡ: "Бисмиллаһир рахманир рахим. Үәләхәүлә үә лә ҡеүәтә иллә биллә илғәлил ғәзим, амин", тип өс тапҡыр әйт, шул һине бәлә-ҡазаһыҙ һә тигәнсә өйөңә алып ҡайтыр. Алдағы килеүеңдә үҙем әйтермен, көтөп йөрө, ул тиҙҙән буласаҡ. Хәҙергә өшкөргән тоҙҙо эсә тор, ә бынау бетеүҙе кеҫәңдә генә йөрөт, йыш ҡына еҫкәп ал! "

Бер көн олатайҙы төшөмдә күреп уяндым да, ат егеп, Миңлеямал менән Ғәтиә апайҙарҙы ултыртып, Ишбирҙегә - олатай янына барырға сыҡтым. Бригадир, ат һорағас:"Үҙең генә түгел, ана Ғәтиәне лә алып бар", тине. Ғәтиә апай ҙа ат һораған булған икән. Ул бесән сапҡан ваҡытта муйыл ағасына менеп, ҡолап төшөп, умыртҡаһын сатнатып, ике аяғы ла йөрөмәй ине.

Юлда бик оҙаҡ барҙыҡ. Барғас, хәлфә шелтәләп алды: "Бөтә енде тейәп, атты хәлдән тайҙырып килгәнһең. Тәүҙә сәй эсәйек, шунан атыңды Нурулла ағайыңа (хәлфәнең улы - **М.Ә.**) ебәрербеҙ. Ул Дәүләтҡол яланында бесән сабып ята. Күбә тарттырырға аты юҡ. Бөгөнгә беҙҙә йоҡларһығыҙ. Теге ике һылыу Нурулла ағайың өйөндә йәшәп торор. Ә беҙ икәү көн күрербеҙ, булдымы?" Һөйләшкәнсә эшләнек. Атты Дамир исемле улы бесәнгә алып китте. Гөлсирә ҡыҙы теге ҡатындар менән ҡалды. Хәлфә янына Шәйхетдин исемле ир килде. Сатанлап, көскә атлай. Тубығы шул тиклем ныҡ шешкән. Ул һуғышта йәрәхәт алған, тәнендә тимер ярсығы ҡалған. Шунан интегә. Хәлфә уның тубығын ҡараны ла, бармағы менән батыра яҙып төрттө. "Ни эшләп улай оҙаҡ килмәй йөрөйһөң, олатайыңа ышанмайһыңмы әллә?" тине. "Юҡсы, һеҙҙе өйҙә юҡ тип әйттеләр", тине Шәйхетдин ағай. "Мин булмаһам, Нурулла ағайың бар бит. Ул да ярҙам итә ала. Бар, ҡайт, ял ит", - шулай тип, Шәмиғол хәлфә ауырыуҙы ҡайтарып ебәрҙе. Иртәгәһенә Шәйхетдин ағай етеҙ атлап килеп инде. "Бына, олатай, тимер ярсығы. Һеҙ батыра төрткән урындан һытылып килеп сыҡты", тине ул. Үҙенең шатлығының сиге юҡ.

Беҙ атты көтөп, тағы йоҡларға ҡалдыҡ. Кис олатай менән сәй эстек тә, мин урамға йөрөп килергә сығып киттем. Егеттәр менән танышып, һөйләшеп ултырғансы байтаҡ ваҡыт уҙған. Мин йүгерә-атлай кире ҡайтып киләм. Ҡапҡа алдында бер ҙур эт тора. Үҙе өрмәй ҙә, тешләшмәй ҙә, йортҡа ла индермәй. Аптырағас, Нурулла ағай йорто яҡлап инергә тип барһам, шул уҡ эт тағы баҫып тора. Олатайға ҡысҡырырға мәжбүр булдым. Ул сыҡты ла: "Миңә әйтмәйенсә урамға сыҡҡанға индермәй һине эт", - тине. Мин ғәфү үтенеп, өйгә инеп яттым. Иртәнсәк торғас: "Олатай, йорт тирәһендә кисәге эт күренмәй бит", - тип һораным. "Ул эт мин саҡырғанда ғына килә", – тип көлдө олатай. Беҙ икенсе көнөнә ҡайтып киттек. Ғәтиә апай йәйләп аяҡҡа баҫты.

## Әүлиә тауына зыярат ҡылыу

Был хәл 1953 йылда булды. Олатай беҙҙең ауылға килде һәм Әүлиә тауына менергә теләген белдерҙе. Уны бәләкәй арба яһап, шуға ултыртып, бер нисә ир менән тауға һөйрәп мендерҙек. Өмикамал тигән ҡатын Әүлиә тауы итәгендә сәй ҡайнатырға тороп ҡалды. Тауға менеп еткәс, олатай аҙан әйтеп, намаҙ уҡыны. Көн аяҙ, күк йөҙөндә бер киҫәк болот та күренмәй. Яҙ башланғас та ямғыр яуғаны юҡ ине.

Намаҙ уҡығас, Шәмиғол хәлфә һөйләп китте:"Балалар, был ҡәберҙә ятҡандарҙың һөйәктәрен Аллаһы Тәғәлә кәрәк урынға алды, бында тик ҡәбер урындары ғына. Ләкин һәр кем ошонда хаж ҡылһа, намаҙ уҡып, теләк теләһә, теләктәре ҡабул буласаҡ. Был изге йәндәрҙе Ҡаҙағстандан дөйәләргә артмаҡлап килтереп, төндә кеше күрмәгәндә генә ерләгәндәр. Үҙ халҡын татар-монголдарға ҡаршы көрәшергә, ерен-һыуын һаҡларға өндәгән юлбашсы һәм уның ғаилә ағзалары күмелгән бында. Йәшерен ерләнһәләр ҙә, уларҙың ҡәбере өҫтөндә яҡты нур балҡыған, быны күреп, кешеләр тауға менгән һәм биш ҡәберҙе күргән. Шул көндән башлап халыҡ, дин әһелдәре ошо Әүлиә тауына зыярат ҡыла башлаған".

Хәлфә ошо һүҙҙәрҙе һөйләп тә бөттө, ҡибла тарафынан ҡара болот күренде, көслө ел сыҡты. Ҡойоп ямғыр яуа башланы. Беҙ тиҙ генә түбәнгә төштөк. Сәй ҡайнатҡан урында пар ат егелгән арба тора. Арбала бер ир кеше ултыра. Ул олатайға: "Хәлфә, әйҙә минең арбаға ултыр, бында йомшаҡ, үҙем алып ҡайтам", - тип әйтеүе булды, олатай асыуланып: "Бар, күҙемдән юғал. Миңә был арбала ла яҡшы", - тине. Теге ир "уй-ғуй" тине лә, атын ҡыуып, китеп барҙы. Аңлауымса, быныһы ла олатайҙың ҡылған мөғжизәһе, йәғни был атлыны беҙҙең күҙгә күрһәтеүе генә булды, ахры.

**Миңнулла ӘЛИМҒОЛОВ,**

Күгәрсен районы.

**(Дауамы бар).**

ИМ-ТОМ

# БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАЛАРЫ

**Ауыҙ осоноу**

Ышаныуҙар буйынса, ауыҙға яман заттар тейһә (үпһә, ҡағылһа, һуҡһа), йәки улар ауыҙ иткән аш-һыуҙы, ҡағылған һауыт-һабаны ауыҙға тейҙерһәң, ауыҙ осона, йәғни ауыҙға бөрсөк-бөрсөк сабыртма сыға. Был ауырыуҙы, ғәҙәттә, ат ауыҙлығын тешләтеп имләйҙәр.

Башҡорттарҙа ауыҙ осоноуға ҡаршы профилактик саралар системаһы ла булған. Мәҫәлән, башҡорттар ит ашағандан һуң мотлаҡ ауыҙморондо сайҡатырға ҡуша. Сайҡатмаһаң, ен-шайтан ауыҙыңды ялай икән. Бигерәк тә ауыҙҙы сайҡатмайынса урамға сығыуҙы тыялар. Шуның өсөн ит ашы ашағандан һуң, еҙ тас һәм ҡомған менән рәтләп ҡул һәм ауыҙ морон сайҙырыу йолаһы булған. Шулай уҡ аш-һыуҙы, тоҙҙо асыҡ ҡалдырырға ярамай. Ышаныуҙар буйынса, асыҡ ҡалған тоҙға, аш-һыуға шайтан төкөрә лә шуны ашаған кешенең ауыҙы осона.

**Ауыҙлыҡ име**

Ауыҙ сите иҙелеүсән була. Шуны ауыҙлыҡ булған, тиҙәр. Унан шулай ҡотолалар. Берәү һорай:

- Ни булған?

-Ауыҙлыҡ булған! Иһо-һо-һо!- тип әйтә ауыҙлыҡ булған кеше йәки әсәһе әйтә, йә икәүләп әйтеп, кешнәйҙәр (шулай өс тапҡыр ҡабатлана). Яуап биргәндә былай тип тә өҫтәйҙәр:

Елдән килһәң, елгә кит,
Һыуҙан килһәң, һыуға кит,
Ҡайҙан килһәң, шунда кит!
Иһо-һо-һо!

**Ат ауыҙлығы менән имләү**

Ауыҙ осоноп, эренләп сыҡһа, "ауыҙлыҡ" булған, тиҙәр. Уны имләү өсөн, ат ауыҙлығын ауыҙға алып: "Айғыр булдым! Айғыр булдым!"- тип кешнәргә кәрәк. Шулайтһаң, ауыҙлыҡ ауырыуы китә.

**Ирен осоноуҙан им-том**

Кеше утҡа төкөрһә, ирене осона һәм иренenә һары сәбертмәләр сыға. Бынан ҡотолоу өсөн утҡа һары май тамыҙыр кәрәк. Им итеүсе кеше лә, ауырыу ҙа им-том иткәндә шым ултырырға тейеш. Тауыш сыҡһа, файҙаһы булмай.

**Йылан мөгөҙө менән имләү**

Әгәр иренгә ауырыу күберсеп сыҡһа, күбәләк ырыуы әбейҙәре мөгөҙҙө (йылан тиреһен) һыулап һөртөп, былай тигәндәр:

Ҡотҡа ҡорт!
Бына сағам, бына яғам!
Күҙең-башыңды сағам!
Ауырыу китте, баҡ!
Бына китте, баҡ!

Айыу көпшәһе һуты тамыҙыу

Ситтек - ауыҙҙа шекәрә кеүек тапма бөртеп сығыу. Уға тын ҡыҫылғанда, нәҙек көпшә аша тамсылап, айыу көпшәһе һутын тамыҙғандар. Тамыҙғанда: "Бында булдың! Йоҡоға талдың! Инде тал! Бирермен бер баш мал!"- тигәндәр.

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**
**"Башҡорттарҙың им-том китабы".**

✓*Урамда уйнап йөрөгән ике бала үҙ-ара һуғышып китә. Быларҙың әсәйҙәре сығып, үҙ-ара һүҙ әйтешә. Күп тә тормай атайҙар сығып, үҙ-ара һуғыша башлай. Был арала балалар дуҫлашып та өлгөрә.*



# Алтынды нәжескә буяу менән... уның заты китмәй

**Был юлы "Диалог" рубрикаһына Башҡортостан Диниә назараты мөфтөйе Нурмөхәмәт хәҙрәт НИҒМӘТУЛЛИН менән БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты Гүзәл СИТДИҠОВАны саҡырҙыҡ. Йор һүҙле хәҙрәт әңгәмәне бер кинәйә һөйләүҙән башланы.**

**- Йәше еткән улы менән атаһы, мисәүле ат егеп, кәләш эҙләп сығып китәләр. Юлда осраған тәүге ауылда туҡтаған былар. Бына бер ҡыҙ көйәнтәләрен сайҡалтып, һыуға китеп бара икән. Атай кеше оҙаҡ уйлап тормаған, ҡыҙ алдында улын туҡмай башлаған. "Ниңә улыңды туҡмайһың?" - тип һораған ҡыҙ. "Әйткәнде эшләй", - тигән атай кеше. "Әйткәнде эшләгәс, һәйбәт бит", - тип, ҡыҙ егетте яҡлашҡан. "Ултыр, улым, беҙ эҙләгән ҡыҙ был түгел", - тип, былар ары киткән. Икенсе ауылда туҡтағандар. Күп тә тормай, бер ҡыҙҙың һыуға китеп барғанын күргәндәр. Ҡыҙ сибәр генә булһа ла, башы бер яҡҡа ҡыйышыраҡ икән. Атаһы тағы ла улын туҡмай башлаған. "Ниңә улыңды туҡмайһың?" - тип һораған ҡыҙ. Атай кеше: "Әйткәнде эшләй", - тигән тағы ла. "Дөрөҫ, туҡма әйҙә, - тигән ҡыҙ. - Үҙе белеп эшләһен, әйткәнде алйот та эшләй ул". Атай кеше ҡыуанып киткән. "Өйөгөҙ матур ғына, тик мөрйәһе бер яҡҡа ҡыйышыраҡ икән", - тигән ул. "Мөрйәһе ҡыйыш булһа ла, төтөнө тура сыға", - тип яуап биргән ҡыҙ. "Бына, улым, беҙ үҙебеҙ эҙләгәнде таптыҡ", - тигән атай.**

**Әңгәмә барышында хәҙрәттең кинәйәне бушҡа һөйләмәүе асыҡланды, буғай.**

**▶Беҙ үҙебеҙҙе азат һанайбыҙ. Тулыһынса азат булмаған хәлдә лә, берәү ҙә үҙен ҡол тип әйтмәй. Ә нимә ул шәхес азатлығы, күңел таҙалығы, выждан сафлығы? Бөгөн ирекле фекер йөрөтөп, уйлаған һүҙеңде асыҡ итеп әйтеп тә булмай кеүек...**

**ГҮЗӘЛ СИТДИҠОВА:** Берәй фекерҙе кеше күҙмә-күҙ һөйләшкәндә ҡыйыу әйтә алып та, күмәк кеше алдында шул уҡ фекерҙе әйтергә ҡурҡыуы мөмкин. Ул фекерҙән түгел, уның эҙемтәһенән ҡурҡа, сөнки, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, әле беҙҙә кешене тулыһынса яҡлау институты юҡ. Закондарҙың бөтәһе лә теүәл үтәлә, тип әйтеп булмай. Хатта енәйәт ҡылынған осраҡта ла күрмәмешкә һалышыуҙар бар. Элек, мәҫәлән, йәмәғәт фекере, йәмәғәт тыйыуы көслө ине. Был функция юғалды, кешеләр үҙ-үҙенә бикләнә башланы. Совет осоронда "берәү - бөтәһе өсөн, бөтәһе берәү өсөн" принцибы йәшәне. Хәҙер иһә, "быны файҙаһы бармы, быны өсөн аҡса киләме?", тигән принцип өҫтөнлөк итә. Бөгөн кеше үҙ өҫтөнә яуаплылыҡ алыуҙан, "бушҡа" ваҡыт сарыф итеүҙән, зыян күреүҙән ҡурҡа. Депутаттар араһында тәүге саҡырылыштарҙа, мәҫәлән, митингылағыса фекерләү өҫтөнлөк ала. Төптән уйлағанда, депутат - ул митингыла ҡысҡырыусы түгел. Митингыла бик матур һүҙҙәр әйтергә мөмкин. Был әле, депутат әйткән һүҙҙәрен тормошҡа ашыра ала, вәғәҙәләрен үтәрҙәй рәте бар, тигәнде аңлатмай. Иленең, халҡының киләсәген ҡайғыртҡандар ҡысҡырып һөйләп йөрөмәй, баш баҫып эшләп, үҙе һайланған округҡа файҙа килтереү яйын күрә, Рәсәй кимәлендә үҙ республикаһының мәнфәғәтен ҡайғырта, абруйын күтәрә.

**НУРМӨХӘМӘТ хәҙрәт:** "Аллаһы Тәғәлә юлына хикмәт менән саҡыр", тиелә Ҡөрьәндә. Нимә ул хикмәт? Хикмәт - ул кәрәкле урында йомшаҡ итеп ваҡытында әйтелгән, ҡабул ителерлек, кәрәкле фекер, тәрән мәғәнә биргән ҡиммәтле һүҙ, ҡиммәтле нотоҡ. Тимәк, һүҙебеҙ хикмәтле булырға тейеш. Башҡа дин әһелдәре менән ғилми бәхәскә кергән ваҡытта ла, "һеҙҙең динегеҙ шулай, һеҙҙең динегеҙ былай", тип хурларға ярамай, ә күркәмлек менән һөйләшергә кәрәк. Дин - ул үҙе өгөтнәсихәт. Элек был һүҙҙе оло быуын кешеләре кәңәшсе булараҡ та, нәсихәтсе булараҡ та йәштәргә еткерер булған. Ауылы берҙең - ҡәүеме бер, ти халыҡ. Элек шәжәрә, туған-тыумасалыҡ буйынса ололарҙың абруйы ҙур булған. Бөгөн, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ана шул тәртип юғалды, сөнки һәр кем үҙенә бикләнгән. Совет осоронда динде хурлау һөҙөмтәһендә шәжәрәләр онотолдо, туған-тыумасалыҡ, ҡанҡәрҙәшлек ептәре өҙөлдө, "тураһын әйткән - туғанына ярамаған" мәҡәле өҫкә сыҡты. Туғаныбыҙҙың, яҡыныбыҙҙың кәмселеген күрәбеҙ икән, уны беҙ йәйлап, уңайлап, аңлап ҡабул итерлек миҡдарҙа кинәйәләп, хикмәт менән әйтергә тейешбеҙ.

Атай-олатайҙарыбыҙ мәҡәлдәрҙе бик йыш ҡулланған. Мәҡәл менән әйтеү кешенең мин-минлегенә теймәй - уның төп хикмәте шунда. Бер атай үҙ улын эшкә ебәрә. Ҡырҙа йөрөп ҡайтҡан улынан атаһы кешеләр уның тураһында ни әйтеүен һорай. "Арты ауырҙың



**Исламда һәр бер эштә лә алтын урталыҡ бар. Мөхәммәт бәйғәмбәр бер ағас аҫтында бәйғәб (присяга) алған. Бәйғәмбәр вафатынан һуң халыҡ шул ағасты изгеләштереп йөрөй башлағас, хәҙрәти Ғөмәр уны ҡырҡҡан да ташлаған. Халыҡтың алдына сығып, һаташтырып йөрөүселәр бөгөн, ысынлап та, бик күп. Бынан беҙ һаҡланырға тейеш. Ислам мәрхүмдәрҙең ҡәберенә зыярат ҡылырға рөхсәт итә, әммә ғибәҙәт ҡылырға түгел. Беҙҙең халыҡ мәрхүмдәрҙе изгеләштерергә әҙер генә тора. Дин юлына баҫып, файҙа күрергә, йә зыярат ҡылып, әүлиәгә әйләнергә уйлай. Төрлө шундай сараларға ваҡытын сарыф иткәнсе, ғилемгә хеҙмәт итһә, файҙа булыр ине.**

ҡулы оҙон", тип әйттеләр, ти улы. Атай кеше улына мәҡәлдең асылын аңлата. Икенсе тапҡыр ҡырҙа йөрөп ҡайтҡан улынан атай кеше тағы ла халыҡ фекерен белешә. "Етем ике ашар, тип әйттеләр", ти улы. Үҙе белеп, етеҙ эшләгән тырыш кеше ике ашай, тигәнде аңлай атаһы һәм улына ла шуны аңлата. Бына шулай, мәҡәл йә кинәйә менән уратып әйткәндә һүҙҙең хикмәте арта.

Аҡмулланың бер шиғырында шундай һүҙҙәр бар: "Алтынды нәжескә буяу менән уның заты китмәй". Ислам динен нәжескә буярға маташыу бер бөгөн генә түгел, күптән килә. Ул Мөхәммәт бәйғәмбәр тере саҡта ла булған. Кемдер дингә ышыҡланып, яуызлыҡтар ҡыла икән, был дингә ышаныуҙы аңлатмай. Боҙоҡлоҡ ҡылғандар һис тә дин юлында була алмай. Дингә ышыҡланған ялған хәрәкәттәр ҙә бар, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Уларҙың күптәре дингә нәфрәт уятыу өсөн махсус рәүештә эшләнә. Әсәйем һөйләгәйне. Урамда уйнап йөрөгән ике бала үҙ-ара һуғышып китә. Быларҙың әсәйҙәре сығып, үҙ-ара һүҙ әйтешә. Күп тә тормай атайҙар сығып, үҙ-ара һуғыша башлай. Был арала балалар дуҫлашып та өлгөрә, ә ике әсәй менән ике атай ғүмерлеккә дошман булып ҡала. Хикмәтлелек бына ҡайҙа. Ике кеше үҙ-ара татыу булһа, улар уртаһында Аллаһы Тәғәлә була. Ул юҡта, урынын шайтан биләй һала.

**▶Йәшәйештә бөтөн нәмә үҙ-ара мөнәсәбәткә ҡоролған: кеше менән кеше аралаша, дәүләт менән дәүләт. Ниндәй генә ғилемде алып ҡараһаҡ та, уны әҙәм балаһына ҡарата булған мөнәсәбәтенә ҡарап баһалайбыҙ. Бөгөн дин менән дәүләт араһындағы мөнәсәбәт ниндәй, ул заман талабына яуап бирәме, йәмғиәттең рухи ихтыяжын тулыһынса ҡәнәғәтләндерәме?**

**ГҮЗӘЛ СИТДИҠОВА:** Бөгөн динде власть өсөн файҙаланыу күҙәтелә ул. Дин әһелдәренең үҙҙәрен дә бер үк төрлө баһалап булмай: кемдер, динем, тип йөрөй, кемдер, көнөм, ти. Динде һәр кем үҙе аңлап, үҙе ҡабул итергә тейеш. Әгәр ҙә һәр кем, министрмы ул, ябай хеҙмәткәрме, динле булһа, дәүләт эсендә боҙоҡлоҡҡа юл ҡалмаҫ һәм бер дәүләт икенсеһенә ҡаршы ла бармаҫ ине. Дин булһа, тәртипһеҙлектәр булмаҫ ине, тигәнде ниңәлер башҡалар үҙенсә аңлай. Мәҫәлән, дин көслө булған илдәрҙә лә тәртипһеҙлектәр күп, тип аҡланырға, аңлатырға тырышалар.

Йыш ҡына динле булып күренеп йөрөгәндәрҙең күңелендә иман булмауы ихтимал. Ғибәҙәтханаларҙа ғибәҙәт ҡылыу, сиркәүгә инеп суҡыныу, мәсеттә намаҙ уҡыу ғына динле булыуҙы аңлатмай. Таҙа, матур һауыт эсендә ағыу булыуы ихтимал, кешенең затлы, матур кейеме уның боҙоҡ холҡон йәшерә алмай. Йәмғиәт эсендәге тәртипһеҙлектәр, дәүләттәр араһындағы низағтар - бөтәһе лә иман булмауҙан килә. Динде ниндәйҙер ҡара ниәттәрҙе бойомға ашырыу йә власть яулау өсөн ҡулланған ваҡытта дин юғала бары тик ышыҡланыу сараһы булып ҡала.

**НУРМӨХӘМӘТ хәҙрәт**: Һәр бер нәмәнең үҙ үлсәме, баһаһы, эталоны бар. Бөтөн нәмә кешегә шул эталон аша аңлашыла. Баҙарҙа ла бит һәр нәмә үлсәнә, баһалана. Дин дә беҙгә стандарт, эталон ролен үтәй. Мәсьәләнең икенсе яғы ла бар: шул эталондан кем күпме ала ала. Кемдер әҙ генә ала, кемдер күп ала, кемдер уны фекере өсөн, кемдер сәйәсәте, кемдер дәрәжәһе өсөн ала. Мәҫәлән, балта төҙөлөш ҡоралы ла, енәйәт ҡоралы ла булыуы мөмкин. Динде кем ниндәй маҡсатта ҡабул итеүе хажға барған ваҡытта үтәнән-үтә күренә. Унда кемдер сауҙа мәшәҡәте менән бара, кемдер донъя күреп ҡайтыуҙы маҡсат итә. Дин тотоусылар араһында ла, тимәк, мең төрлө кеше бар. Дин менән хөкүмәттең мөнәсәбәтенә килгән ваҡытта, Ислам дине һәр заманға ла яраҡлы ҡабул ителгән. Дин иң тәүҙә халыҡтың рухын тәрбиәләй. Хөкүмәт тә тәрбиә менән шөғөлләнә, ләкин уның төп мәшәҡәте - халыҡты эш менән тәьмин итеү, илдең иҡтисадын күтәреү, бойондороҡһоҙлоғон һаҡлау. Рухи тәрбиәгә, күңел нескәлегенең таҙалығын ҡайғыртыуға уның ваҡыты етмәй. Ә элек бит аҡһаҡалдарҙың фекер көсө менән йәшлек дәрте уртаҡ ҡараш тыуҙырған, сәйәсәт бер яҡлы ғына булмаған. Әле хөкүмәт менән дин араһында ҙур ҡапма-ҡаршылыҡ юҡ. Хөкүмәт тә, дин дә белемгә, ғилемгә ынтыла, хөкүмәт тә, дин дә ныҡлы ғаилә булһын, тип тырыша. Ҡаршылыҡтар ҙа була. Мәҫәлән, табибтар абортты рөхсәт итә, Ислам дине ҡаршы. Ни өсөн тигәндә, әсә булыу Хоҙай ҡөҙрәте. Бала тауышы ул бит үҙе тормош дауамы.

**▶Беҙҙең Рәсәйҙә Ислам тәғлимәте артҡы пландараҡ йөрөй һымаҡ...**

**ГҮЗӘЛ СИТДИҠОВА:** Закондар ҡабул иткән ваҡытта беҙҙә евроцентрик ҡараш йәшәй, христианлыҡ стандарты өҫтөнлөк итә, Ислам иҫәпкә алынмай. Ә бит Рәсәйҙең өстән ике өлөшөн Азия биләй. Унда христиан диненән башҡа Ислам, буддизм, иудаизм да бар. Йыл аҙағында Мәскәүҙә "Күп милләтле Рәсәй" тигән Бөтә Рәсәй конференцияһы үтте. Шуға иғтибар иттем: президиумда гел ирҙәр, сығыш яһаусылар ҙа улар. Ғаилә, ҡатын-ҡыҙ мәсьәләһе тураһында һүҙ күтәргән бер кеше юҡ. Тәнәфес ваҡытында асыуҙы килтерерлек һорауҙар биреп, аптыратып бөттөләр: "Күпме дотация алаһығыҙ, һеҙ буддистармы, республикағыҙ ҡайһы ерҙә?". Әйтерһең дә, Рәсәй Мәскәү, Петербург һәм Екатеринбургтан ғына тора, башҡа субъекттарҙы телгә алыусы ла, радио-телевидение аша сағылдырыусы ла юҡ. Быдай ҡараш интернациональ булған Ислам диненә лә ҡаршы килә. Закондар нигеҙендә лә башҡа халыҡтарҙың йолалары, диндәре иҫәпкә алынмай. Түҙмәйенсә, ошо хаҡта сыҡтым да, сығыш яһаным, республикабыҙ тураһында ҡыҫҡаса һөйләп үттем. Мәҫәлән, ғаилә моделенең Ислам нигеҙе ҡағиҙәләре ниңә иҫәпкә алынмай? Ысынлап та, Ислам әхлағына хас булған йолаларҙы беҙ закондар ҡабул иткәндә күҙ уңында тоторға тейешбеҙ. Депутаттар был мәсьәләне ҡурҡмайынса күтәрергә тейеш.

**▶Хатта үҙебеҙҙең мосолмандар араһында ла атеистик ҡараштан арына алмағандар күп бит әле...**

**ГҮЗӘЛ СИТДИҠОВА:** Бер билдәле генә әҙәм минең динле булыуыма шик белдерҙе. "Кешенең динле булыу-булмауын тик Аллаһы Тәғәлә генә белә", - тинем мин яуап итеп. "Христос, Мөхәммәт, Кришна кеүек әллә күпме Аллағыҙ бар, бер файҙаһы юҡ", - тип, ул әллә нәмәләр һөйләй башланы. "Дин тарихын өйрәнһәгеҙ, әле әйткән һүҙҙәрегеҙҙән үҙегеҙ оялырһығыҙ", - тинем аптырап. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Аллаһы Тәғәлә менән бәйғәмбәрҙәрҙең кем икәнлеген, ғөмүмән, дин тарихын белмәгәндәр дин тураһында күберәк һөйләй. "Ниңә Аллағыҙ шул хәтлем мәрхәмәтле булғас, илдә бардак?" - тип асыу белдерҙе әңгәмәсем.

***✓Артыҡ әһәмиәт бирмәгән йондоҙнамә лә тап ана шул сихыр көсөнә таянып төҙөлә. Йондоҙ ғилемен өйрәнеү - сихырҙың бер тармағы. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, гәзит-журналдар, радио-телевидение бөгөн уны бик йыш ҡуллана.***



Хоҙай Тәғәлә биргән тәғлимәттән ситләшеп, үҙ тәртибебеҙҙе урынлаштырып маташҡанға ла тәртипһеҙлек хөкөм һөрөүен беҙ һаман да аңлау кимәленә етә алмайбыҙ, иҫәр аҡылыбыҙ менән әллә ниҙәр ҡылабыҙ шул. "Ниңә шулай булғас, Аллағыҙ Ньютондың законын юҡҡа сығармай?" - тине ул еңмешләнеп. Ул бит Ньютондың законы түгел, Аллаһы Тәғәлә ҡөҙрәте, Ньютон бары уны асҡан ғына. Быны әле беҙ аңларҙай кимәлдә түгелбеҙ. Фәндәрҙе физика, химия, микробиология кеүек өлкәләргә беҙ, кешеләр, шартлы рәүештә генә бүлеп йөрөтәбеҙ, ә бит улар бөтәһе лә Аллаһы Тәғәләнең закондарын әҙәм балаһының, ниһайәт, үҙ зиһене менән аңлай башлауы ғына. Эргәбеҙҙә аңлап етмәгән, асылмаған әллә күпме хәҡиҡәт бар әле, уның сиге юҡ.

**НУРМӨХӘМӘТ хәҙрәт:** Дин - ул нигеҙле ғилем. Башҡорт халҡының бик тәрән мәғәнәле мәҡәле бар: "Үҙеңдән башҡаны әүлиә тип бел". Тимәк, эргәңдәге кеше Аллаһы Тәғәләгә һиңә ҡарағанда меңтапҡыр яҡыныраҡтыр, тигәнде аңлата ул. Бөгөн Исламға килгән ҡайһы бер ҡанҡәрҙәштәребеҙ, гүйә ки, мин йәннәткә керһәм генә, бөтәбеҙ ҙә йәннәткә керә, тип фекерләй.

▶**Кеше тыумыштан уҡ мөғжизәгә ышанып тыуа. Донъяны танып белеү ҙә тап ана шул һәләте булғанға тормошҡа аша. Хыялланыу, мөғжизә көтөү беҙҙе маҡсатлы итә түгелме? Дини ғилем дә, күрәһең, айҡап бөтмәҫлек бер мөғжизәлер. Әммә кешенең эскерһеҙлеген, мөғжизәгә ышаныуын ҡайһы берәүҙәр үҙҙәренең ҡара эштәре өсөн дә ҡуллана бит...**

**ГҮЗӘЛ СИТДИҠОВА:** Сихырҙың булыуы үҙе үк Аллаһы Тәғәләнең барлығын, йәки унан башҡа беҙ аңламаған тағы ла икенсе көстәрҙең барлығын күрһәтә. Ваҡытында Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең үҙен дә сихырлап маташҡандар. Тик ул бәйғәмбәрлеге арҡаһында сихыр көсөнән ҡотола алған. Яуыз көстәрҙең булыуын һис тә инҡар итеп булмай. Сихыр менән булыусылар тап ана шул яуыз көстәрҙең, Иблистең көсөн файҙалана. Мәҫәлән, артыҡ әһәмиәт бирмәгән йондоҙнамә лә тап ана шул сихыр көсөнә таянып төҙөлә. Йондоҙ ғилемен өйрәнеү - сихырҙың бер тармағы. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, гәзит-журналдар, радиотелевидение бөгөн уны бик йыш ҡуллана. Нисек кенә тәнҡитләмәһендәр, әрләмәһендәр, мин йондоҙнамә баҫылған бер гәзит-журналды ла алдырмайым һәм сихырҙы ҡеүәтләү өсөн үҙ аҡсамды сарыф иткем килмәй. Халыҡты алдап, күрәләтә күрәҙә ҡосағына ташлаусы матбуғат сараларына йәнем әрней. Рәсми гәзиттәр, үҙҙәре лә һиҙмәҫтән, кешеләрҙе күрәҙәсегә барырға, ҡайғы алырға этәрә. "Күрәҙәсегә барма, башыңа ҡайғы алма", тип бушҡа әйтелмәгән бит. Күрәҙәселәр йоғонтоһона бирелеп, үҙ яҙмыштарын боҙоусылар шул тиклем күп. Бер апай йәш сағындағы бер хатаһын һөйләгәйне. Ул кейәүгә сыҡҡас, өләсәһе уға: "Һинең ике ирең була", - тигән. "Минең икенсе ирем буласаҡ, һинең менән йәшәүем уға хыянат", - тип, был йәш ҡатын тәүге ирен ҡыуған да ҡайтарған. Ул үҙ яҙмышын емереп, икенсе иргә кейәүгә сығып, быға үкенеп йәшәне. Сихыр менән булышыусылар үлә алмай этләнә, тиҙәр. Йондоҙнамә менән мауығыусылар һуңғы сәғәттәре тураһында ла уйлаһындар ине, тип әйткем килә.

**НУРМӨХӘМӘТ хәҙрәт:** Бөгөн, хатта ки, ғалимдарыбыҙ, фекер матдиләшә, ти. "Ағас башын ел бора, әҙәм башын һүҙ бора", тип, быны элек-электән дә әйтә торған булғандар. "Кешенең теле - фәрештәнең ҡәләме", тип тә әйтәләр. Йәнә бер мәҡәл бар: "Уйнап һөйләһәң дә, уйлап һөйлә". Элек бит ололар мәҡәл-әйтемдәр, ауыҙ-тел ижады аша тәрбиәләгән. Улар хатта әрләшкәндә лә "Ауыҙыңа май булғыр" кеүек һүҙҙәр ҡулланған, баланың күңелен күтәрә белгән. Кешенең психологияһына килгәндә, ул аңлап бөткөһөҙ өлкә. Ысын күңелдән әйтелгән бер яҡшы һүҙ менән генә лә кеше ғүмер буйы шатланып-ҡыуанып йәшәй ала, йәки бер генә насар һүҙ кешенең яҙмышын емереп, рухын һындырыуы ихтимал. Һүҙ бик ҙур көскә эйә. Шуға ла беҙ һүҙҙе бик уйлап һөйләргә, балаларҙы рухландырырға, дәртләндерергә, үҙ өҫтөбөҙҙә эшләргә тейешбеҙ. Ә күрәҙәсе һинең үҙ һүҙеңде кире үҙеңә ҡайтарып, зиһенеңдә яулай, ҡамау эсенә ала, шунан аҡсаңды ла ала.



***Йондоҙ ғилемен өйрәнеү - сихырҙың бер тармағы. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, гәзит-журналдар, радио-телевидение бөгөн уны бик йыш ҡуллана. Нисек кенә тәнҡитләмәһендәр, әрләмәһендәр, мин йондоҙнамә баҫылған бер гәзит-журналды ла алдырмайым һәм сихырҙы ҡеүәтләү өсөн үҙ аҡсамды сарыф иткем килмәй. Халыҡты алдап, күрәләтә күрәҙә ҡосағына ташлаусы матбуғат сараларына йәнем әрней. Рәсми гәзиттәр, үҙҙәре лә һиҙмәҫтән, кешеләрҙе күрәҙәсегә барырға, ҡайғы алырға этәрә. "Күрәҙәсегә барма, башыңа ҡайғы алма", тип бушҡа әйтелмәгән бит. Күрәҙәселәр йоғонтоһона бирелеп, үҙ яҙмыштарын боҙоусылар шул тиклем күп.***

Махсус рәүештә кешенең аҡылын буйһондороу өҫтөндә эшләүселәр элек тә булған, әле лә юҡ түгел. Маңҡорттар, зомбиҙар, биороботтар күктән төшмәй. Ислам дине күрәҙәсегә барырға тыя, сөнки күрәҙәсегә ышанған кеше диндән ситләшә. Мәҫәлән, юлдан ҡара бесәй үтеп бара икән, ул үҙ юлы менән бара, беҙ үҙ юлыбыҙ менән. Шундай хөрәфәттәр аңыбыҙҙы сикләй ҙә инде. Йондоҙнамәгә килгәндә, ул ғилем элек-электән булған. Әммә ул ахырында кешене зомбилаштырыуға ҡорола башлаған. Бөгөнгө эшеңде иртәгәгә ҡалдырма, тигән Бәйғәмбәр. Мәҫәлән, йондоҙнамәгә ҡарап, мин бөгөн атҡарырға тейеш эшемде иртәнгә ҡалдырырға тейеш буламмы? Сихыр ғилеменең ахырында ҡаза килә, шуға күрә Аллаһы Тәғәлә уны беҙгә рөхсәт итмәй. Ә файҙалы ғилемгә рәхим итегеҙ, уның игесиге юҡ, ул үҙе бер ғаләм. Донъяның иге-сиге булмаған һымаҡ, ғилемдең дә сиге юҡ. Уны тулыһынса өйрәнеү өсөн бер ғүмеребеҙ етмәй. Мәҫәлән, тәжрибә өсөн генә араҡы эсеп, наркотик ҡулланып ҡарағандар һуңынан ләззәт ҡолона әүерелә. "Бушсыр ҡапҡанда ғына була", тиҙәр бит. Шуға күрә, ваҡ тәжрибәләр өсөн ваҡыт сарыф итергә кәрәкмәй. Хоҙай биргән мәңгелек ҡиммәттәр менән йәшәгәндә генә бәхетле була алабыҙ.

▶**Ислам дине тәғлимәте төрлө хөрәфәттәрҙе лә кире ҡаға, шулаймы?**

**ГҮЗӘЛ СИТДИҠОВА:** Беҙҙә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, дин менән хөрәфәтте бутау бар. Төрлө хөрәфәттәрҙе үтәйҙәрҙә, күптәр үҙҙәрен динле кеше тип һанай. Хөрәфәттең дин менән бер ниндәй уртаҡлығы юҡ. Бер танышым төрлө хөрәфәттәргә ышанып, уға фэн-шуй кеүек башҡа халыҡтарҙыҡын өҫтәп, үҙенең дә, ғаилә ағзаларының да ғүмерен тотошлай ғазапҡа әйләндергән. "Шулай эшлә, былай итмә" кеүегерәк бөтмәҫ-төкәнмәҫ тыйыуҙары менән яҡындарының хәлен алып бөтөрә. Ислам дине шул хәтлем камил, беҙ һәр бер эшебеҙҙә бары тик Аллаһы Тәғәләнән генә ҡурҡырға тейешбеҙ. Ҡөрьәндә әйтелмәгән тыйыу тыйыу түгел. Мәҫәлән, Ҡөрьәндең бер ерендә лә "ҡара бесәй юлды ҡыйһа, юл уңмай", тип әйтелмәгән. Хөрәфәт - Иблистән, тип бушҡа әйтмәйҙәр. Милләттәштәрем төрлө хөрәфәттәргә ышанмайынса, Аллаһы Тәғәләнең ҡушҡанын ғына үтәп йәшәһә, ул тыйғандан тыйылһа ғына күңеле ирекле, выжданы азат була. Бер танышым: "Әүлиә зыяратына барып, ҡорбан салырға кәрәк", - тине бер мәл. Ҡөрьәндә бит ҡорбан салыу тәртибе асыҡ әйтелгән. Бәләкәй хаж уйлап сығарып, яҙыҡ ҡыланыу килешкән эш түгел. Әүлиә кимәлендәге көслө шәхестәр булған, әлбиттә. Әммә уларҙы Аллаһы Тәғәлә менән тиң ҡуйып, әүлиәләрҙән ниндәйҙер ярҙам килә, тип уйларға ярамай. Ярҙам килә икән, тик Аллаһы Тәғәләнән килә, әммә әүлиәнән түгел.

**НУРМӨХӘМӘТ хәҙрәт:** Аллаһы Тәғәлә юлының һәр сатында шайтан көтөп торор, тиелә. Ул мал менәнме, дәрәжә менәнме алдаштырып, үҙенә саҡыра. Шуның кеүек, бөгөн Ислам диненең тоғро юлынан яҙлыҡтырып, ситкә алып китергә тырышыусылар туп-тулы. Исламда һәр бер эштә лә алтын урталыҡ бар. Мөхәммәт бәйғәмбәр бер ағас аҫтында бәйғәб (присяга) алған. Бәйғәмбәр вафатынан һуң халыҡ шул ағасты изгеләштереп йөрөй башлағас, хәҙрәти Ғөмәр уны ҡырҡҡан да ташлаған. Халыҡтың алдына сығып, һаташтырып йөрөүселәр бөгөн, ысынлап та, бик күп. Бынан беҙ һаҡланырға тейеш. Ислам мәрхүмдәрҙең ҡәберенә зыярат ҡылырға рөхсәт итә, әммә ғибәҙәт ҡылырға түгел. Беҙҙең халыҡ мәрхүмдәрҙе изгеләштерергә әҙер генә тора. Дин юлына баҫып, файҙа күрергә, йә зыярат ҡылып, әүлиәгә әйләнергә уйлай. Төрлө шундай сараларға ваҡытын сарыф иткәнсе, ғилемгә хеҙмәт итһә, файҙа булыр ине. Кеше ышанмаҫлыҡ нәмәләр менән баш ҡатырғансы, беҙҙең бит башҡа эштәребеҙ ҙә етерлек.

**ГҮЗӘЛ СИТДИҠОВА:** Әйткәндәй, Ризаитдин Фәхретдин Әхмәт Йәсәүи зыяратына барып, әүлиәнән ярҙам һорап йөрөгән кешеләр тураһында яҙып ҡалдырған. Хөсәйенбәк кәшәнәһе тураһында ла яҙмалары бар. Уларҙы ул ярамаған ғәмәл тип атай. Йөҙ йыл элек тә быңдай ваҡиғалар булған, тимәк. Тарих ҡабатлана. Бер таныш апай һөйләгәйне. Ҡаҙағстандағы бер ҡала эргәһендә бер шишмә булған. Йәйен-ҡышын шишмәләге һыуҙың температураһы бер төрлө икән. Бөтөн халыҡ унда дауаланырға йөрөгән. Ҡыҫҡаһы, сихәте көслө булған ул шишмәнең. Үҙгәртеп ҡороу осоро башланғас, бер ҡаҙаҡ ул урынды хосусилаштырып палатҡалар, ванналар ҡуйған. Нәҡ шул көндө һыу ҡайҙалыр юғалған. Өс көн үткәс, һыу ҡырҡ саҡрымдай алыҫлыҡта икенсе ерҙән бәреп сыҡҡан. "Аллаһы Тәғәлә биргән мөғжизәне үҙенеке генә итергә тырышҡаны өсөн Ул уны юҡҡа сығарҙы", - тигән ололар. Кеше һаулығында аҡса эшләргә тырышыусыларҙың да яҙмышы шулай бөтөүе бар. Ҡөрьәнде тәфсирләп өйрәнеп кенә күҙебеҙ асыласаҡ. Аңлап, ғалим кимәлендә фекер йөрөткән, дин ғилемен халыҡҡа еткерә алғандай дин әһелдәребеҙ әле бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Ауылда, мәҫәлән, мулла итеп шикле кешене ҡуйһалар, ул йыназа көтә лә, кемдең балаһы тыуа, тип йөрөй. Халыҡ араһында аңлатыу-тәрбиә эше алып барырға, йәштәр менән һөйләшергә мәғлүмәте лә, ғилеме лә етмәй. Ундайҙар бар эшен өшкөрөү-төкөрөү менән йола үтәүгә генә ҡайтарып ҡалдыра. Хәҙер төрлө әҙәбиәт шул тиклем күбәйҙе - Ислам дине исеменән сығарылған баҫмаларҙа ла дингә шик, нәфрәт уятырлыҡ мәғлүмәттәр килеп сыға. Шуға күрә дини әҙәбиәтте өйрәнгән ваҡытта ла диндә яҡшы белгән остаздар менән кәңәшләшергә кәрәк. Шулай булмаһа, ҡайһы берәүҙәр, үҙҙәре лә һиҙмәҫтән, диндә оҫта файҙаланған төрлө экстремистик ойошмаларға, хаталы йүнәлештәргә, мосолмандарҙы үҙ-ара дошманлаштыра торған секталарға инеп китеүҙәре мөмкин.

**Радик ӨМӨТКУЖИН**
**яҙып алды.**

## ШУЛАЙ ИТЕП...

**Дин тарихын, бәйғәмбәрҙәр тормошон, изге китаптарҙың йөкмәткеһен белмәү арҡаһында дингә беҙ бер ҡатлы ҡарайбыҙ. Белер инек, мәғлүмәт етмәй. Бар мәғлүмәтте лә ҡабул итергә ваҡытыбыҙ юҡ. Шул хәтлем дә тормош ығы-зығыһына күмелгәнбеҙ, "социум" тигән йәмғиәт ҡоршауы үҙ ҡулында ныҡ тота - физик тәнебеҙҙе лә, рухыбыҙҙы ла. Ниәт ҡылырға ғына кәрәк, рухилыҡ тау артында түгел, эргәбеҙҙә.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# Иман менән тамырҙаш

## баҫалҡылыҡ та

**"Һәр диндең үҙенсәлеге бар, Исламдың үҙенсәлеге - баҫалҡылыҡта". Был һүҙҙәрҙе Мөхәммәт бәйғәмбәр бынан 1400 йыл элек әйткән, әммә был хәҡиҡәт бөгөн дә үҙ көсөн юғалтмай. Бәйғәмбәр ауыр осорҙа йәшәгән. Ул заманда ҡоллоҡ, аҙғынлыҡ, әскелек көслө булған. Гонаһ шомлоғонан ҡурҡмайынса, ҡатын-ҡыҙҙы рәнйетеү, мәсхәрә итеү бер тин шайы тормаған. Байҙар, байлығына арҡаланып, әхләҡи нормаларҙы һанға һуҡмай, хаттин ашҡан. Башҡаһы быға вайымһыҙ, күҙ йомоп ҡараған.**

Мөхәммәт бәйғәмбәр һәм уның сәхәбәләре Ҡөрьән төшөрөлгәнгә тиклем дә бик әҙәпле булған. Уларға үҙ үрнәгендә башҡаларҙы ла баҫалҡылыҡҡа, сыҙамлыҡҡа, шәфҡәтлеккә, йәғни дөрөҫ йәшәргә саҡырырға ҡушылған.

Баҫалҡылыҡ тәү ҡарамаҡҡа ғына күҙгә салынып бармаған сифат һымаҡ. Баҫалҡы кешеләр ниндәй һуң? Улар йыуаш була, шуға күрә үҙҙәренә артыҡ иғтибар талап итмәйҙәр, кеше күҙенә салынмаҫҡа тырышалар. Маҡтауҙан уңайһыҙланалар, хатта был уларҙың асыуын ҡабарта, сөнки улар һәр эшен бары тик Аллаһы Тәғәлә ҡушҡан бурысын лайыҡлы үтәргә тырышыуы менән аңлаталар. Оялыусанлыҡ менән тыйнаҡлыҡ баҫалҡылыҡты матурлай ғына. Баҫалҡылар үҙенең төҫ-башы, аҡылы менән үҙҙәрен башҡаларҙан өҫтөн ҡуймай. Бөгөн ҡыҙ-ҡатындар ҡайһы берҙәре бөтөн ғаләм алдында тәнен аса икән, был баҫалҡылыҡ тигән иң күркәм сифатты аша атлауға тиң. Ундайҙар баҫалҡы, сибәр заттарҙың йөҙөнә тап төшөрә. Ниңәлер бөгөнгө мосолман ирҙәренең күбеһе баҫалҡылыҡты хуп күрмәй һәм шуның менән гүзәл затты яман юлға баҫыуға этәрә. Ирҙәрҙең үҙҙәре өсөн дә баҫалҡылыҡ берҙәй матур, сөнки тыйнаҡлыҡ кейемдә генә сағылмай, фиғеленең дә күркәм булыуы зарур. Игелек ҡылыу Аллаһы Тәғәләнең мәрхәмәтен яулау өсөн эшләнә - популярлыҡ яулау, йәки матди ҡәнәғәтлек тойғоһо кисереү өсөн түгел. Баҫалҡылыҡ, тыйнаҡлыҡ һәм иман бер тамырҙан.

**Вариҫ МӘҠСҮТ.**

**Көндәлектәрҙе мин 1998 йылдан бирле алып барам. Уға тиклем яҙғандарымды яҡтым. Шәхси һыҙланыуҙарым хаҡында яҙғандарымды үҙемдән һуң ҡалдырырға тейеш түгелмен, тигән ҡарарға килдем. Асылда, яҙыусы кешенең башы даими уйға көйләнгән була һәм шул уйҙы теге йәки был әҙәби жанрҙа формалаштырыу өсөн йә ваҡыт, йә көс, ҡайһы саҡ һәләт тә етеп бөтмәй. Ә былай... Замана ваҡиғаларына мөнәсәбәтемде ошо килеш булһа ла белдерә барһам, мин йәшәгән осорҙоң ниндәй булыуын ҡыҙыҡһынып уҡырҙар, тигән өмөтөм бар.**

**Ҡайһы бер йылдар яҙмалары матбуғатта баҫылып сыҡҡас, миңә хаттар килде, телефондан да шылтыратып, фекерҙәремдең үҙҙәренеке менән тап килгәне хаҡында белдерҙеләр. Яҙыусының бөгөнгө хаҡындағы уйҙары бөгөн үк ҡыҙыҡ. 2004 йыл иҫегеҙҙәме? Иҫегеҙгә төшөрәйем.**

Теге саҡ, 90-сы йылдар романтиктары, үҙ мөмкинлеген баһалап бөтмәне шикелле. Илебеҙ ҙә, халҡыбыҙ ҙа үҙгәрештәргә әҙер булмай сыҡты. Коллективлыҡ тойғоһонда тәрбиәләнгән романтиктар халыҡ мәнфәғәте хаҡына башланған реформаларҙы айырым кешеләр үҙ файҙаһына бороп, тип күҙ алдына ла килтермәгәйнек. Минең быуыным кешеләре ғәҙеллектең "донъя кимәлендәге тантанаһына" инаныуҙы, уның хаҡына етешһеҙлеккә күнеп йәшәргә әҙер һуңғы быуынмы икән ни?

**Тамара ҒӘНИЕВА**

# Уйланыуҙарым



**2004 йыл**

**1 февраль.**

Илебеҙҙә коррупция менән көрәш бара. Иң ҡыҙығы шунда, бөтә төр көрәш саралары үҙ-үҙенде дауалау формаһында эшләнә. Чиновниктар коррупция сиренә тарыған үҙ-үҙе менән көрәш юлдарын эҙләй. Шул рәүешле көрәш иллюзияһы барлыҡҡа килә, уның барышында ваҡ-төйәк ришүәтселәрҙең "ҡойроғо борола". Ә коррупция кеүек яман сирҙән ҡотолор өсөн теләк тә кәрәк бит әле. Бөгөн бер генә дәүләт структураһы ла быға әҙер түгел.

**14 февраль**

Бик күп юғалтыуҙарға дусар ителгән халҡыбыҙ алдында үҙемде ғәйепле кеүек тоям. Халыҡ алдында "ғәйеп комплексы" менән яҙаланып, табиб, уҡытыусы сифатында мәғрифәтселеккә тотоноусы XIX быуат разночинистары кеүек, мин дә үҙ-үҙемдән ҡәнәғәтһеҙлек кисерәм. Беҙ, 90-сы йылдарҙа реформалар өсөн көрәш юлына баҫыусылар, донъяны яҡшы яҡҡа үҙгәртә алырбыҙ, тип инанғайныҡ, асылда, кемгәләр илебеҙҙе капитализм сокорона төртөп төшөрөргә булышлыҡ ҡына иттек. Яклауһыҙ кешеләргә иң ҡуйырҙай дәүләт структуралары ҡыйратылып, кешеләр хәйерселеккә тарытылды. Бөгөн йәмғиәттең кешене ғәҙелһеҙлектән ҡурсалар институты юҡ тиерлек. Халыҡҡа азатлыҡ бирелде, ә уның рәхәтен кемдәр күрә һуң? Яңы шарттарға яраҡлаша алыусылар ғына. Азат йәшәргә лә әҙер булырға кәрәк шул. Ә былай ни... Ни бары йәмғиәттең әхләҡи тормоздары ҡакшаны, шул ғына... Дәүләтебеҙ маһайыулы текә оятһыҙлыкты тыя торған сара тапһын ине. Кешелеклек, әхләҡлелек, гуманизм романтикаһы осоро тарихта ҡалдымы икән ни? Әҙәбиәт менән сәнғәттең дә тәьҫир көсө кәмей бара. Яңы быуат уйын һәм хәйләгә йөҙ тотоуҙан башланып китте. Бөтә был мәғәнәһеҙлектәргә минең ҡыҫылышым юҡ, әммә күңелдәге ғәйеп тойғоһо игәй ҙә игәй.

**19 февраль**

Етәксе ир-аттың үҙен маһайыулы һәм хамдарса тотоуы бик күңелһеҙ күренеш. Бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ алдында өҫтөнлөгән күрһәтеп кинәнгән кешегә иҫем китә. Үҙ-үҙенә ышанған, көслө ирҙәр улай ҡыланмай.

**30 март**

Әҙәбиәт минең төп йәшәү формам булды һәм булып ҡала. Мин кешеләрҙе яратам, хөрмәт итәм. Кеше бәләһенә һәм хәсрәтенә битараф ҡарай алмайым. Күңелем структураһы шундай.

Һуңғы ваҡытта ниндәйҙер арығанлыҡ ғәләмәте кисерәм. Әҙәбиәт бик күп күңел кисерештәре талап итә торған шөғөл. Яҙыусы ла әҙәм балаһы бит, ыңғай эмоциялар ҡытлығы уға ла ят түгел. Нимә генә яҙма, рәсми даирәләр һуҡыр, һаңғырау, битараф. Шул быуынға төшә. Ә шулай ҙа... Илһам осконо ҡағылып китеү менән йәнә ижади илаһиәткә сумаһың...

**18 апрель**

Шағир күп нәмәләрҙең ысын асылын белеү һәләтенә эйә булған зат. Шуға ла уның донъяға, ваҡиғаларға мөнәсәбәте һәм шуларға ҡарата фекеренең ҡайһы берәүҙәргә о к ш а п етмәүе ғәжәп түгел. Аҡсалы, власлы кешеләр әйләнәһендә күңелен саф көйө һаклап ҡалырға теләүсе талант эйәһенә уны һәр ваҡыт кемдәрҙер нимәнәндер тыйып, "тәрбиәләп", өйрәтеп, маташасағына күнергә өйрәнергә кәрәк.

**6 май**

Президент Путиндың икенсе срокта-ғы иң төп фишкаһы социаль йөҫөкто ҡырҡа яҡшыртыу булырға тейеш кеүек ине. Ябай халыҡҡа табан йөҙ бороу һиҙелмәй әле. Администрацияге реформа башлап ебәрҙеләр, кеҫтәр структураларын үҙгәртмәкселәр. Был яңы талаптарҙы чиновниктар үҙҙәре лә төшөнөп бөтмәгән кеүек. Хәйер, беҙҙең чиновниктар, үҙҙәренә ҡағылһа, бик сос һәм ижади ҡылана торған. Уларҙың һәр реформаны үҙ мәнфәғәте һәм файҙаһына бороп ебәрә торған таланты бар.

**29 май**

"М.К" гәзитендә сыҡҡан интервьюнан өҙөк килтерәм:

"...изначально мне понравился тусняк...Клип был офигительный. Идет ходок из Сибири с рюкзаком "Гражданская оборона", с ирокезом /прическа-**Т.F.**/, все как положено, в Питер, в Ленинградский рок-клуб. А мы в это время поем песню, лежа в джакузи в розовых трусах, кругом негры с полотенцами, ананасы, шампанское разносят, девки с веерами. А мы сидим в джакузе и поем о попсе".

Я Рабби! Бына һиңә эстетика, бына һиңә телмәр! Йәшермәйем, мин рус культураһы һәм теленә хөрмәт менән ҡарайым, сөнки улар зиһенем офоктарын киңәйтте. Ошондаймы икән бөгөн уларҙың хәле?

**6 июнь**

Минең быуын кешеләренең төп һыҙаты - ғәҙеллек тантанаһына инаныс булды. Шул инаныс беҙгә илһам бирә, йәшәйешебеҙҙе йөкмәткеле итә ине.

Шулар ҡыйралды ла төштө. Электән күреп, белеп йөрөгән таныштарҙың ҡайһы берене эсендә йәшенеп ятҡан нәфсеһен тартып сығарҙы һәм байлыҡ хаҡына ҡиблаһын үҙгәртте. Шунан үҙен "юғары даирә" кешеһемен хәҙер, тип уйлап, дуҫлыҡ һәм танышлыҡҡа мәхлүҡтәрсә хыянат итте.

**20 июнь**

Ир-ат менән ҡатын-ҡыҙ бер-беренә оҡшамаған, хатта ҡапма-ҡаршылыҡлы хәсиәтле ике енес. Һәм ошо икәү ғаләм хәрәкәтенең төп сәбәпсеһе лә... Улар араһында Мөхәббәт тигән ғәләмәт тә булып ҡуйғылай... Ә мөхәббәт... Тиң булмағандар бер-беренен ихлас ярата аламы һуң?

Меңәр йылдар инде ир-ат ҡатын-ҡыҙҙан өҫтөнөрәк булыу өсөн көрәш алып бара. Шуға ла ҡатын-ҡыҙ үҙенең бәләкәйерәк, көсһөҙөрәк, кәмерәк булыуына күнеп бөткән.

Мөхәббәт - йөрәк халәте ул. Әммә хәҙерге заман мөхәббәтенең бәләһе шунда: ана шул тигеҙһеҙлек һәм йәшәп килгән ҡанундар мөхәббәттең "аҡыллы" булыуын талап итә. Һеҙөмтә - айырылышыу, рәнйеш, ҡыйралған яҙмыштар. Аҡыл - иҫәп-хисап механизмы, уның мөхәббәт менән уртаҡлығы юҡ. Мөхәббәт йөрәк халәте. Йөрәк өсөн прагматика аңлайышһыҙ. Йөрәктең күрә алмаусанлыҡ, уҫаллыҡ, рәнйеш кеүек сифаттары юҡ. Былар - аҡыл халәте. Ә ҡатын-ҡыҙ йышыраҡ аҡыл менән ғүмер кисерергә мәжбүр. Алданыу, идеалдар ҡыйралышы ана шуға бәйле лә инде. Тиңлек юҡ ерҙә, ихлас мөхәббәткә лә урын юҡ. Музыканы күҙ менән тыңламайҙар... Мөхәббәт мәсьәләләрендә аҡыллы булыуҙы талап итә бөгөнгө заман. Мөхәббәттең төп тәхете - йөрәк хаҡында уйлап бирәүсе лә юҡ...

**11 май**

Йондоҙнамә буйынса мин - Игеҙәк. Фифти-фифти холоҡло ханым. Яратыуым да, нәфрәтем дә бер миҡдарҙа. Шуныһы ҡыҙыҡ: яратыуымды, һоҡланыуымды бик риза булып ҡабул ҡылыусылар, унан файҙаланыусылар, нишләптер, дәғүә белдереүемде, талаптарымдың үтәлмәүенә ризаһыҙлыҡ күрһәтеүемде ҡабул итә алмай. Ә мин үҙгәрә алмайым. Теләмәйем.

**28 июль**

"АиФ"ты уҡып ултырам. Ошолай тип яҙалар: "Рублевка үҫешкән капитализм батшалығы. Бындағылар айырым планетала йәшәй тиерһең..."

Артабан автор магазиндағы хаҡтарға иғтибар йүнәлтә:

"... лангуст, креветка, омарҙың хаҡы - 100-500 доллар;

- сыр - 700 -3000 һумлыҡ.

Һатыусыларҙың әйтеүенсә, РФ Дәүләт Думаһы һәм Федерация Советы ағзаларының күбеһе ошо магазиндарҙан файҙалана. Ә инде хөкүмәт ағзалары ошоларһыҙ йәшәүҙе күҙ алдына ла килтерә алмай. Улар ошондай ваҡиғаларҙы иҫләй:

-Ниндәйҙер бер модница яңыраҡ ҡына үҙенә 100 мең долларлыҡ һыуһар туны алған;

-Алтын ялатылған кеҫә телефоны 8 мең доллар тора;

-Страус тиреһенән тегелгән ботинкаһың хаҡы - 1,5 мең доллар;

-Эт кейеме - 200-500 доллар;

-Душ кабинаһы - 10 мең доллар.

Рестарандарҙағы блюдоларҙың уртаса хаҡы 30-60 доллар. Нефть магнаты Рәлиф Сафиндың мырҙаһының шәхси милкендәге балалар өсөн күңел асыу комплексындағы уйындарҙың 10 минутлыҡ хаҡы 700-ҙән 2300 һумға торошло.

Ҡоторалар... 1917 йылдағы Зимнийҙың яҙмышын онотҡан рублевкалағылар. Ә бит халыҡ түҙә-түҙә лә...

**30 июль**

Донъя глобалләшеүе өҫтөбеҙгә тулҡын-тулҡын, ҡулса-ҡулса булып ябырыла. АҠШ бөтә төр сараларҙы ҡулланып, донъя ревизоры булырға ниәт тота.

Беренсе тулҡын - ҡорал пульты артында бик үк уҡымышлы булмаған егеттәр ултырған хәрби базаның йөғонто сиктәрен киңәйтеү;

Икенсеһе - теләһә ниндәй юлдар менән тик килем арттырыуға ынтылыусы шәхси банктарҙа башҡа һыймаҫлыҡ суммалағы аҡса тупланыуы, әммә уның осоҙлана барыуы, долларҙың алтын ролен үтәүе;

Өсөнсөһө - электрон бәйләнештең көсө. Уның ярҙамында креслонан артыңды ла ҡутармәй генә глобаль операциялар эшләү мөмкинлегенә эйә булыу, йәки яңы типтағы космополитизм;

Дүртенсеһе - дәүләттең роле көсһеҙләнеү. Бөгөн донъяла 199 дәүләт бар. Дәүләттәр эсендәге күп кенә институттар дәүләттән азат, улар ҙур аҡса әйләнешен контролдә тота. Бындай шәхси монополия донъя кимәлендә хаос тыуҙырыуға һәләтле. Ғалимдар XXI быуаттың урталарында дәүләттәр һаны 800-гә етәсәк, тип фаразлай. Ә илдәр тиктомалдан барлыҡҡа килмәй, граждандар һуғышы, ҡан ҡойошһоҙ быны эшләү мөмкин түгел;

Бишенсеһе - демографик революция. Донъя халыҡтарының хәйерсе илдәр иҫәбенә артыуы. Был халыҡ һаны һәм байлыҡ араһында дисбаланс тыуҙырасаҡ: бер полюста - байлыҡ, икенсеһендә - хәйерселек һәм үрсем. Ә байлығы менән берәү ҙә уртаҡлашырға йыйынмай. АҠШ, мәҫәлән, йылына йән башына 30 мең доллар иҫәбенә бюджет ҡора, ҡалғандар йылына 1 мең доллар иҫәбенән көн күрә.

Байҙар тышҡы ҡиәфәтен рәтләр өсөн генә лә йылына 115 миллион аҡса сарыф итә. Был аҡса, ғәҙел тотонғанда, нисәмә миллион кешене аслыҡ үлеменән ҡотҡара алыр ине.

Ә шулай ҙа, халыҡтарҙы физик яҡтан еңеп булһа ла, рухи цивилизацияны ҡыйратыу мөмкин түгелдер, тип уйлайым. Байлыҡҡа табыныусыларҙың аҙғын нәфсеһенә ҡаршы тулҡындар яралыуы ла һиҙелә.

Беренсеһе - ватансылыҡ, Тыуған илгә, туған халыҡҡа һәм туған телгә ҡарата мөхәббәт тойғоһо. Һыналған төшөнсәләрҙе юҡҡа сығарыу, рухи ҡыйралыштарға дусар ителеү халыҡтарҙа ҡәнәғәтһеҙлек, протест тыуҙыра. Кешеләр туған телгә, мәҙәниәткә һаҡсылыраҡ, үҙенең тарихына иғтибарлыраҡ була бара. Халыҡ-ара, милләт-ара мөнәсәбәттәр рухи ҡиммәттәр, тәбиғи дини ҡанундар нигеҙенә таяныуға ынтыла.

Икенсеһе - фәндәрҙең үҫеше. Информатика, биогенетика яңы асыштар яһай. Аҡыллы файҙаланғанда был

✓ *Тормошка сабыйҙарса ҡараш, йәшәүҙе бер ҡатлы яратыу, таҙа йөрәк, ихлас, эскерһеҙ уйҙар аша ғына килә бит илһам. Ижадымды яратыусы һиҙгер күңелле кешеләрҙе яһалмалыҡ менән алдағым килмәй.*



асыштар кешелек үҫешенә ыңғай йоғонто яһаясаҡ.

Өсөнсөһө - йәш быуындың иң сәләмәт өлөшөнөң эскелеккә, битарафлыҡҡа йәҙ тоткан иҫке быуындың оятһыҙ мәнһеҙлегенән баш тартып, айыҡлыҡҡа, рухиәт һәм әҙәп-әхләҡҡа, гуманлылыҡҡа ынтылыуы.

Кешелектең бөгөнгө ҡиблаһын тотош баһалау һәм киләсәген ҡуҙаллауға һәләтем барҙыр, тигән уйҙан алыҫ мин. Был бары XXI быуат башында ғүмер итеүсе, үҙ заманаһы ваҡиғаларын ҡыҙыҡһынып һәм борсолоп күҙәтеүсе, интуиция һәм инстинкт аша балаларының киләсәге өсөн борсолоусы, йәне берсә инә бөркөт кеүек кәйелеп саңҡыусы, берсә, тәшәнкөлөккә бирелеп ҡаңғырыусы ҡатындың уй-хәүефтәре, ил-йорто, ғаиләһенең, туған халҡының яҙмышына мәрхәмәтле ғүмер теләүсе ҡатындың күңел кисерештәре генә.

**31 июнь**

Дуҫтарым рус телле матбуғатта донъя күргән көндәлектәремдәге фекерҙәрҙең бик билдәле яҙыусыларҙың яҙмаларынан айырмалы булараҡ, үтә етди һәм ҡыйыу булыуы өсөн хәүефен белдерә. "Бик билдәле яҙыусыларҙың" мораль хәле һәм халҡы алдындағы бурысы өсөн мин яуап бирмәйем. Ә үҙ намыҫым һәм әхләҡи принциптарым миңә алдашмаҫҡа ҡуша, ҡәләмемдең ихлас булыуын талап итә.

Дөрөҫөн әйткәндә, мин донъяны башым һәм күңел халәтем аша күҙәтәм. Бер ниндәй ҙә дәүләт сере хаҡында һөйләгәнем юҡ. Миңә ул тәңгәл ҡараңғы.

Ә көндәлектәргә килгәндә... Уйҙарымды ҡағыҙға төшөрөүҙән мине кем тыя ала һәм уның өсөн нишләп ҡурҡырға?

**16 август**

Шиғырҙарымда һағыш күп, шәхси һағышмы ул, тигәндәре бар миңә. Килешмәйем. Минең лирик героиня - замандаш ҡатын-ҡыҙ ул. Бөгөн елкәһендә ғаилә хәстәрен, ил мәртәбәһе йөгөн тартыусы ҡатын-ҡыҙ минең шиғырҙарҙағы образдан ныҡ айырыламы ни? Әммә шуныһы хаҡ: уның ҡайғы-хәсрәте, шатлыҡ-ҡыуаныстары миңә ныҡ таныш һәм аңлайышлы.

**2 сентябрь**

Холестерин тигән аждаһа, стрестар йөрәкте рәхәтләнеп кимерә. Етмәһә, редакция урынлашҡан офистағы кислород ҡытлығы, типография буяуы, елем еҫе, бүлмәнең һиҙелер-һиҙелмәҫ, әммә даими вибрация шарттарына дусар ителеүе сәләмәтлекте ҡаҡшата. 22-се ҡала клиникаһына ҡан баҫымы ныҡ күтәрелеп китеп, йөрәк пульсының үтә йышайыуы сәбәпле, эштән "Тиҙ ярҙам" машинаһында алып килгәйнеләр.

Терапия бүлегендә Башҡорт дәүләт медицина университетының студенттары практика үтә. Нәфисә исемле ҡыҙыҡай сирем хаҡында һораша. "Тиҙҙән ысын доктор булып китерһегеҙ, Аллаһ бирһә," - тигән булып һүҙ ҡушам уға. "Шулай ҙа ул, тик врачтарҙың эш хаҡы үтә бәләкәй бит..." Минең кәйеф ҡырыла. Ысынлап та, дәүләт бюджетына ҡараған даирә хеҙмәткәрҙәренең һәммәһенә лә ҡағылған проблема ул түбән эш хаҡы. Әммә ошо хахта үҙ укыусылары менән һөйләшкән яҙыусыны күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын. Ә врачтар... тик улар ғына ошо хәсрәтен пациенттары менән уртаҡлашырға һәләтле. Врач йәшәү хәленең ауырлығы хаҡында зарланғанда, ҡул үҙенән-үҙе кеҫәгә тығыла, әммә унда ла фәтеүә булмауҙан, күңелдә оялыу һәм үҙеңдә ғәйепле тойоу хисе ярала. Ауырыныу хаҡында һөйләү теләге һүнә. Кешенең, ана, аҡсаһы юҡ, ә һин бында сирең менән уның башын ҡатыраһың!.. Ошо фекеремде Нәфисәгә аңлатып маташам. Йәҙә бошолған ҡыҙыҡай янымдан тырт-тырт атлап китеү яғын ҡарай... Ә минең йөрәк ҡурҡрк ситлеген йән асыуға дөңкөлдәтергә тотона...

**(Дауамы бар).**

*ИЖАДХАНА*

# МАҢЛАЙ КҮҘЕ МЕНӘН ТҮГЕЛ,

## йөрәк менән тоям матурлыҡты

**(Дауамы. Башы 1-се биттә).**

### МАТУРЛЫҠТЫ НИСЕК КҮРӘМ?

Картиналарымды интуитив рәүештә яҙам. Сюжеттар, идеялар хәтер төпкөлөнән, бала саҡ осоронан килә. Күңелемә тәбиғәт күренештәре яҡын. Сөнки кеше менән тәбиғәт айырылғыһыҙ, пейзаж яҙғамында кешенең күңел торошон биреү мөмкинлеге киң. Үҙем төшөргән картиналар эсендә йәшәгем килә минең. Мин күңел торошон, кисерештәр даръяһын хәрәкәттә бирергә тырышам. Бының өсөн төҫтәр күсәгилешлеген, аныҡ булмаған һыҙаттар ҡулланам.

Ижад шәхсән булырға тейеш, тип уйлайым. Шуның өсөн дә башҡа рәссамдарҙың, белгестәрҙең тәнҡитен ҡабул итмәйем, үҙем дә тәнкитләргә яратмайым. Иң мөһиме, эшемдең үҙемә оҡшауы кәрәк. Аллаға шөкөр, минең ижадымды яратыусылар бихисап. Ҡабул итмәүселәр булыуы ла мине борсомай, тимәк, уларҙың күңеле бүтән төрлө рухи аҙыҡ көҫәй. Ә минең рәсемдәремдән йәм табыусылар күргәҙмәләремә йөрөй, бик булмаһа, йортома килеп, картиналарҙы ҡарап сығырға рөхсәт һорай. Шуға иғтибар иткәнем бар: сәнғәтте, матурлыҡты аңлаған кешенең картина алырға аҡсаһы булмай. Бындай осрақта мин эшемде бүләк итәм. Байҙарҙың сәнғәткә мөғәмәләһе башҡа төрлө. Улар картинаны интерьер өсөн, йә булмаһа, ҡалғандар алдында бәҫен арттырыу өсөн ала. Әлбиттә, бындай халыҡ өсөн күңел һалып башҡарған ижад емешен биреп ебәреү еңел түгел. Ләкин был мәсьәләне лә үҙемсә хәл иттем. Картинаны йорт кәрәк-ярағы итеп ҡабул итеүселәрҙең талаптарын өйрәнеп, уларға төбәп яҙам. Әлбиттә, бындай эштәр техник яктан камил булһа ла, күп осрақта минең күңел талабымдан тыш яҙылғанлыҡтан, рухи юғарылыҡҡа өлгәшә алмай. Етешһеҙлекте матурлыҡты маңлай күҙе менән түгел, ә йөрәк менән күреүсе генә тоя ала.

### БУМАЛА МЕНӘН ГЕНӘ ТҮГЕЛӘ

Йөрәк менән яҙылған картиналарҙың энергетикаһы көслө, йөкмәткеһе тәрән, сөнки улар тере. Ҡыҙғаныска ҡаршы, бындай рәсемде әйләнгән һайын тыуҙырып булмай. Дауаханала ятҡан сағымда "Мәктәптән ҡайтышлай" тигән картинамды яҙҙым. Ике улымды һүрәтләнем унда. Илай-илай, хисләнеп, тәьҫирләнеп тыуҙырҙым был эшемде. Яҡын дуҫыма, рәссамға картина бик көслө йоғонто яһаны. Ул күҙ йәштәрен тыя алманы. Тимәк, картинаға һалынған барлыҡ күңел кисерештәрем, уй-тойғоларым киндерҙә һаҡланған булып сыға.

Бер күргәҙмә ваҡытында бер картинам бирәүҙең күңеленә ятты. Ул картинаны һатыуымды үтенә башланы. Ә тап уға окшаған рәсем һатылмай, үҙемдә ҡалырға тейештәр рәтенән. Аптырағас, теге егет күсермә эшләп биреүемде үтенде. Мин баш тарттым. Сөнки картинаны нөсхәһе кеүек итеп, нисек кенә тырышһам да, яҙа алмаясаҡмын. Ике тапҡыр бер үк йылғаға инеп булмаған кеүек, ҡасандыр картина ноң менән һин донъяға ҡарашыңды белдереп, күңелеңде асаһың, үҙ тауышыңды ишеттерәһең. Мин был юлды таптым. Әле уға аныҡ ҡына исем ҡушмаһам да, тап мине башҡа ижадсыларҙан айырыусы үҙ ижад алымым бар. Ҡыҫҡаса әйткәндә, минең техникам елем ярҙамында объекттарҙы үтә күренмәле һәм күләмле итеп төшөрөүгә ҡайтып ҡала. Ғүмер уртаһында ижадта үҙ юлымды тапҡас, илһамланып, айырым бер ҡомар менән яҙа башланым. Хоҙай тарафынан бирелгән даланды һәм рухи байлыҡты түкмәйсәсмәй халыҡҡа еткерергә бурыслымын бит.

Мин ҡала мөхитендә үҙ йортом менән йәшәйем. тыуған йыр буяуҙарға күсә һәм картиналар хасил була. Минең ижадым халыҡ йырҙарынан, музыканан айырылғыһыҙ. Һуңғы ваҡытта минән картиналар яҙҙыр-ған, күңелемдә йәшәгән "композитор"ға ла юл асып, көйҙәр ижад итергә кәрәктер, тигән фекергә киләм.

Картиналар өсөн образдар бала саҡ хәтирәләренән килә. Сөнки юғары кимәлдәге ижад емешен бары тик саф күңелле бала - Әхәт кенә тыуҙыра ала, минең күңелемдә йәшәгән бәләкәй Әхәт яҙа иң матур картиналарҙы. Тормошҡа сабыйҙарса ҡараш, йәшәүҙе бер ҡатлы яратыу, таҙа йөрәк, ихлас, эскерһеҙ уйҙар аша ғына килә бит илһам. Ижадымды яратыусы һиҙгер күңелле кешеләрҙе яһалмалыҡ менән алдағым килмәй. Шуның өсөн дә һуңғы ваҡытта тормош ваҡлыҡтарынан юғары булырға, яуызлыҡтан ары торорға тырышам. Сөнки кешелек өлкәнәйеү тигән ауырыуға дусар, уның менән бергә сабый саҡта бик үҫешкән тойомлау һәләте, өлкәндәр күрмәгәнде күреү мөмкинлеге тупаҫлана, юғалып ҡала. Әлеге көндә мин үҙ өҫтөмдә был юҫыкта ентекле эшләйем, күңелемдә рухи яҡтан байытам, бала саҡҡа кире ҡайтыуын ҡайтып булмаҫ, әммә шулай ҙа...

Бөгөнгө көндә мин күп ваҡытымды ижадҡа арнайым.



яҙырға булышлыҡ иткән һәләткә мин инә алмаҫ инем. Хатта ниндәйҙер кимәлдә бик окшаған күсермә төшөрһәм дә, ул окшашлыҡ тышҡы яҡтан булып, эске йөкмәтке юғаласаҡ бит. Тап картинаның энергетикаһы менән арбалған егет, яһалмалыҡты тойоп, күңел кинәнесе тоймаҫ ине.

Бер ваҡытта ла насар кәйефтә ижадҡа тотонмайым. Сөнки ауыр уйҙарым, ҡараңғы энергетикам менән картиналар аша ҡалғандарҙы ағыуларға теләмәйем. Шулай ҙа бындай һәләттә яҙылған картинам бар, сәскә аша үҙемдең асыулы, ҡаршылыҡлы күңелемде сағылдырҙым һәм "Миндә яуыз януарҙы уятмағыҙ", тип атаным. Ҡаршылыҡлы сағыу төҫтәрҙән торған сәскә образы һаман да минең негатив энергиямды һаҡлай.

### ИЛҺАМЫМ - ХАЛЫҠ ЙЫРҘАРЫ

Һәр ижадсы өсөн үҙ юлын табып, үҙ өлкәһендә яңылыҡ индереү бәхет, йәшәү асылы булып тора. Сөнки ошо-



Ижадханам ҙур бүлмәлә урынлашҡан. Күңелемдә тыуған идеяны киндергә төшөрөү өсөн тәү сиратта миңә тыныслыҡ кәрәк. Мин эш менән булғанда береү ҙә борсорға тейеш түгел. Ижад итеү етеҙлегенә килгәндә, ҡайһы саҡ көнөнә ике картина яҙып ташлайым, аҙмайынса иң оҙағы ике аҙна торғаным бар. Ижадҡа мине ике нәмә илһамландыра - музыка һәм баласаҡ хәтирәләре. А. Солтанов, А. Шаһиев кеүек моңло йырсылар башҡарыуында халҡымдың боронғо йырҙарын тыңлау ижадҡа этәрә. Моң күңел төпкөлөнә үтеп инеп, булмышымды айкай һәм өр-яңы йыр тыуҙыра. Был йыр көсәйеп, донъямды биләй. Тап уның тулҡынында, ҡосағында яҙа башлайым. Ошо йөрәгемдә

Илһамланып, ҡанатланып, ашығып яҙам да яҙам. Сөнки әлегә саҡлы ижадымдағы иң мөһим картинамды яҙманым, тип иҫәпләйем. Ә ул картина минең хыялымда, күңелемдә күптән йәшәй. Миңә уны тыуҙырыу юлын ғына табырға ҡалған.

**Ләйсән ИСКУЖИНА яҙып алды.**

***✓ Тулы кәүҙәле һәм ныҡ һимереүгә бирешеүсән кешеләр диабетҡа дусар була. Уларҙың кәйефе ҡырҡҡа төрләнеүсән. Илап ҡарай торған фильмдарҙан башлап, һауа торошоноң боҙолоуына тиклем нескә күңел менән кисерәләр.***



*ҠАРА УНЫ!*

# СӘЙГӘ ҠУШЫП...

## дарыу эсмә

**Табиптар ҙа, дарыухана хеҙмәткәрҙәре лә яҙлы-көҙлө дарыуҙарға мохтаж кешеләр күбәйә башлауын белә. Ҡыш көнө хроник сирлеләр ҡаты ауырыусан, ә ҡалғандарҙы тымау, йүткереү, киҙеү, миҙгел алмашыныуына бәйле аллергиялар интектерә. Әлбиттә, бөгөн дарыуҙарға ҡытлыҡ юҡ. Тик беҙ дарыуҙарҙы дөрөҫ ҡуллана беләбеҙме?**

Уларҙы дөрөҫ ҡулланыу өсөн белгестәр ҡаптың тышындағы һәм махсус ҡағыҙҙағы мәғлүмәткә иғтибарлы булырға, фәҡәт табип ҡушҡанса файҙаланырға кәңәш итә. Шулай ҙа һәр кем яҡшы белергә тейешле дөйөм "хәүефһеҙлек ҡағиҙәһе" барлығын да иҫтән сығармағыҙ.

● **Беренсенән.** Транспорттамы, магазиндамы, дарыуҙы бер ваҡытта ла йыуылмаған ҡулдарығыҙ менән тотоп, ашыҡ-бошоҡ сәйнәп, һыу ҡушмай ашамағыҙ. Ни өсөн тигәндә, ул уртта йәки аш юлында түгел, ә ашҡаҙанда ирергә тейеш. Юғиһә, уртта онталған дарыу ашҡаҙанға килеп еткәнсе үк аш юлының лайлалы стенаһын зарарлаясаҡ, сөнки уның организмға көслө тәьҫире йотҡас та башлана. Ә ҡулдың бысраҡлығынан зарарлы инфекция эләгеүе мөмкин. Әлбиттә, дарыуҙың һыҙланыуҙы тиҙ баҫыусы сәйнәп йота торғаны ла була. Ләкин уныһын да табип кәңәшенә ҡолаҡ һалып, һыу ҡушып файҙаланыу мөһим. Һыуһыҙ дарыу ашауҙан йөрәк тибеше көсәйә, тын ҡыҫыла, ҡан баҫымы күтәрелә...Медиктар шулай уҡ капсулаға төрөлгәндәрен дә тышын әрсеп, сәйнәргә ҡушмай. Капсулаға тығыҙлап тултырып төрөлөү үҙе үк дарыуҙың бөтөнлөгөн боҙмаҫҡа кәрәклеген аңлата.

● **Икенсенән.** Ҡайһы берәүҙәр дарыуҙы һөт, кофе, һут, хатта сәйгә ҡушып эсә. Был һис тә дөрөҫ түгел. Мәҫәлән, составында кофеин булған дарыуҙы кофе менән эсһәң, йөрәгеңдең "тулауың" һәм ҡан баҫымыңдың күтәрелеүен көт тә тор... Һөт ҡушып эсә торған дарыуҙар ҙа була, әммә улар бик аҙ. Иң дөрөҫө - дарыуҙы мотлаҡ ярты стакан йылымыс таҙа һыу менән эсеү.

● **Өсөнсөнән.** Беҙ шулай уҡ йыш ҡына ҡайһы дарыуҙы ашағанға тиклем, ҡайһыһын ашағандан һуң ҡабул итергә кәрәклеген аңлап етмәйбеҙ, йә табип кәңәшен онотабыҙ. Дарыуҙы ҡабул итеү менән ашау араһында мотлаҡ ярты сәғәт тирәһе интервал булһын. Көн һайын бер нисә дарыуҙы ашарға тура килгәндә, табип та өс төрлөнән артығын тәғәйенләргә тейеш түгел. Тиҙерәк һауығам, тип бөтә төрөн бер юлы йотоу ҙа үтә зарарлы. Уларҙың уҡмашып, составындағы химик матдәләр тәьҫире көсәйеп, организмға зарарлы реакция яһауы бар.

● **Дарыуҙар менән алкоголь һыйышһыҙ...**

Спиртлы эсемлек менән бер ниндәй дарыу ҙа эсергә ярамауын, әлбиттә, һәр кем белә. Шулай ҙа, дарыу эсеү кисектергеһеҙ булған осраҡта, араҡы эскәндән һуң бер нисә сәғәт үткәс кенә табип кәңәшен тотоп, дарыу эсеп ебәрергә мөмкин.

**Белеп дауалан...**

**Эксперттар бөгөн Рәсәй граждандары поликлиникаларға ҡарағанда, дарыуханаларға йыш йөрөй, тип иҫәпләй. Шул сәбәпле, улар дарыуҙарҙы үҙ белдеге менән һайлап йәки һатыусының кәңәше ярҙамында һатып алғас, прилавка артында яҡшы белгес эшләүенең мөһимлеген һыҙыҡ өҫтөнә ала. Эксперттар билдәләүенсә, Рәсәй кешеһе уртаса алғанда йылына 21 доллар аҡсаһын дарыуға сарыф итә. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, халыҡ әле булһа ауырыуҙың сәбәбе менән түгел, ә уның эҙемтәләрен бөтөрөү менән генә көрәшә, ти эксперттар. Рәсәй баҙарында иң күп һатылғаны - йөрәк дарыуҙары һәм антибиотиктар. Ә Европа илдәрендә һәм Американа хәҙер ҡанда холестерин кимәлен түбәнәйтеүсе, йәғни йөрәк ауырыуҙарын булдырмауға ярҙам итеүсе дарыуҙар популяр, халыҡ башлыса шуларҙы һатып ала.**

*СӘЛӘМӘТ БУЛ!*

**Тормошонда күңел тетрәнеүҙәре кисереп, даими хәсрәтләнеп йәшәгән кешеләр йыш ҡына шәкәр ауырыуына дусар булыусан. Психосоматика белгестәре, диабет ауырыуы 20-25 процент осраҡта көнкүрештә хроник стрестар кисереүҙән башлана, тип раҫлай. Был яман сир башлыса кемдәрҙе һағалай һәм һәм кеше психикаһына ниндәй йоғонто яһай?**

# Шәкәр сире...

## шәхси бәләләрҙән



### Ир хыянатынан... ҡатындың ашҡаҙан аҫты биҙе зыян күрә

Кешенең гормональ системаһы, айырыуса ашҡаҙан аҫты биҙе эске кисерештәребеҙҙе һәм беҙҙе уратып алған донъялағы ваҡиғаларҙы нескә тоя. Мәҫәлән, элекке СССР-ҙың "ҡыҙыу нөктәләре"ндә йәшәүселәр араһында диабет менән ауырыусылар һаны ун йыл эсендә 70 процентҡа артҡан.

Әгәр ғаилә тормошо "ҡыҙыу нөктә"нән айырып алғыһыҙ хөрт булһа, ни эшләргә? Мюнхен университеты ғалимдары психосоматик күҙлектән диабеттың аҙыуына өс төп нәмә сәбәпсе булыуына иғтибар итә:

-Травма һуңынан булған депрессиялар. Яҡын кешеңде юғалтыуҙан, интектергес оҙайлы айырылышыу процесы кисереүҙән йәки көсләүҙән күңел тетрәнеп тә ошо сиргә юлығырға мөмкин. Ни өсөн тигәндә, ауыр ваҡиғаларҙы кисереү онотолһа ла, организм бер нисек тә шок хәленән арына алмай. Ундай ваҡытта кешенең эндокрин системаһы саманан тыш ҡеүәт менән эшләү сәбәпле, кемдеңдер ҡалҡан биҙе, бөйөр өҫтө, бәғзеләренең ашҡаҙан аҫты биҙҙәре бындай көслө эшмәкәрлекте күтәрә алмай.

- Ғаиләләге проблемаларҙы башҡаларға белгертмәйем, тип, эсеңә йыйып һәм уларҙы хәл итеү өсөн аныҡ ҡына бер ҡарарға килә алмайынса күңелдә йөрөтөү был сиргә дусар итә. Уға тарыу шулай уҡ алкоголизмдан йәки ирҙең үтә йөрөмтәл булыуынан ыҙаланыуҙан да барлыҡҡа килә. Ашҡаҙан аҫты биҙенең эшмәкәрлегенә ғаиләнең тотороҡһоҙлоғо һәм хәүеф көтөп йәшәү айырыуса ныҡ тәьҫир итә. Ә бит ҡайһы саҡта ҡандағы шәкәрҙең кимәлен нормаллаштереү өсөн күңел тыныслығы ла етә.

- Ҙур хәүеф тойғоһо ла диабетҡа юл аса. Даими хәүеф, ҡотҡо хәлендә йәшәгән кешенең организмы шәкәрҙе етеҙ яндырыуы сәбәпле, инсулин эшкәртеп сығарырға өлгөрмәй. Бына ни өсөн кеше нервылар ҡуҙғыуын һәм хәүефләнеүен баҫыу өсөн татлы ризыҡ ашай. Ваҡыты менән ул стресты бөтөрөү өсөн шоколад һәм тәмле пирожныйҙар ашарға ғәҙәтләнәсәк. Һөҙөмтәлә - кешенең тәмле-татлы ашамлыҡһыҙ тора алмауы, инсулин эшкәртеп сығарыуҙы насарайтып, икенсе типтағы диабетты аҙҙырыуға алып килә.

### Ялҡауҙар һәм... "өкө"ләр ауырыуы

Диабеттың башланыуы гормондар эшмәкәрлегенә лә бәйле. Австрияның Инсбрук университеты ғалимдары шәкәр диабеты менән сирләгән 1,5 мең кешегә һорау алыу үткәргәндә, 50 йәшкә тиклемгеләр араһында ирҙәрҙең 15, ҡатын-ҡыҙҙарҙың 10 проценты ғына енси тормоштан бер ни тиклем ҡәнәғәт булыуын асыҡлаған.

Шулай уҡ төндә күңел күтәренкелеге кисереүсән, йоҡларға һуң ятҡан кешеләргә диабет хәүефе янай. Ни өсөн тигәндә, эндокрин системаһының эшмәкәрлеге төндә түгел, ә иртәнсәк активлаша. Шуның өсөн гормондар эшкәртеп сығарыу тәбиғи рәүештә дөрөҫ барһын өсөн кешенең ваҡытында йоҡлап, ял итеп, организмына яңы көс биреүе мөһим. Ә инде таңғары ғына йоҡларға ятыу организмдың яйлап инсулин эшкәртеп сығарыуын боҙоуға килтерә.

Диабет - әлбиттә, ялҡауҙар сире лә. Танылған физиолог-диабетолог Б. Жерлыгин, диабеттың башланғыс стадияһына дусар булған 80 процент сирленең ҡанындағы шәкәр кимәлен физик күнекмәләр ярҙамында ла нормаллаштереп була, тип раҫлай. Диабет менән сирләүселәр өсөн иң файҙалы физик күнекмә - саңғыла йөрөү һәм һыуҙа йөҙөү. Тик быларҙы эшләргә ялҡауланмаҫҡа ғына кәрәк.

### Хәүефлеләр төркөмөндә - маҡтансыҡтар

Әлбиттә, диабет менән һәр кем ауырымай. Психологтар шәхестең шәкәр диабеты ауырыуына юлыҡтырыр ҡайһы бер йомшаҡ яҡтарын айырым бил-дәләй. Мәҫәлән, тулы кәүҙәле һәм ныҡ һимереүгә бирешеүсән кешеләр диабетҡа дусар булырға мөмкин. Уларҙың кәйефе ҡырҡҡа төрләнеүсән. Бө-төн нәмәгә - илап ҡарай торған фильмдарҙан башлап, һауа торошоноң боҙолоуына тиклем нескә күңел менән кисереү, юғары һиҙгерлек хас.

Бындай кешеләр, ҡағиҙә булараҡ, киң күңелле, ләкин маһайыусандар. Маҡтанырға яраталар. Тыумыштан килгән һиҙгерлеге ярҙамында хәйләләшергә оҫталар. Башҡаларҙың иғтибарын үҙенә генә йүнәлтергә һәм даими аралашыуға үтә мохтаждар.

**Римма ҒӘББӘСОВА әҙерләне.**

*АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО*

# Әптерәй ағай мәҙәктәре

### Кем йүнһеҙерәк?

Беҙҙең Күрҙем ауылында МТС бар ине. Ауыр һуғыш йылдарында уның директоры булып Ғәйнетдинов тигән кеше эшләне. Машина- фәлән булмағас, төп көс ат булды.

Бер заман МТС директоры район үҙәгенә барып килер өсөн Әптерәй ағайҙан ат ектерә. Уның исеме Ғәбдрәхим булһа ла, ғүмер баҡый халыҡ уны Әптерәй тип кенә йөрөттө. Ағай үҙе лә бындай ҡушаматҡа асыуланмай ине.

Районда йомошон йомошлап ҡайтҡас, директор Әптерәй ағайҙы саҡыртып алып, әрләшергә тотонған. "Йүнһеҙ, ат егә лә бемәйһең, районға барғансы атың биш тапҡыр туғарылды",-тип ярһый икән был. Әптерәй ағай иһә мут ҡына йылмайып, былай тип яуап бирә: "Һин, Ғәйнетдинов иптәш, минән дә йүнһеҙерәкһең икән. Мин еккән ат бер тапҡыр, һинең еккән дүрт тапҡыр туғарылған бит!". Ысынмы-бушмы, директор был хәлде үҙе һөйләп, көлөп йөрөгән, имеш.

### Ҡоҙоғомдо һатам

Элек халыҡты һалым, заем менән яфалай торғайнылар. Әлеге Әптерәй ағайҙы ла ауыл Советына саҡырып, тетмәһен тетәләр.

-Ағай, һин ҡасан түләйһең бурысыңды? Түләһәң түлә лә, түләмәһәң, хужалығыңда нимә бар, барыһын да тартып алабыҙ! - тип янайҙар. Әптерәй ағай юғалып ҡалмай:

-Бына әле генә күрше ауылдан килеп, ҡоҙоғомдо һатып алырға һөйләшеп киттеләр. Улар килеп, ҡоҙоҡто алыу менән һеҙгә аҡсаһын түләрмен, - тип ҡотола. Әптерәй ағайға ышанып, уның менән килешкән һалым инспекторы менән ауыл Советы рәйесе байтаҡ ваҡыт уҙғас ҡына һуштарына килә:

-Атаҡ, ҡоҙоҡто һатып булалыр шул? Әптерәй беҙҙе тағы ла шыма таҡтанан шылдырҙы бит!

Шулай итеп, Әптерәй ағай йәнә һыуҙан ҡоро сығып, тапҡырлығын күрһәтә.

**Ғәҙилә ӘСӘНОВА.**

ЙӘН ОРАНЫ

# АСЫЛЫБЫҘҘЫ АСЫР...

## зыялылар һүҙе ҡайҙа?

**Бөгөнгә тормошобоҙ, йәшәйешебеҙ, көнитмешебеҙ хаҡындағы уйланыуҙарымды барыбыҙ ҙа яратып өлгөргән, хөрмәт иткән, башҡорт рухи донъяһын яҡтыртҡан " Киске Өфө" гәзите уҡыусыларына, дуҫтарына еткерергә уйланым.**

Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай ағай Кәримдең ошо һүҙҙәрен тағы бер тапҡыр иҫебеҙгә төшөрәйек: "Әҙәми заттың ер тетрәүҙән, туфан ҡалҡыуҙан, йыһанда килеп тыуған фажиғәләрҙән түгел, хатта атом һуғышынан да түгел, ә араҡынан, наркотиктарҙан, ядро һуғыштарынан, зарарлы газдарҙан, компьютер нурҙары ағымынан, рухи тарҡалыуҙан һәләк булыуы ихтимал, әгәр бөгөн аҡылыбыҙға килмәһәк..." Аҡыл эйәһенең һәр һүҙе, халыҡ тәжрибәһенә, аҡылына, дөйөм кешелектең меңәр йылдар буйы һынаған рухи - әхләҡи ҡиммәттәренә нигеҙләнгән.

Ә нимә һуң ул РУХ? Рух - бик киң, тәрән мәғәнәле, фәлсәфәүи төшөнсә ул. Рух - ул халыҡты халыҡ, милләтте милләт итеп тотоусы, йәшәтеүсе, уның бөтә булмышын, асылын билдәләүсе "алтын бағана". Өс кенә хәрефтән һәм өндән торған һүҙгә күпме мәғәнә һалынған. Рухты мин ҡояш менән сағыштырыр инем. Ер йөҙөндә ҡояшһыҙ йәшәү булмаған кеүек, рухһыҙ ҙа йәшәү юҡ.

Рух ҡояшыбыҙҙың һүрелеүе, рухтың ҡаҡшауы нимәгә килтерә һуң? Беҙ тормошобоҙға, тирә - яғыбыҙға һуңғы йылдарҙа тик "алһыу күҙлек" кейеп, шуның аша ҡарарға өйрәнеп киттек, буғай. Халҡыбыҙҙың, бигерәк тә ауыл кешеләренең (бөтәһе лә түгел) көнитмешенең насарайыуы, эшһеҙлек, эскелек батҡағына батыу сәбәптәрен беҙ иң тәү сиратта йәмғиәтебеҙҙә барған кире үҙгәрештәр, иҡтисадтың түбән тәгәрәүе, икенсе ҡулдарға күсеүенә, колхоз-совхоздарҙың тарҡалыуына бәйләп аңлатырға әүәҫләнеп киттек. Беҙ йәмғиәттәге барған иҗтимағи, сәйәси, иҡтисади, социаль үҙгәрештәргә әҙер булмай сыҡтыҡ. Хәҙерге көндә лә ҡулайлаша алмай йонсойбоҙ...

Сәбәбе нимәлә һуң? Минең уйлауымса, рухи яҡтан ныҡ халыҡ быларҙың береһенә лә бирешмәҫ, аптырап, баҙап ҡалмаҫ ине. Беҙ рухлы халыҡмы? Һис шикһеҙ! Бөйөк мәғрифәтсе, ғалим, әҙип Риза Фәхретдиновтың ошондай һүҙҙәре бар: " Әҙип һәм ғалимдары булмаған халыҡ - бәхетһеҙ, мәшһүр кешеләре булмаған халыҡ - яҡлаусыһыҙ, әҙәбиәте булмағаны - рухһыҙ". Аллаға шөкөр, донъя кимәлендәге билдәле ғалимдарыбыҙ, мәшһүр кешеләребеҙ, данлыҡлы әҙиптәребеҙ менән ғорурлана алабыҙ. Ләкин, минеңсә, һуңғы ваҡытта ябай халыҡ менән зыялыларыбыҙ, шәхестәребеҙ араһында уртаҡ фекер, бәйләнеш юҡ. Ике яҡ та, ике ярҙа тороп, бер - береһенән ишетмәгән, аңламаған кеүек... Рухи яҡтан яңырыу, күтәрелеш булғанда ғына кешеләрҙә өмөт, алға ынтылыш булыр ине. Юҡҡа ғына Салауат Юлаев: "Рухым күтәрелде минең дә, эйәрләнем мин дә атымды,"- тип халҡын азатлыҡҡа, яуға әйҙәмәгәндер... Батырыбыҙҙың көслө рухын һындырыр өсөн тыуған еренән, халҡынан, хатта теленән айырғандар, ләкин Салауат, хатта алыҫ һөргөндә лә, үҙ - үҙенә, Тыуған иленә, халҡына, инаныуҙарына хыянат итмәгән.

Тыуған Башҡортостаныбыҙҙа, тыуған район - ауылыңда ла үҙ эшеңде асып, тир түгеп, үҙеңде, ғаиләңде ҡарарға була бит. Юҡ шул, ҡайһы берәүҙәр икенсерәк уйлай. Рәсәйҙең төрлө төбәктәренә, сит илгә оҙон акса юллап китеүселәр аҙмы ни? Күпме талантлы шәхестәребеҙ, аҫыл ирҙәребеҙ, йәш егеттәребеҙ, гүзәл заттарыбыҙ сит тарафтарҙа ғүмерҙәрен заяға уҙғара. Илдәге демографик хәлдә яҡшыртыуҙы, бәлки, ошонан башларғалыр? Кешене, шәхесте рухи тамырҙарынан айырыу һәләкәткә илтә. Юҡҡа ғына Әхмәтзәки Вәлиди Вата-нынан, халҡынан, яҡындарынан айырылырға мәжбүр булғас, алыҫ Төркиәлә: "Сит ил үҙәндәрендә рухым һис тыныслыҡ тапманы...",- тип һағышланмаған да, "Илсе Ғайса"ны йырлап моңланмаған...

Милләттең бәҫен күтәреү өсөн тәү сиратта киләсәк быуынға рухи тәрбиә биреү хаҡында хәстәрлек күрергә кәрәк. Йәштәрҙең тормошта үҙҙәренең һукмағын, тәғәйен урынын таба алмауҙарына эс бошоп китә. Ҡатнаш никахтар, әхләҡи ҡанундарҙың ҡаҡшауы бөгөнгә көндөң ҡотолғоһоҙ күренешенә әйләнеп бөттө инде.

Кешелеклелек, әхләҡ, иман китте. Битарафлыҡ, көнсөллөк, көҙөл төшөнкөлөгөнә бирелеү, күҙ буяу кеүек тормоштоң кире күренештәре баҫты йәмғиәтебеҙҙе. Матди байлыҡҡа ғына ынтылып, рухи ҡиммәтте юғалтып ҡуймаһаҡ ине. Хәҙерге көн талабынан сығып, беҙгә кисекмәҫтән үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе үҙгәртеп ҡорорға кәрәк. Бер - беребеҙгә иғтибарлыраҡ булайыҡсы, милләттәштәрем. Тормоштоң ығы-зығыһы ла ҡаҡшата рух ныҡлығыбыҙҙы. Мостай Кәримдең һүҙҙәрен иҫкә төшөрәм: "Мин тыуған илемдә рухи пропискаһы булмаған кешенән ҡурҡам. Ерҙә шундай прописка булыуы милләт пропискаһынан бер ҙә кәм түгел".

Асылыбыҙға ҡайтайыҡ. Уның өсөн рух төшөнсәһен онотмаҫҡа кәрәк. Рухи ныҡлыҡҡа өлгәшеү өсөн, һәр беребеҙгә өс шарт үтәү мөһим: маҡсат, ышаныс, ихтыяр көсө.

**Фекеремде тағы ла аҡыл эйәһе Мостай Кәрим һүҙҙәре менән тамамлап ҡуйғым килә: "Заманыбыҙҙың һәм көрәшебеҙҙең рухы менән һуғарылған кешеләр генә металл иҫәгенән, бөйҙәй башағынан, буяуҙарҙан һәм моңдарҙан, илһамлы һүҙҙәрҙән кешеләр менән үҙҙәренә бәхет тыуҙырасаҡ". Милләттәштәрем, Рух ҡояшыбыҙ бер ҡасан да һүрелмәһен, һүнмәһен. Рух һүнмәһә, ил үлмәҫ!**

**Ғайса ИШМӨХӘМӘТОВ.**
Ейәнсура районы.



УҢЫШ ҠАҘАН

## Аҡыллы кешеләр кәңәше

**Кеше электән уңыш ҡаҙаныр өсөн зиһенен камиллаштырырға, һәр нәмәнең ыңғай яҡтарын күрергә, яңыса фекер йөрөтөргә ынтылған. Былар хаҡында бөйөк шәхестәр аҡыллы кәңәштәрен яҙып ҡалдырған. Шундай кешеләрҙең бер нисәүһен генә атап үтәм.**

Барыһы ла Гермес Трисмегистың кеше аҡылы ярҙамында материя булдырырға мөмкинлеген өйрәнеүенән башлана. Трисмегис, уй-фекерҙәр тулҡыны вакилалар, әйберҙәр, осрашыуҙарға әүерелеп, тығыҙ бер күренеш хасил итә, тип яҙған.

Аңлауығыҙса, беҙҙең ыңғай уй-фекерҙәребеҙ шул тиклем бай һәм уларға шаһит булыу аҡылыбыҙҙы тағы ла яңы ҡаҙаныштар яуларға рухландыра. Йондоҙҙарға табан үктәлгәндә шуны онотмайыҡ: "Кеше үҙ яҙмышына үҙе хужа".

Аҡыл көсө бик ҙур һәм ул аҙағынаса өйрәнелмәгән әле.

Кеше яҙмышындағы вакиғалар уның аңында ниндәйҙер идеаль структура тыуыуы һөҙөмтәһе ул. Идеаль структураң ниндәй - уның һөҙөмтәләре лә шундай.

Шуның өсөн үҙебеҙҙә ҡулға алайыҡ, ихтыяр көсөбөҙҙө юғалтмайыҡ, сөнки был тормошта иң сетерекле хәлдәрҙә, дуҫиштәрең ярҙам итеүгә ҡарамаҫтан, һине үҙеңдән башҡа бер кем дә ҡотҡармаясаҡ. Беҙ бит үҙ елкәбеҙҙә татып ҡарар өсөн ниндәй ҙә булһа тәжрибәне үҙебеҙ һайлайбыҙ. Бер кем дә, һин шуны эшлә, тип мәжбүр итмәй. Ошо хәҡиҡәттең төп асылына төшөнгән кеше - үҙеңде азат һәм өр-яңы тормошта итеп тойған иң бөйөк көндәреңдең береһе буласаҡ.

"Ҡасан һеҙ быны аңлайһығыҙ - тормошоғоҙҙа шул минуттан барыһы ла үҙгәрәсәк. Ә инде ошо хәҡиҡәтте бик күп кешеләр аңлаһа, тотош планетабыҙ үҙгәрәсәк", тип яҙған бит икенсе бер аҡыллы зат Нил Доналд Уэлш та үҙенең "Алла менән берләшеү" тигән китабында.

Ниндәйҙер маҡсатҡа өлгәшергә теләгәндә, тәүҙә уңышһыҙлыҡтар ҙа булыр, әммә уларҙы сәмләнеп, рухланып еңеп сығырға өйрәнергә кәрәк һәм барыһы ла яҡшы булыр. Мәҫәлән, бик күп бестселлерҙар авторы, миллиондарса кешеләрҙе үҙ көсөнә ышанырға рухландыра алған, һоҡланғыс, ҡыйыу ҡатын Луиза Хейҙы алайыҡ. Уны бала ғына сағында бер әҙәм көсләй. Үҫә төшә ғаиләләрендәге проблемалар һаулығын ҡаҡшата һәм тора-бара унда яман шеш барлыҡҡа килә. Табиптар, тиҙҙән үләсәкһең, тиһә лә, ҡыҙ һәр ваҡыт үҙен тик ыңғай уй-фекерҙәр генә уйлап йәшәүгә һәм күтәренке кәйефкә көйләп, был яман ауырыуҙан котола. Луиза Хейҙың яратҡан һүҙҙәре һиңә лә ярҙам итһен:

"Мин - һоҡланғыс зат! Үҙемде бик яҡшы тоям! Был донъяла йәшәүемә рәхмәтлемен! Теләһә ҡайһы проблемамды ыңғай хәл итеремә ышанам!"

УЙЫНЛЫ-ЫСЫНЛЫ ҺЫНАМЫШ

## "ҺИН НИНДӘЙ МИЛЛӘТТӘН?"

**1. Яратҡан миҙгелең**
а) йәй - 1
б) ҡыш - 2
в) йәйен - ҡыш, ҡышын - йәй - 3

**2. Аҡыл килә:**
а) кис - 1
б) иртән - 2
в) төштән һуң - 3

**3. Тәнең ҡысытһа:**
а) табипка күренәһең - 1
б) мунса инәһең - 2
в) тырнанаһың - 3

**4. Йоҡларға ятыу:**
а) ята икәү, тора берәү - 1
б) икәү ята, икәү тора - 2
в) икәү ята, өсәү тора - 3

**5. Ҡатындарҙың яратҡан төҫө:**
а) ҡара - 1
б) аҡ - 2
в) ҡыҙыл - 3

**6. Насар еҫ сыҡмаһын өсөн:**
а) йыуынаһың - 1
б) носкиҙарыңды алмаштыраһың - 2
в) одеколон һөртәһең - 3

**7. Баш тәҙәтер өсөн нимә эсәһең:**
а) кофе - 1
б) рассол, аҙаҡ араҡы - 2
в) ҡорот-ҡатыҡ, аҙаҡ араҡы - 3

**8. Кем-кемгә ярамай:**
а) ҡәйнә кейәүгә ярамай - 1
б) кейәү ҡәйнәгә ярамай - 2
в) килен ҡәйнәгә ярамай - 3

**9. Байлыҡ - ул:**
а) акса - 1
б) өй, ер - 2
в) мал, йә ҡатындар һаны - 3

**10. Яратҡан эсемлек:**
а) иртән - кофе, көндөҙ - сәй, кис - йылы һөт - 1
б) көндөҙ - араҡы, кис - һыра, иртән - рассол, һыу - 2
в) иртән - сәй, көндөҙ - сәй, кис - сәй - 3

**Очколар һанына ҡара ла, үҙеңдең ниндәй милләттән икәнеңде билдәлә;**
1) 0-дән аҙ: һин - чукча
2) 1-10 - инглизһең
3) 11-20 - урыҫһың
4) 21-30 - башҡортһоң
5) 30-ҙан артыҡ - һин барыбер чукча.

**Фәнүр ШАҺИЕВ.**
Учалы районы.

✓ ***Әгәр эшлеклелек сифаттары буйынса үҙеңдең дә түбәнерәк хеҙмәткәрҙе эшкә алаһың икән, тимәк, һинең кимәлең уныҡынан да түбәнерәк икәнде иҫбат итәһең.***



*КИТАБЕННАС*

**Китап - иң ҙур бүләк, тиҙәр. Был юлы беҙ бер ыңғайҙан ике китаптың ҡыуанысын һөйөнсөләргә булдыҡ. Һөйөнсө!**

# Һөйөнсөбөҙ ишле, авторҙарға - бишле!

## Сәхрә ҡошон тыңламаған - бәхетһеҙ

Китап сығарыу кемгәлер дан, кемгәлер нан. Миңә ҡалһа, Әхмәт Үтәбайға был шөғөлдөң бөтөнләй башҡа яғы хас. Күңел торошоноң китап булып формалашыуы уны күберәк борсой булһа кәрәк. Юғиһә, китап сығарыуҙы беренсе урынға ҡуйып, күптән шул юсул менән дан яулар ине. Сөнки, талымһыҙ иждадсы




буларак, уның китап итеп баҫтырып сығарырҙай әйберҙәре әҙ түгел, тимәксемен. Нан да түгел, сөнки йәшәр өсөн бол туплаурға уның башҡа сығанаҡтары ла бар. Күптән түгел нәшер ителгән "Сәхрә" - Әхмәр Үтәбайҙың икенсе проза китабы. Был юлы ла яҙыусы асылына тоғро ҡалған: авторҙың күңел торошона хас булған хыяли ысынбарлыҡ китапҡа тағы һәр бер әҫәрҙә сағыла. Күңел торошон, күрәһең, әҙер ҡалыпҡа, башҡалар өсөн ғәҙәти булған һауытҡа һалып бирер булмай. Шуғалыр ҙа, Әхмәр яңы формалар, һүрәтләү саралары эҙләй. Күңел торошоноң тағы бер яғы бар бит әле. Уны кеслән тағып булмай. Шуғалыр ҙа, Әхмәр үҙенә генә хас һутлы теле менән күңеле нисек тоя, шулай иждад итә - вакиғалар теҙмәһендә урын, ваҡыт, заман төшөнсәһе бергә укмашҡан. Күңел торошон сағылдырған әҫәрҙәрҙең тағы бер үҙенсәлеге шунда: уларҙы уҡыу өсөн дә ярашлы күңел торошо кәрәк. Ваҡыт үткәреү өсөн эш араһында ғына уҡып булмай уларҙы. Шуға ла, "Сәхрә" китабын ҡулына алғандар уны көн үткәреү өсөн генә уҡыуға иҫәп тотмаһын. Әҫәрҙәрҙең төп идеяһы күңел торошоғоҙ авторҙың күңел торошо менән тап килгәндә генә аңлашылаҫаҡ. Китап шуныһы менән ҡыҙыҡлы ла.

Мәҫәлән, китапҡа исем биргән "Сәхрә" хыялнамәһен алайыҡ. Әгәр ҙә үҙегеҙҙе сәхрә киңлегенә тиң мөхәббәт тойғоһона көйләмәһәгеҙ, әҫәрҙең йөкмәткеһен генә уҡып сығырһығыҙ, тәрән, саф һөйөү тойғоһонон тәмен тоймаҫһығыҙ. Быны китапҡа ингән башҡа әҫәрҙәр тураһында ла әйтергә була.

## Бәхет - ул шөкөр итә белеү

"Бар менән ҡәнәғәт булһа белгәндә генә бәхет йылмая. Йоҡонан уяндыңмы - ҡыуан, тәмле итеп ашап алғас, йылмай, Хоҙайға рәхмәт уҡы - миллионер булмауыңа бер ҙә иҫең китмәһен. Эш көнө алдынан еңдәреңде һыҙған - эш байрамға әйләнер. Өйөңә имен-аман ҡайтҡаныңмы - ғорурлан: һине дүрт күҙ менән һағынып көткәндәр. Тормош үҙе байрам булғанда, шатлыҡ өсөн һылтау эҙләү кәрәкмәй", - ти "Бәхетле булам тиһәң" китабының авторы Тәлғәт Абдрахманов.




Яңы сыҡҡан был китапҡа авторҙың тәрән мәғәнәле афоризмдары һәм тормош тураһында уйланыуҙары ингән. Берәй фекеребеҙҙе йөпләү ихтыяжы тыуғанда беҙ тарих төпкөлдәренән килгән сит мөхит афоризмдарын ҡулланабыҙ, туған телебеҙҙә аралашканда халыҡ әйтемдәрен, мәҡәлдәрен хуп күрәбеҙ. Әле беҙҙең мөхиттә афоризм жанрына тотонорға баҙнат иткән авторҙарыбыҙ юк кимәлендә. Күрәһең, еңел жанр түгелдәр инде. Афоризм, йәғни тапҡыр әйтелгән хикмәтле һүҙҙәр теләк буйынса ғына көн һайын "тыуып" тормай бит. Улар - күп белеүҙең, тәжрибәнең, уйылып китеп уйланыуҙың һөҙөмтәһе. Китапты уҡып сыҡҡас, ысынлап та, афоризмдарҙың тыуыу мөхите бар икәненә ышанырға була. Уларҙың төп үҙенсәлеге шунда, буғай. Әйткәндәй, гәзитебеҙҙең даими уҡыусылары Тәлғәт Абрдахмановтың афоризмдары менән "Киске Өфө" гәзите аша танышҡайны инде. Авторҙың рус телендәге был китабын "Киске Өфө" журналисы Радик Өмөтҡужин башҡортсаға ауҙарҙы. Китаптың иждад итеүендә гәзитебеҙҙең дә өлөшө булғас, уның донъя күреүенә беҙ ҙә шатланабыҙ һәм һөйөнсөләйбеҙ.

**Хәснитдин ШӘЙХИН.**

*АҠЫЛ – ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәкикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# Битарафтарҙан ҡурҡ

Үҙебеҙ ниндәйҙер йомош кушҡан кешене ҡат-ҡат тикшереү -ул, үҫәме-юҡмы, тип, тикшереү өсөн генә үҫентене ерҙән һурып сығарыуға тиң.
**(Ҡытай аҡылы).**

Һәр юғалтыу - ул табыш. Һәр табыш - ул юғалтыу.
**(Йәләлетдин Руми).**

Үҙ-үҙе менән идара итә алмағандар башҡалар менән дә идара итә алмай.
**(Инглиз мәҡәле).**

Белмәйем, ҡайһыһы яҡшы: файҙа килтергән яуызлыҡмы, әллә зыян килтергән изгелекме?
**(Микеланджело).**

Еңеү - ул ахмаҡлыҡ. Еңергә түгел, ә ышандырырға кәрәк - быуа ошо данға бәрәбәр.
**(Виктор Гюго).**

Яҡшыраҡ һикереү өсөн артҡа китеү кәрәк.
**(Француз мәҡәле).**

Аҡыллы булғың килһә, аҡыллы һорау бирергә, иғтибар менән тыңларға, тыныс ҡына яуап бирергә һәм әйтер һүҙең булмаһа, һөйләүҙән туктарға өйрән.
**(И. Лафатер).**

Үҙ-үҙеңә ышанысыңды ҡаҡшатырға теләгәндәрҙән ҡас. Был ҡылыҡ вак кешеләргә хас. Бөйөктәр һиңә, киреһенсә, һин дә бөйөк була алаһың, тигән тойғоно һеңдерер.
**(Марк Твен).**

Күреүе еңел ул, алдан күреү ауыр...
**(Бенджамин Франклин).**

Йылы тойғоларыңды оҙаҡ йәшерһәң, улар һыуыныуы ла мөмкин.
**(Ж. Итье).**

Кем бик тиҙа үҙ етәксеһенең етәксеһе булырға ынтыла, ул үҙенә буйһоноусыларҙың буйһоноусыһы ғына булып ҡалыуы ла ихтимал.
**(Веслав Брудзиньский).**

Әгәр ҙә кемдеңдер белеме аҡылынан күберәк булһа, ул үҙ белеменән үҙе яфа сигергә лә мөмкин.
**(Ибн Авд ал-Барр).**

Әгәр эшлеклелек сифаттары буйынса үҙеңдең дә түбәнерәк хеҙмәткәрҙе эшкә алаһың икән, тимәк, һинең кимәлең уныҡынан да түбәнерәк икәнде иҫбат итәһең.
**(Р. Грант).**

Насар уңыштан һуң да сәсергә кәрәк.
**(Сенека).**

Дошманыңды еңә алмаһаң, уның менән берләш.
**(Теодор Рузвельт).**

Дошманыңды еңер өсөн унан көслө булырға ынтылма, ә уны үҙеңдән көсһеҙ ит.
**(Боронғо ҡытай мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: " Дошманданрыңдан ҡурҡма - иң насар осраҡта улар һине үлтерергә мөмкин. Дуҫтарыңдан да ҡурҡма - иң насар осраҡта улар һиңә хыянат итергә мөмкин. Битарафтарҙан ҡурҡ - улар үлтермәй ҙә, хыянат та итмәй, әммә донъялағы бар хыянаттар һәм үлтерештәр уларҙың өнһеҙ ризалығы менән ҡылына".**

*КЕМ АЛЫК?*

# Моң кисәһе

## шағирға арнала

Халкым, илем, телем тип янған арҙаҡлы шағирыбыҙ Рәми Ғарифовтың юбилейына арнап, йәш, популяр башҡорт йырсылары "Умырзая йыры" исемле концерт әҙерләне. Ул 17 мартта Башҡорт дәүләт филармонияһында буласаҡ. Азат Йыһаншин, Фәрүәз Урманшин, Гөлинур Юламанов, Ринат Фәттәхов, Нәркәс Сиражетдинова, Дияна Ишниязова, Сәғиҙулла Байегет, "Любизар", "Ант", "Бүреләр" төркөмдәре Рәми Ғарифовтың үлемһеҙ шиғырҙарына яҙылған йырҙарын тәкдим итәсәк.

Гәзит уҡыусыларға ошо концертка килеү мөмкинлеге биреп, викторина һорауҙары тәкдим итәбеҙ. Дөрөҫ яуап биреүсе өс кешене, һәр ваҡыттағыса, ике кешелек саҡырыу ҡағыҙы көтә!

**1. Рәми Ғарифовтың йөрәген тетрәндергән сәйәси ваҡиға хаҡындағы поэмаһы нисек атала?**

**2. Р. Ғарифовтың тәүге китабы нисек атала һәм ҡасан сыҡҡан?**

**3. Быйыл Р. Ғарипов исемендәге премияға кемдәр лайыҡ булды?**

**4. Азат Йыһаншин шағирҙың ниндәй йырҙарын башҡара?**

**5. Р. Ғарифовтың нисә балаһы бар һәм уларҙың исемдәре?**

# ҠОТЛАЙБЫҘ!

Хәйбулла районының Аҡъяр ауылында йәшәүсе еңгәйебеҙ **Лениза Сәлимгәрәй ҡыҙы Биктимерованы** оло юбилейы менән ҡотлайбыҙ! Бөтөн ғүмерен медицинаға арнап, 50 йылдан ашыу халыҡ һаулығы һағында торған, бына тигән патриот улдар үҫтергән, хәҙер инде ҡартәсәй булып ейәнейәнсәрҙәрен тәрбиәләшкән, атай йорто йылыһын һүрелтмәй һаҡлап, балаларына терәк-таяныс булып, матур ғүмер иткән еңгәйебеҙгә һаулыҡ, рух ныҡлығы, зиһен яҡтылығы һәм шатлыҡ-һөйөнөстәр менән тулы оҙон ғүмер теләйбеҙ!

**Өфөлә йәшәүсе бикәстәре Мәрфуға Мусина, Мәрйәм Бураҡаева һәм Нәсимә Ғәйнуллина**.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

**Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры**

**10 февралдә** Х. Ибраһимовтың "Башмағым" музыкаль комедияһын тәкдим итә. 13 февралдә "Урал батыр" эпосы буйынса драма, 15 февралдә - "Һуңғы ғәйнә" музыкаль романтик драма, 16-нда - "Ҡатынымдың исеме Морис" комедияһы, 17-ндә - "Кәкүк ояһы", 20-ндә -"Хушығыҙ, хыялдарым!" драмаһы, 21-ндә - "Аты барҙың - дәрте бар" комедияһы, 24-25 февралдә "Ғүмер алда әле" драмаһының премьераһы һәм 27 февралдә "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" спектаклдәрен ҡарарға мөмкин. Белешмәләр өсөн телефон: 272-35-33, 273-81-27 һәм 273-80-38.

**«Киске Өфө» гәзитен ойоштороусы:**
Өфө ҡала округы Советы һәм хакимиәте
«Вечерняя Уфа» гәзите редакцияһы
**Баш мөхәррире:** Гөлфиә ЯНБАЕВА.
**Мөхәрририәт:** Вячеслав ГОЛОВ, Әхмәр ҮТӘБАЙ, Радик ӨМӨТҠУЖИН, Рәлиә БИКТИМЕРОВА

**Телефондар: 253-25-44; 252-39-99.**
E-mail: kiskeufa@ufacom.ru
«Киске Өфө»нөң индексы – 50665.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте, 2**53-25-44, 272-89-09, 273-35-92** телефондары буйынса, «Вечерняя Уфа», «Уфимская неделя» һәм «Киске Өфө» гәзиттәренә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 2**53-25-44** телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

Гәзит РФ Матбуғат эштәре, телерадиотапшырыуҙар һәм киң информация саралары министрлығының Волга буйы төбәк-ара территориаль идаралығында теркәлде. Теркәү таныҡлығы №7 –1675.

**Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1.**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды,
(450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.
Тиражы - 6212
Заказ 1089